ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 сентябрь (нарысай) 2022

№35 (1025)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 798 һум 60 тингә яҙыла алаһығыҙ. Өфө халҡы "Өфөматбуғат" киоскыларында - 600 һумға, коллектив менән редакцияның үҙендә (кәмендә 5 дана) 372-шәр һумға яҙыла ала. Гәзитебеҙә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Улар ҙа йоҡламай...



3

Рухи ныҡлыҡ нигеҙе - туған тел, туған мөхит



6

Атайҙан килә ҡурайға һөйөү һәм... эшһөйәрлек, донъя көтөү тәрбиәһе



8-9

Еҙтөймәлек... йәки Зәйнулла исемле егеттең мутлығы тураһында хикәйәт



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ВАТАНСЫЛЫҠ НИМӘНӘН БАШЛАНА,

## йәки Кемдәр мине илһөйәр итеп тәрбиәләне?

**Был һорауға мин иң тәүҙә мәшһүр йырсы Марк Бернес башҡарыуында яңғыраған "С чего начинается Родина?" ("Тыуған ил нимәнән башлана?") исемле йырҙағы һүҙҙәр менән яуап бирер инем: "Һинең әлифбалағы һүрәттәрҙән..." Эйе, юҡҡа ғына баланы ете йәштән уҡырға бирмәйҙәр, сөнки ул ошо йәштә, ҡайһы берҙәре иртәрәк, кемдер һуңыраҡ, шулай ҙа күпселеге ете йәштә шәхес булараҡ формалаша башлай. Әлегә ул уҡый белмәй, тик үҙе өсөн донъяны һүрәттәргә ҡарап өйрәнә...**



Бала, милләтенә ҡарамай, ошо йәштәрҙә үк тирә-яҡ менән ҡыҙыҡһына башлай: ни эшләп ул кеше мин аңламаған телдә һөйләшә, ниңә уның исеме улай яңғырай, ни эшләп улар ҡара йәки һары сәс-леләр һәм башҡалар. Бына ошо йәштә ҡыҙ йәки малай мәктәпкә бара һәм ҡулына әлифба ала. Нәҡ шул осорҙа уның күңеленә һалынған илһөйәрлек орлоҡтары ғүмерлеккә һаҡлана һәм үҫә төшкәс, хәйерле, изге, тейешле шытымдар бирәсәк.

Күмертауҙағы 2-се интернат-мәктәптә башҡорт класта-ры асылғас, атай-әсәйебеҙ беҙҙе шунда уҡырға бирҙе. Башҡортса белгән уҡытыусылар булмағанға күрә, мәктәптә бер сәғәт тә әсә телендә белем алмаған Марат Рафиҡов математиканан уҡытты. Терминдарҙы тәүҙә урыҫса әйтә, һуңынан башҡортсаға тәржемә итә. Миндә ул шулай итеп үҙ фәненә һөйөү уятты, һуңынан бик күп олимпиадаларҙа ҡатнашырға, еңеп сығырға булышлыҡ итте. Техникумда уҡыған осорҙа ла минең менән аралашты, тормошта ниндәй ауыр хәлдәргә тарыһам да, бирешмәҫкә өйрәтте. Уның биргән кәңәштәрен ҡулланғанда һәр ваҡыт уҡытыусыма эстән генә рәхмәт әйтә инем. "Бер ваҡытта ла сит милләт кешеһенә уның милләтенә ҡағылышлы ауыр һүҙ әйтмә; үҙеңдең хаҡлы булыуыңды белһәң дә, башҡа кеше менән бәхәсләшмә; ике кеше талашһа, ҡыҫылма", - тип әйтә торғайны. Бына былар ҙа илһөйәрлек тәрбиәһенең бер өлөштәре, сөнки әҙәплелек - беҙҙең халыҡтың иң күркәм һыҙаты. Мин илһөйәр, тип маҡтаныуҙан ни файҙа, уны ғәмәлдә тормошҡа ашырмаһаң? Бына шулай үҙе лә һиҙмәй генә, ә, бәлки, махсус рәүештә, беҙҙән илһөйәрҙәр тәрбиәләне был уҡытыусым. Тик мин техникумды тамамлаған йылда баҡыйлыҡҡа күсте, ғүмерем буйы һағынып иҫкә алам...

(Дауамы 2-се биттә).

ХӘЙЕРЛЕ СӘҒӘТТӘ!

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ТӘРБИӘЛӘҮ - ТӨП БУРЫС

**Баш ҡала мәғариф хеҙмәткәрҙәренең уҡыу йылы башланырҙан алда үткән август кәңәшмәһе ҡатнашыусыларҙың Башҡортостан һәм Рәсәй гимндарына аяғүрә баҫыуы менән асылғайны. Был юҡҡа түгел, сөнки киләһе уҡыу йылында илдәге һәр белем усағында уҡыу аҙнаһы тап шулай башланасаҡ. Ниһайәт, илебеҙҙә белем һәм тәрбиә биреүҙе берҙәй тигеҙ алып барыу зарурлығын таныныла. Ошондай бик мөһим үҙгәрештәр һәм талаптар менән башланған яңы уҡыу йылына Өфө педагогтарының әҙерлек кимәле, эш һөҙөмтәләре һәм киләсәккә пландары тураһында һөйләнелде кәңәшмәлә.**



(Дауамы 5-се биттә).

12+

БЫЛ АЙҘА...

# ҠАРШЫЛАЙЫҠ: ҺАРЫСАЙ КИЛӘ!



**Һарысай килә, ана, тупһаға менеп баҫты ла инде! Ошо араларҙа ғына интернет киңлегенә сыҡҡан фотолағы: "Их, августан һуң июнь булһа ине!" - тип моңайыусы кескәй ҡыҙсыҡтың йөҙө күҙ алдына баҫа. Ни хәл итмәк, ваҡытты кирегә бороп булмай. Әҫе, салт аяҙ көндәрҙе, сәскәле-еләкле болондарҙы, һыу инеүселәрҙең шат тауыштарына күмелгән йылға-күл буйҙарын хәтерләп, һағынып һөйләргә генә ҡаласаҡ, иллә мәгәр быйылғы йәйгә үпкә юҡ: һыуҙан алып утҡа һалһа ла, хәтәр йәшенле ҡойма ямғырҙарында ҡойондороп, аҙаҡ селләһендә ҡыҙҙырһа ла.**

Өс ай эсенә төрлө атмосфера күренештәрен һыйҙырып, йәй үҙенең бөтөн биҙәк-хазиналарын йомарт өләшеп, матур иҫтәлектәр бүләк итеп китте, рәхмәтлебеҙ уға. Тағы ҡасан булыр әле ундай йәй - белеп булмай. Бына тиҙҙән ҡайнар, ҡояшлы көндәрҙең йонсоу, һалҡын осор менән алмашынасағын күҙ алдына килтереү ҡыйыныраҡ булһа ла, көҙҙөң тәүге айын да асыҡ күңел менән ҡаршылайыҡ: ул да үҙенсә матур һәм гүзәл, йәйге ашҡыныуҙарҙан арындырып, күңелебеҙҙе уйсан һиллек менән сорнай торған тынлыҡ миҙгеле бит ул көҙ! Тик ул тынлыҡты ишетә, тыңлай белергә генә кәрәк.

Ә бына ниндәй сәләм-күстәнәстәре менән килер уның тәүге айы һарысай? Тәүҙәрәк интернетта был айҙа буласаҡ һауа торошо хаҡында хәүефле хәбәрҙәр пәйҙә булды. "Ирекле матбуғат" сентябргә шундай "шок-фараз" менән сығып яһаны: йәнәһе лә, беҙҙе "сығырынан сыҡҡан" көҙ көтә. Айҙың икенсе яртыһынан көндәр ҡапыл һыуытып ебәрә, ҡойма ямғырҙар,ҡар яуыуы ихтимал, хатта йолаға ингән "әбейҙәр сыуағы" ҡайғыһы ла булмаясаҡ, имеш. Ошондай хәбәр айҡанлы күңелдә тыуған хәүефте үҙебеҙҙең Башгидромет үҙәге хеҙмәткәре Анна Козаева бер аҙ тарата төштө. Көҙҙөң тәүге айы норма сиктәрендә көтөлә, тип вәғәҙә итә ул итеүен, ләкин бына икенсе сығанаҡтар буйынса Башҡортостанда һарысайҙың тәүге көндәре йылы торған хәлдә лә, тотош алғанда, ай ямғырлы һәм һалҡынсараҡ килә, көндөҙ уртаса һауа температураһы 11-14, төндә 4-8 градус йылы буласаҡ, тип фаразлана.

Ярай, ниндәй булһа ла ҡабул итербеҙ, тик тормошобоҙ - имен, үҙебеҙ иҫән-һау булып, йәйҙәребеҙҙе-ҡыштарыбыҙҙы ҡыуанып ҡаршылап-оҙатып йәшәргә яҙһын! Юғиһә, океан арьяғы державаһы ғына түгел, уның сәүектәре - нацизм идеологияһы менән аңдары томаланған ут күршеләр ҙә бит нисә йылдар инде хәҙер "аҫтан ҡырҡып", нисек тә тыныс тормошобоҙҙо болғарға маташалар. Дүрт өҙөн, ауыр йылдар буйы Ер йөҙө тарихындағы иң ҡанлы, иң ҡаты һуғышта фашистик Германияны еңеп, оккупантҙары ояһында дөмөктөргән һәм был Еңеү хаҡына өс тиҫтәгә яҡын млн халҡын юғалтҡан Рәсәй иле тыныслыҡ ҡәҙерен башҡа илдәр менән сағыштырғыһыҙ дәрәжәлә яҡшыраҡ белә. Ҡыҙғанысҡа күрә, Ватаныбыҙҙы ғына түгел, ярты Европаны фашист тырнағынан ҡотҡарған Ҡоралды Көстәребеҙгә бөгөн дә

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ВАТАНСЫЛЫҠ НИМӘНӘН БАШЛАНА,

## йәки Кемдәр мине илһөйәр итеп тәрбиәләне?

**(Башы 1-се биттә).**

Икенсе остазым тағы ла математика уҡытыусыһы - Зәки Исхаҡов булды. Техникумға инеү өсөн имтихандар бирергә килгәс, беҙҙең төркөм ултырған класс ишеген асып, кем башҡорт мәктәбен тамамлауын һораны. Мин ҡул күтәрҙем. "Иртәгә осрашырбыҙ", тип сығып китте. Аудиторияла өс математика уҡытыусыһы имтихан ала, Зәки Асыл улы ҡаршыһына барып ултырғас: "Былар беҙҙең телдә һанай белә, күберәк һандар ҡушып, билеттағы һорауға ҡарап һөйлә", - тине. Атайҙың тракторсы булып эшләгәнен белгәс, ниҙәр эшләүен һөйләргә ҡушты. Мин уның ер һөргәнен, нормала ҡаралған 5 гектар урынына етене һөрөүен, планды 140 процентҡа үтәүен теҙеп һөйләп киттем. Теге уҡытыусылар беҙгә ҡарап-ҡарап ала, төрлө һандар, процентттар тураһында һүҙ барғас, ышандылар, буғай, уҡытыусының "бишле" ҡуйыуы бер кемдә лә һорау тыуҙырманы. Һуңынан берене: "Беҙҙең егеттәр гел пединститутҡа бара, инженерҙар ҙа кәрәк бит беҙгә", - тип әйтеп ҡуйҙы.

Бына ошо ябай ғына башҡорт уҙаманының торғонлоҡ мөһөрө алған заманда өҫтән бер ниндәй күрһәтмә көтмәй, үҙ аҡылы менән, ҡулынан килгәнсә милли кадрҙар әҙерләргә тырышыуы илһөйәрлек өлгөһө түгелме ни? Был ике остазымдың, математика уҡытыусыларының, мине лә илһөйәр итеп, милли инженер итеп күрергә теләүҙәрен аҡланым кеүек. Хеҙмәт стажымдың сирек быуат йылын техник һөнәргә бағышлауым да нәҡ ошо уҡытыусыларымдың тәрбиәһелер тип уйлайым.

Етенсе класта уҡығанда, март айҙарында булһа кәрәк, Марат Миңлейәр улы алгебранан мәсьәләләр тотторҙо, сисеп ҡара, тине. Бер-ике көндән әҙер булғас, таҙа ҡағыҙға күсереп яҙырға ҡушты. Унда мине СССР Фәндәр Академияһы Себер филиалы махсус математика интернат-мәктәбенең 9-сы класына уҡырға алыуҙары хаҡында хәбәр ителәине. Ә мин бит 7-лә генә уҡып йөрөй инем. Был хаҡта ишеткән башҡорт теле уҡытыусыһы Хәҙисә Солтангәрәева дәрестән һуң ҡалдырып: "Һин әсә телен дә һәйбәт беләһен, ошо фәнгә ныҡлы баҫым яһа, математик булһаң, республикаға әллә ни файҙа килтерә алмаҫһың", - тигән кәнәш бирҙе. Уның кәнәшен тоттом. Районда башҡортса гәзит ойоштороп, хәҙлы яңға сыҡҡансы ун биш йыл уны етәкләнем. Быныһы инде тағы бер остазымдың тәрбиәһелер.

Беҙҙе уҡытыусылар илһөйәр итеп тәрбиәләне, шуға күрә бындай тойғо мәктәп партаһынан башлана. Үрҙә әйтелгән йырҙа "Яҡшы һәм тоғро иптәштәрҙән..." тигән юлдар ҙа бар. Тормош юлымда тоғро һәм, иң мөһиме, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләгән уҡытыусыларым осрауы менән бәхетлемен. Улар биргән белем республикама, халҡыма тоғро хеҙмәт итергә булышлыҡ итте. Ә инде әрме хеҙмәтенән бронь булғанда ла, Тыуған ил алдында бурысымды үтәргә барыуым уҡытыусыларымдың ил һаҡлау - ир-егеттең изге бурысы булыуҙы ҡаныма һеңдереүҙәренәндер, тип уйлайым.

Ил мәғариф системаһы етәкселегенә инеп оялаған, сит тарафтарҙа белем алған либералдар үҙҙәре илһөйәрлектең ни икәнен аңлаймы икән? Педагогтар тәрбиә менән аҙыраҡ шөғөлләнһен өсөн уларҙы бөтә буш ваҡыттарында төрлө отчеттар яҙырға мәжбүр итмәҫтәр ине бит, юғиһә. Уҡытыусылар - бер яҡта, балалар - икенсе яҡта. Етмәнә, хәҙер тыуып етмәйҙәр, гаджетҡа ултыралар. Унда беҙҙең балаларҙы нимәгә генә өйрәтмәйҙәр! Кемдәр киләсәк быуынды йәнһүрәттәр, төрлө уйындар менән тәрбиәләүгә күргәне бар? Минеңсә, илһөйәрлек - ул халҡыңды, кесе һәм оло Ватаныңды яратыу, үҙебеҙ кеүек алмаш тәрбиәләү. Бөтәһе лә тик үҙебеҙҙән тора.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республика халҡын Белем көнө менән ҡотланы. "Беренсе класҡа барған 55 мең уҡыусыбыҙ иртә һайын яраткан уҡытыусылары һәм дуҫтары менән осрашып ҡыуанһын! Башҡортостандың 500 мең уҡыусыһы - яҡшы уҡығыҙ һәм тормош юлын дөрөҫ һайлағыҙ! Башҡортостанда 200 меңгә яҡын юғары уҡыу йорто һәм колледж студенты бар. Бөтәгеҙгә лә уҡып сығып, ысын кеше булыуығыҙҙы теләйем! Уҡыусыларҙы, уларҙың ата-әсәләрен, уҡытыусыларҙы яңы уҡыу йылының башланыуы менән ҡотлайым", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

✓Рәсәйҙең мәғариф министры мәктәпте ремонтлау өсөн аҡса йыйыуға ҡарата үҙ фекерен белдерҙе. Уҡыусыларҙың ата-әсәләре кабинеттарҙы яңыртыу өсөн йыл һайын аҡса бирергә тейеш түгел. Бынан тыш, аҡса йыйыуҙы ойоштороу закон боҙоу тип иҫәпләнә. Был хаҡта Дөйөм Рәсәй ата-әсәләр йыйылышында илдең мәғариф министры Сергей Кравцов белдерҙе. "Аҡса йыйыу - енәйәт эше. Шуға күрә мотлаҡ хоҡуҡ һаҡлау органдарына һәм беҙгә хәбәр итергә кәрәк. Капиталь ремонт программаһына килгәндә, беҙҙә 7,5 мең мәктәпкә 500 миллиард һум бүленгән. Ә ағымдағы ремонт эштәре төбәк бюджеттары иҫәбенә башҡарыла. Шуға күрә бер кемдән дә аҡса йыйырға тейеш түгелдәр", - тине Кравцов.

✓Башҡортостанда биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 26 ҡатын-ҡыҙға "Әсәлек даны" миҙалы тапшырыла. Республика Башлығының тейешле указы рәсми хоҡуки мәғлүмәт порталында баҫылған. Улар араһында Аҫҡын, Баймаҡ, Балтас, Краснокама, Көйөргәҙе, Миәкә, Нуриман, Стәрлебаш, Учалы, Хәйбулла райондары, Сибай һәм Өфө ҡалалары вәкилдәре бар. 1998 йылда булдырылған миҙалға һигеҙ мендән ашыу әсә лайыҡ булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр 50 мең һум аҡса түләнә. Быға тиклем миҙал менән бүләкләнгәндәр өсөн түләүҙең күләме 17 241 һум ине.

✓Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы уҡыусыларға дәрестә телефон ҡулланыуҙы тыйҙы. Яңы уҡыу йылынан мәктәптә гаджеттарҙы файҙаланырға ярамай. Мәғариф министры Сергей Кравцов Бөтә Рәсәй ата-әсәләр йыйылышында ошо хаҡта белдерҙе. "Әгәр балаларҙың ниндәйҙер һорауҙары булһа, шылтыратырға рөхсәт ителә. Яңы санитар ҡағиҙәләргә ярашлы, 1 сентябрҙән дәрестә кеҫә телефонын ҡулланыу тыйыла", - тине Кравцов.

✓ *Әммә был юлы улар менән "һөйләшеү" ҡыҫҡа булыр: һаҡланыуҙың иң дөрөҫ юлы - агрессияға мәлендә отпор биреү һәм хаҡлыҡ, ғәҙеллек өҫтөнлөктәренән сығып эш итеү.*



тыңғы юҡ: әсе тарих һабаҡтарын бик тиҙ онотоп, ҡотҡарыусыһы арҡаһына бысаҡ ҡаҙарға маташҡан "ут күрше"ләрҙә фашистик көстәр баш ҡалҡыта. Әммә был юлы улар менән "һөйләшеү" ҡыҫҡа булыр: һаҡланыуҙың иң дөрөҫ юлы - агрессияға мәлендә отпор биреү һәм хаҡлыҡ, ғәҙеллек өҫтөнлөктәренән сығып эш итеү.

Әйткәндәй, был айҙа күршеләргә тарих һабаҡтарын иҫтәренә төшөрөргә уңайлы ла сығып тора: алдынғы аңлы кешелек **1939 йылдың 1 сентябре** - Гитлер Германияһының Польшаға һөжүм итеп, баҫып ингән көнөн Икенсе донъя һуғышының - башланған, ә **1945 йылдың 2 сентябрен** тамамланған көнө тип билдәләй. Оккупацияла ҡалған Польша халҡы фашистарҙың геноцид сәйәсәте арҡаһында 6 миллионлап кешеһен (ил халҡының 21,4 проценты!) юғалта, милли байлыҡтарының 38 проценты юҡҡа сығарыла, сәнәғәт предприятиеларының 20 проценты, һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәһенең 60 проценты емереклеккә әйләндерелә. Бөгөн иҫен юйған ошо Польшала уны Гитлер ҡоллоғонан ҡотҡарған совет һалдаттары иҫтәлеге мыҫҡыл ителә, тапала, һөрәлә һәм юҡ итергә маташыла.

Ә Украинала иһә совет һәйкәлдәрен күптән ҡырып бөтөрөп, хәҙер кешелек тарихындағы иң кешелекһеҙ вандаллыҡ акты ҡылына: Львов ҡалаһы властары хуплауында урындағы "Марс яланы" мемориалындағы ... 3 меңдән ашыу совет һалдаты ерләнгән ҡәберлекте юҡ итеп, бандерасылар "Украина геройҙарына" мемориал асмаҡсы икән.

Был айҙа, ҡайғылы булһа ла, бәхеткә күрә, яҡты көн дә бар әле. 1962 йылда уҡ әле, әйтерһең дә, нацистик көстәр баш күтәререн алдан иҫкәртергә теләгәндәр: **сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһе** Фашизм ҡорбандарын иҫкә алыу көнө (быйыл - **11 сентябрь**) тип билдәләнгән. Уның төп маҡсаты - бөтөн прогрессив кешелек донъяһының фашизм идеологияһын тергеҙеүгә ҡаршы көрәше. Ваҡыт үткән һайын, Икенсе бөтә донъя һуғышының тере шаһиттары сафы һирәгәйә бара. Киләһе быуындар кешелеккә фашизм тигән үләт сығанағы, ул килтергән миллионлаған бер ғәйепһеҙ ҡорбандар хаҡында китаптарҙан уҡып, фильмдарҙан ғына беләсәк, ә бөгөн был һуғыштың асылын, Советтар иле тарафынан яуланған бөйөк Еңеүҙең әһәмиәтен кәметергә, үҙҙәренә кәрәккәнсә борорға, фашизмды оятһыҙ рәүештә "аҡларға" маташыусы көстәр бар. Эстонияла, мәҫәлән, ошоға тиклем СС-тың 20-се дивизияһы ветерандары маршы ойошторолоп килһә, Латвияла элекке каратéлдәр парадҡа сыҡҡан...

Бая әйтелеп киткәнсә, Европа илдәрендә һәйкәлдәр һәм мемориалдар емертелә, тимәк, был илдәрҙә йәшәгән, ошо һуғышта туғандарын, яҡындарын юғалтҡан кешеләргә фашизм ҡорбандарын иҫкә алып, ихтирам күрһәтеп, сәскәләр һалырлыҡ һәйкәлдәр ҙә ҡалмаясаҡмы? Ә йәш быуындар һуғыш хаҡында хәҡиҡәтте ниндәй әҙәбиәттән, ниндәй китаптарҙан уҡып белер, кем ауыҙынан ишетер?.. Бәхеткә, хаҡлыҡ һәм хәҡиҡәт һағында уяу тороусылар ҙа бар донъяла. Был көрәштең башында - беҙҙең Рәсәй иле. Фашизм менән көрәштә Рәсәй ҡоро һүҙ һөйләүҙән алыҫ тора. Әле бына, Алла бойорһа, **8-9 сентябрҙә** Мәскәүҙә Халыҡ-ара фашизмға ҡаршы форум үтәсәк, ул тап бына ошо фашизм ҡорбандарын халыҡ-ара иҫкә алыу көнөнә бағышлана. Унда ветерандар һәм йәштәр ойошмалары етәкселәре, власть органдары вәкилдәре, сит ил ҡунаҡтары, Советтар Союзы һәм Рәсәй Геройҙары, студенттар, сәйәсмәндәр, тарих белгестәре ҡатнашасаҡ. Фашизмға - юл юҡ!

**Һарысайҙа иҫтәлекле көндәр:**

Белем көнө **(1)**, Икенсе бөтә донъя һуғышы башланған көн **(1939, 1 сентябрь)**, Икенсе донъя һуғышы тамамлана **(2 сентябрь, 1945 йыл)**, Рәсәй гвардияһы, Патруль-пост хеҙмәте көндәре **(2)**, Терроризмға ҡаршы көрәштә теләктәшлек **(3)**, Нефть, газ һәм ағыулыҡ сәнәғәте **(4)**, Халыҡ-ара хәйриә **(5)**, көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. М.И.Кутузов етәкселегендәге рус армияһының француз армияһына ҡаршы Бородино һуғышы көнө **(8 сентябрь, 1812 йыл)**, Финансист, Халыҡ-ара грамоталылыҡ, Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлек **(8)** көндәре, БР халыҡтарының милли кейемдәре, Дизайнер, Халыҡ-ара матурлыҡ **(9)** көндәре, Бөтөн донъя тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү **(10)**, Танкист, Фашизм ҡорбандарының Бөтөн донъя хәтер көндәре **(11)**, Программист **(13)**, Халыҡ-ара демократия **(15)**, Халыҡ-ара озон ҡатламын һаҡлау **(16)**, Урмансылар **(18)** көндәре, Бөтөн донъя рус берҙәмлеге, Халыҡ-ара тыныслыҡ **(21)** көндәре, Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн **(22)**, Машина эшләүселәр **(25)**, Диңгеҙ **(26)**, Бөтөн донъя туризм, Тәрбиәсе һәм мәктәпкәсә хеҙмәткәрҙәр **(27)**, Атом сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре **(28)** көндәре.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**1** - прозаик, РФ һәм БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Иҙрис Ноғомановҡа - 70 йәш** (1952).

**2** - Стәрлебаш районы ауыл хужалығы идаралығының баш агрономы, милли көрәш, гер күтәреү спорты буйынса тренер, Башҡортостандың атҡаҙанған физкультура хеҙмәткәре, гер күтәреү спорты буйынса Гиннесс рекордтар китабына ингән спортсы **Мансур Һөйәрғоловҡа - 75 йәш** (1947).

**6** - акушер-гинеколог, һөнәри сирҙәр буйынса ғалим, йәмәғәт эшмәкәре, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, РФ һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған табибы, РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы, Нуриман районының почетлы гражданы **Мәхмүзә Ғәйнуллинаға - 75 йәш** (1947).

**12** - дин эшмәкәре, мәғрифәтсе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең уҡытыусы-остазы **Хәбибназар Һатлыҡовтың тыуыуына - 160 йыл** (1862-1921).

**13** - педиатр, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 5-6 саҡырылыш РФ Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы, БДМУ кафедраһы профессоры, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы **Сәлиә Мырҙабаеваға - 65 йәш** (1957).

**22** - прозаик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С.Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты **Таңсулпан Ғарипоаға - 75 йәш** (1947).

**24** - педагог, телсе-ғалим, башҡорт тел белеменә нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Ғәббәс Дәүләтшиндың тыуыуына - 130 йыл** (1892-1937).

**29** - табип-офтальмолог, Өфө Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының бүлек мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, атҡаҙанған уйлап табыусыһы **Рәшит Ишбулатовҡа - 70 йәш** (1952).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

КӨНАУАЗ

# УЛАР ҘА ЙОҠЛАМАЙ...



**Бөгөн, 3 сентябрҙә, илдә Терроризмға ҡаршы көрәш көнө билдәләнә.**

Был көндә беҙ әле генә, 20 августа, бөтә Рәсәй халҡын тетрәндергән ваҡиғаны - Мәскәү өлкәһе Оло Вяземдар ауылы янында үҙ машинаһында билдәле журналист, сәйәсмән Дарья Дугинаны шартлатыуҙары тураһында ла тетрәнеп иҫкә алдыҡ.

Декабрь урталарында утыҙ йәшен генә тултырырға йыйынған Дарья Александровнаның кем алдында һәм ниндәй ғәйебе булды икән? Беҙ уны Үҙәк телевидение каналдарында ойошторолған теледебаттар аша белә инек. Ул телевидениеға Дарья Платонова псевдонимы менән сыға һәм февралдә башланған махсус хәрби операцияға ыңғай ҡараш белдерә, күрше дәүләттең көньяҡ-көнсығышында йәшәгәндәргә бөтә яҡлап ярҙам күрһәтергә саҡыра торғайны. Күптәрҙә уның оҙон тормош юлы үткән олпат ир уҙамандары, генералдар менән бер рәттән ҡыйыу, дөрөҫ фекер йөрөтөүе һоҡланыу уятҡандыр. Шуға күрә уға ҡаршы башҡарылған теракт бик ныҡ тетрәндерҙе лә инде.

Эйе, терроризмдың һәр осрағы ауыр кисерелә. Уның тоҙағына күптәр осраҡлы рәүештә килеп эләгә, бер ғәйепһеҙгә гүмере өҙөлә. Ҡайны берҙәре концертҡа, күңел асырға, ял итергә килә, ә уларҙы аҡылдан шашҡан, ҡоралланған "хайуандар" көтә. Күптәрҙең хәтерендәлер, 2002 йылдың октябрь айында Мәскәүҙең Дубровка биләмәһендә урынлашҡан Театр үҙәге бинаһында "Норд-ост" мюзиклына килгән тамашасыларҙы аманатҡа алдылар. Бандиттар менән ойошторолған һөйләшеү һөҙөмтә бирмәгәс, бинаны штурмларға ҡарар итәләр. Һөҙөмтәлә аманаттар, террорсылар, бөтәһе 174 кеше һәләк була.

Ике йыл да уҙып өлгөрмәне, 2004 йылдың 1 сентябрендә, Төньяҡ Осетияның Беслан ҡалаһында Белем көнөндә, яңы уҡыу йылы башланыу айҡанлы йыйылған, оҙайлы йәйге ялдан һуң бер-береһен һағынып килгән уҡыусыларҙы, ата-әсәне, уҡытыусыларҙы аманатҡа алдылар. Талап Мәскәү театрындағы кеүек: Чечен Республикаһы Ичкерия үҙаллылығын таныу. Бында ла Рәсәй властары террорсылар менән өс көн һөйләшеү алып барҙы. Һөҙөмтә булмағас, мәктәп бинаһын штурмларға булдылар. Уҡыу йортон баҫып алыусылар был юлы нығыраҡ әҙерләнгән булып сыҡты. Һөҙөмтәлә 334 кешенең, шул иҫәптән 186 баланың, ғүмере ҡыйылды...

Ошо ваҡиғанан һуң илебеҙҙә йыл һайын 3 сентябрь терроризмға ҡаршы көрәш көнө булараҡ билдәләнә.

Иҫкә алынған ваҡиғаларҙан һуң илебеҙ бер аҙ тынысланып ҡалды кеүек, ләкин биш йыл элек Санкт-Петербург метроһында халыҡ эштән ҡайтҡан ваҡытта булған шартлау террорсыларҙың йоҡламауын тағы бер тапҡыр раҫланы. Унда 16 кеше һәләк булды, бер ғәйепһеҙ кешеләр гүмере өҙөлдө.

Һәм бына тағы ла үҙ фекерен башҡалар менән ҡурҡмай, асыҡ-тан-асыҡ уртаҡлашҡан йәш сәйәсмән, перспективалы ғалим, журналист Дарья Дугинаның башына етте террорсылар. Хоҡуҡ һаҡлау органдары шартлатыуҙы ойоштороған кешене бер тәүлек эсендә тапты, әле уға кем ярҙам иткәнен асыҡлай...

Әйткәндәй... Иғтибар иткәнегеҙ бармы: телевизорҙан күрһәтелгән күп фильмдар бандиттар өсөн инструкция булып тора кеүек. Бер кис 20 каналды күсерә-күсерә ҡарап сыҡтым. Уның яртыһында тип әйтерлек ҡан ҡойош, урлашыу, алдашыу күренештәре - ә бит улар яҡшыға өйрәтмәй. Балаларыбыҙҙы ошондай каналдар йоғонтоһонан нисек һаҡларға? Был турала атай-әсәйҙәр, мәктәп кенә уйларға тейешме, уларҙың ғына көсөнән килерҙәйме был? Хәйер, атай-әсәйҙәрҙән, мәктәптән дә күп нәмә тора икәнен дә онотмайыҡ. Ә телеканалдарға килгәндә... Был турала айырым һөйләшеү кәрәк булыр.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә үҙ теләге менән махсус хәрби операцияның бурыстарын үтәгән республика яугирҙарына Рәсәйҙең дәүләт наградаларын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Луганск Халыҡ Республикаһы биләмәһендә хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған Белорет егете, кесе сержант Рәфил Әйүповтың туғандарына Батырлыҡ орденын тапшырҙы. Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәфил Әйүповты үлгәндән һуң Батырлыҡ ордены менән наградланы.

✓Башҡортостан Башлығы республиканың дауалау учреждениеларына автомобиль аҫҡыстарын тапшырған ваҡытта дауаханаларҙың баш табиптары менән коронавирус инфекцияһының таралыуына бәйле хәлде тикшерҙе. "Был инде миҙгелле грипп кеүек тәбиғи эпидемиологик процесҡа әүерелә. Сирләләр күбәйә, әлбиттә, ләкин беҙ хәлде контролдә тотабыҙ, әммә әлегә бер ниндәй ҙә сикләү сараларын индермәйбеҙ. Иң мөһиме - вакцинация һәм ревакцинация", - тине Радий Хәбиров журналистар менән аралашҡанда.

✓Йәш уҡытыусыларға Башҡортостан Хөкүмәте гранттары тапшырыласаҡ. 29 августа Премьер-министр Андрей Назаров тейешле указға ҡул ҡуйған. "Һәр береһе 40 мең һумлыҡ гранттар ике йылға бер тапҡыр конкурс нигеҙендә Башҡортостан Республикаһы дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеларының иң яҡшы 25 йәш уҡытыусыһына бирелә", - тип белдерҙеләр Мәғариф һәм фән министрлығында.

✓Дүртөйлө районының "Ынйыҡай" башҡорт фольклор ансамбле "Ҡаҙан һөлгөһө" VII халыҡ-ара халыҡ йыр-бейеү сәнғәте фестиваль-конкурсында Гран-при яуланы. Район хакимиәте башлыһы Риф Йосопов социаль селтәрҙә ҡыуаныслы яңылығы менән уртаҡлашты. "Ҡаҙан тамашасылары башҡорт фольклорына хайран ҡалды. Һеҙҙең менән ғорурланабыҙ!" - тип яҙҙы ул.

✓Башҡортостан көрәшсеһе Хәсән Нуриев 26-29 августа Тольяттиҙа уҙған Һамар өлкәһе губернаторы кубогына дзюдо буйынса бөтә Рәсәй оҫталыҡ турнирында алтын миҙал яуланы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, спортсы, Рәсәйҙең спорт мастеры нормативын үтәп, 60 килограмм ауырлыҡ категорияһында шәп һөҙөмтә күрһәтте. Республикабыҙҙың тағы бер вәкиле Хөсәйен Нуриев ярыштан бронза миҙал менән ҡайтты.

ҠЫҪҠАСА

# БЫНДАЙ ЯРҘАМ КӘРӘК!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йәш ғалимдарға һәм юғары мәктәптең йәш уҡытыусыларына дәүләт ярҙамы сараларын киңәйтеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Быйыл юғары уҡыу йорттарының һәләтле йәштәренә 200 миллион һумлыҡ гранттар бүленә. Яҡын арала гранттарҙы тапшырыу тәртибе һәм шарттары билдәләнә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙып сыҡты. "Йәш ғалимдарға торлаҡ шарттарын яҡшыртырға ярҙам итербеҙ тип әле үк әйтә алам. Шулай уҡ уларға Рәсәйҙең һәм доҫ илдәрҙең төп тикшеренеү үҙәктәрендә, университеттарында ғилми стажировка үтеү мөмкинлеге бирелә. Королёв һәм Курчатов кеүек билдәле уңайлы, лайыҡлы шарттарҙа йәшәүе һәм эшләүе беҙҙең өсөн бик мөһим, - тип яҙҙы Радий Хәбиров. - Йәштәрҙең үҙҙәренә мөрәжәғәт итәм: тәүәккәл булығыҙ, ижад итегеҙ, яңыһын уйлап табығыҙ, фәнде һәм бөтә тормошобоҙҙо алға ебәрегеҙ. Киләсәк - һеҙҙең ҡулда".

✓ **Башҡортостан делегацияһы - республиканың Силәбе өлкәһендәге вәкиле Әлфир Байымов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы вәкиле Рөстәм Баянов, Мәғариф министрлығы белгесе Гөлсөм Дилмөхәмәтова Ҡурған өлкәһендә булды.** Сафаҡул районы башлығы Ансар Әхмәтйәнов, Әлмән районы башлығы Алексей Снежко, Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Ильяс Бәзретдинов, райондарҙың хакимиәт вәкилдәре, йәмәғәтселәр менән эш осрашыуҙары ойошторолдо. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү, милли традицияларҙы һәм мәҙәниәтте һаҡлау буйынса саралар ойоштороу мәсьәләләре тикшерелде. Делегация урындағы белем биреү һәм йәмәғәт ойошмаларына уҡыу әсбаптары, биҙәү өсөн стендтар, милли кейемдәр тапшырҙы. "Ҡурған өлкәһендә ун дүрт меңгә яҡын башҡорт бергә тупланып йәшәй, шуға күрә милли ҡиммәттәрҙе һәм телде һаҡлау буйынса башланғыстарҙы яҡлау көнүҙәк. 2023 йылда мәҙәни сара ойоштороу, шулай уҡ күренекле башҡорт зыялылары Ғәлимйән Тағандың һәм Шәриф Манатовтың хәтерен мәңгеләштереү мәсьәләһен төрлө яҡлап өйрәнергә һөйләшеп килештек", - тине Әлфир Байымов.

✓ **Чернобыль атом электр станцияһындағы аварияны бөтөрөүҙә ҡатнашҡандар 2023 йылдың 1 ғинуарынан ғариза яҙмайынса айлыҡ аҡсалата компенсация түләүҙе оҙайтырға мөмкин.** Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған ҡарарҙа авария эҙемтәләре һөҙөмтәһендә инвалид булып ҡалғандар өсөн дә ошондай тәртип билдәләнгән. Пособиелар, компенсациялар һәм льготалар тураһында мәғлүмәттәрҙе берләштергән берҙәм һанлы платформа эшләй, шуға ҡағыҙ тултырыу талап ителмәй. "Социаль ярҙам сараларын күрһәтеү процестарын оптималләштереү социаль ҡаҙнасылыҡ принцибы буйынса алып барыла. Был яңы алым граждандарҙы даими рәүештә документтар тапшырыуҙан азат итеп, эштең әүҙем технологияларына күсергә мөмкинлек бирергә тейеш", - тиелә Рәсәй Хөкүмәтенең рәсми белдереүендә. 2025 йылға социаль ҡаҙнасылыҡ принцибы илдә социаль ярҙамдың барлыҡ төрҙәрен күрһәткәндә төп урында торор тип көтөлә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТУРИСТАР КИЛӘСӘК...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районындағы Турахан кэшәнәһе алдында Евразия күсмә цивилизациялар музейын ойоштороу буйынса эшсе төркөмдөң күсмә кәңәшмәһен үткәрҙе һәм Турахан кэшәнәһе эргәһендә барған ҡаҙыу эштәре менән танышты.**

Яңы объект концептуаль яҡтан бер нисә төп тарихи ҡомартҡыны берләштерә, улар иҫәбендә - Турахан менән Хөсәйенбәктең таш кэшәнәләре. "Беҙ бөйөк тарихи асыштар алдында торабыҙ, халҡыбыҙҙың бөтә тарихы серҙәр һәм аҡ таптар менән тулы, беҙ әкренләп уларҙы асабыҙ. Беҙгә бөйөк Турахандың шәхесен аҙағынаса өйрәнеү мөһим. Шуға күрә бында күсмә цивилизациялар музейын ойоштороға булдыҡ. Халҡыбыҙ тарих, этнография, боронғо көнкүреш менән таныша алһын өсөн. Барыһын да этаплап тормошҡа ашырырбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе проектта республика оҫталары өсөн урын булдырыуҙы, бәләкәйерәк мәсет төҙөүҙе лә күҙ уңында тоторға ҡушты. "Турахан кэшәнәһе - Башҡортостан ынйыларының береһе. Алда беҙҙе Турахандың шәхесен өйрәнеүгә бәйле етди тикшеренеү эше көтә. Яңы музейҙа ҡыҙыҡлы предметтар ғына тупланмай. Беҙ бында, Турахан кэшәнәһе янында, Евразия материгы өсөн мөһим тарихи осорҙарҙың береһен өйрәнеү буйынса етди ғилми-тикшеренеү үҙәген асырға йыйынабыҙ. Был урындың фәнни, белем биреү, туристик, һөнәрселек потенциалы ғәйәт ҙур. Комплексҡа килеүселәр күскенсенең юлын үтә ала. Бронза быуаттан алып Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылған осорона тиклем. Ә иң мөһиме - кэшәнә. Был Башҡортостанда, шул иҫәптән башҡа илдәрҙән килгән туристар өсөн тағы ла бер күркәм урынға әүерелер тип ышанам. Әммә иң элек ошонда йәшәгән халыҡ өсөн ҡыҙыҡлы булыр. Ошо йөнәттән әүҙем эшләйбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

# ӘҘЕР ТИЕРЛЕК...

**БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаровҡа 1 сентябргә ремонт тамамланып өлгөрмәгән мәктәптәрҙә эштең нисек ойоштороласағы хаҡында һөйләне.**

"Беҙҙең бер нисә проблемалы объект бар, улар уҡыу йылы башланғандан һуңыраҡ сафҡа индереләсәк. Был мәсьәләне беҙ үткән оператив кәңәшмәлә тикшергәйнек. Бөгөн мин ошо объекттарҙағы хәл һәм әлегә туған мәктәптәренә килә алмаған балаларҙы уҡытыуҙың нисек ойоштороласағы хаҡында ишетергә теләйем",- тип мөрәжәғәт итте Андрей Назаров министрға.

"Һәр мәктәп бинаһы хаҡында тулы мәғлүмәт бар. Һәр алты объект буйынса ла 1 сентябрҙән уҡытыу эштәре ойошторола башлаясаҡ. Һәр ваҡыттағыса, тантаналы линейкалар үткәреләсәк, - тип һөйләне Айбулат Хажин. - Ҡайнар туҡланыу бөтә урындарҙа ла, шул иҫәптән башланғыс класс уҡыусылары менән һаулыҡ мөмкинлектәре сикле һәм инвалид балалар өсөн - бушлай һәм 5-11 кластарҙа уҡыусылар өсөн түләүле тәртиптә ойоштороласаҡ".

БР мәғариф министры белдереүенсә, ағымдағы уҡыу йылында 63 мәктәптә капиталь ремонт үткәрелгән, шуларҙың 9-ы тапшырылған, 40 объектта эштәр ошо көндәрҙә тамамлана. Һигеҙ мәктәптә эштәр 4 - 10 сентябрь эсендә, алты мәктәптә эштәр һуңыраҡ тамамланасаҡ. Андрей Назаров әйтеүенсә, ошо арала мәктәп төҙөлөшө мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәреләсәк. "Муниципаль кимәлдә һатып алыуҙар үткәргәндә көсһөҙөрәк ойошмаларҙың еңеүен, уның ҡарауы, аҙаҡ уларҙың төҙөлөш һәм мәктәптәрҙә ремонт эштәрен тамамлау ваҡытын үтәй алмауын мин аңлайым, ләкин, бөхеткә күрә, ундайҙар һирәк, тик шулай ҙа бындай хәлдәр булырға тейеш түгел", - тине А.Назаров.

# ҠАҒЫҘ ЭШЕНӘН ҠОТОЛОУМЫ?

**Башҡортостан ҡоролтайы депутаттары яҙғы сессияла парламент тыңлауҙары үткәрҙе, унда власть органдары өсөн уҡытыусыларға йөкләмәне кәметеү тураһында тәҡдимдәр әҙерләнде. Шулай уҡ "Мәғариф тураһында"ғы төп законға төҙәтмәләр индерелде.**

Был саралар педагогтарҙың бюрократик эшен кәметеүгә йүнәлтелгән, тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Билдәләнеүенсә, депутаттарға йыш ҡына уҡытыусыларҙың ҡағыҙ эшенә күп ваҡыт сарыф итеүе, йәғни документтар, контроль формалары, анкеталар тултырыуы, һорау алыуҙар үткәреүе тураһында ялыуҙар килә. Халыҡ-ара тикшеренеүҙәргә ярашлы, Рәсәй педагогы аҙнаһына 46 сәғәт эшләй, шуның 15 сәғәте пландар һәм отчеттар төҙөүгә китә. Донъяларҙы 36 илдең белем биреү программалары араһында беҙҙеке иң ныҡ бюрократлаштырылған. "Төрлө социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре буйынса уҡытыусылар тултырған документтарҙың 49-ҙан ашыу төрө асыҡланған. Һорауға яуап биргән уҡытыусыларҙың 67 проценты юғары документ йөкләмәһенең хәл ителмәгән мәсьәлә булып ҡалыуын дәлилләй", - тип билдәләне республика парламенты спикеры.

# БАЛАЛАР ТУҠЛАНЫУЫ...

**Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре башлыҡтары һәм ведомство етәкселәре менән кәңәшмә үткәрҙе. Улар республиканың дөйөм белем биреү ойошмаларында туҡланыу сифатын күтәреү буйынса фекер алышты.**

Былтыр Башҡортостанда мәктәптә туҡланыу сифаты һәм ойоштороу мониторингы системаһы булдырылды. Ата-әсәләр берләшмәһе менән конструктив диалогта булыу, "Кайнар ашты контролдә тотоу" модуленең барлыҡҡа килеүе мәктәп туҡланыуын яҡшы яҡҡа көйләүгә ярҙам итте. "Мәктәптә туҡланыуҙы ойоштороу буйынса беҙҙең практика Стратегик башланғыстар агентлығының "Бала саҡтан сәләмәтлекте һаҡлау" конкурсында еңеүсе тип танылды. Яңы уҡыу йылында Башҡортостанда 510 мең бала уҡыясаҡ. Был үткән йылдағынан 11 меңгә күберәк. Уҡыусыларҙың туҡланыуы раҫланған график буйынса ойошторолорға тейеш. Бынан тыш, аҙыҡ-түлектең һәм әҙер ризыҡтарҙың норматив талаптарға ярашлылығы айырым контролдә булһын", - тине Андрей Назаров. Иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов туҡланыу сифатын күтәреүгә йүнәлтелгән сараларға туҡталды. Уҡыусыларҙың туҡланыуын ойоштороу буйынса хеҙмәттәр күрһәтеүсе контракттар төҙөү тәжрибәһе дауам иттереләсәк. Сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев әйтеүенсә, быйыл ғинуар-май айҙары осоронда былтырғы ошо мал менән сағыштырғанда мәктәп туҡланыуындағы етешһеҙлектәр кәмегән. Мәсәлән, сифатһыҙ аҙыҡ асыҡланған осраҡтар 83 проценттан 17 процентҡа тиклем аҙайған. Андрей Назаров Мәғариф һәм фән министрлығына мәктәпкәсә йәшәге балалар учреждениеларында тәрбиәләнгәндәр өсөн түләүҙәрҙең максималь күләмен билдәләү буйынса тәҡдимдәр индерергә ҡушты.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында күп фатирлы йорттарҙа тышҡы рекламаны урынлаштырыу ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер баннерҙы халыҡтың ризалығы менән генә ҡуйырға мөмкин. Реклама биреүсе мэрияның профилле идаралығына күп фатирлы йорт хужалары менән төҙөлгән килешеү тапшырырға тейеш. 31 августа ҡала советы депутаттары реклама тураһындағы законға тейешле төҙәтмәләрҙе хупланы.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте Чернышевский урамында ике айға автотранспорт хәрәкәтенең сикләнеүе хаҡында хәбәр итте. 2022 йылдың 30 августан 30 октябренәсә, юл япмаһын ремонтлау эштәре башҡарылған осорҙа, Пархоменко урамынан алып Хоҙайбирҙин урамына тиклемге участка ябыла. Был ваҡытта әлеге участкала йәмәғәт транспорты хәрәкәте схемаһы үҙгәрә. Баш ҡала хеҙмәттәре өфөләргә һәм ҡала ҡунаҡтарына маршруттарын алдан билдәләргә кәңәш бирә.

✓БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы белдереүенсә, августа Өфө халҡына икеләтә түләү яҙылған квитанциялар таратылған. Баш ҡала халҡы, башҡа ойошма менән килешеүе булһа ла, "Горгаз-сети" ойошмаһынан газ ҡоралмаларын хеҙмәтләндереү өсөн түләү һоралған квитанциялар алған. Уның аңлатмаһында бланкының түләү документы булмауы асыҡ яҙылған, йәғни, юридик телдә, ул клиенттарға килешеү төҙөргә һәм хеҙмәт менән ҡулланырға тәҡдим иткән оферта. Әммә ваҡ хәрефтәр менән йыйылған тексты уҡымаған ҡайһы бер ҡулланыусыларҙы квитанциялар хаталандырыуы мөмкин.

✓18 сентябрҙә Өфөнән йәнә тура рейс менән Чечен Республикаһының баш ҡалаһына осорға мөмкин. Һәр йәкшәмбе Өфө - Грозный маршруты буйынса рейстарҙы Utair авиакомпанияһы башҡара. Маршрутҡа 70 пассажир өсөн тәғәйенләнгән ATR-72 самолеты сыға. Баш ҡала аэропорты мәғлүмәттәре буйынса, Грозный ҡалаһы - Төньяҡ Кавказдың туристик үҙәктәренең береһе. Республика ҡунаҡтары Рәсәйҙең иң ҙур мәсете "Чечня йөрәге", Ә.Ҡадиров исемендәге Дан мемориаль комплексы, милли музей һәм башҡа иҫтәлекле урындар менән танышырға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Ниһайәт, 2022-2023 уҡыу йылында уҡытыусылар артыҡ ҡағыҙ эшенән азат ителә, ә уҡыусылар яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы уҡый башлай.***



*ХӘЙЕРЛЕ СӘҒӘТТӘ!*

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ТӘРБИӘЛӘҮ - ТӨП БУРЫС

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай итеп, 1 сентябрҙә Өфөнөң 126 дөйөм белем биреү ойошмаһында дәүләт символдары - Башҡортостан һәм Рәсәй әләмдәре күтәрелде. Бынан тыш, иштеҙҙәр, белем усаҡтарында хәҙер "тәрбиә эштәре буйынса директор кәнәшсеһе" тигән белгес эшләйәсәк. Өфөлә 126 кәнәшсе һайлап алынған, улар артыҡ ҡағыҙ эшенән азат ителә һәм бар көсөн балаларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүгә йүнәлтәсәк, тип көтөлә.

Аң-белем таратыу маҡсатынан "Разговоры о важном" тигән махсус дәрестәр, илдең яңы заман тарихы буйынса өҫтәмә курстар ойоштороу ҙа ҡаралған. Киләсәктә балаларҙы берләштерер Бөтә Рәсәй балалар хәрәкәтен булдырыу тураһында ҡарар сығарылған, тиҙҙән уның атамаһын ил Президенты В. Путин үҙе иғлан итәсәк. Яңы хәрәкәт әлегә тиклем илдә эшләп килгән барлыҡ балалар ойошмаларын, берләшмәләрен үҙ эсенә аласаҡ.

Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытколова әйтеүенсә, ниһайәт, 2022-2023 уҡыу йылында уҡытыусылар артыҡ ҡағыҙ эшенән азат ителә, ә уҡыусылар яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы уҡый башлай. Тағы ла уҡыусыларҙың белем кимәлен һынаған төп имтихандарҙы уҙғарыу өлкәһендә лә үҙгәрештәр көтөлә. Был тәңгәлдә уҡытыу программаларына, дәреслектәр йөкмәткеһенә һәм имтихандарҙың эстәлегенә иғтибар биреү талап ителеүе һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Ә шулай ҙа иң мөһим яңылыҡ шулдыр: "Мәғариф тураһындағы" законда "мәғариф өлкәһендә дәүләт/муниципаль хеҙмәт күрһәтеү" тигән төшөнсә юҡҡа сығарылды. Хәҙер мәғариф хеҙмәткәрҙәре дәүләт заданиеһын үтәйәсәк.

Быйылғы уҡыу йылында баш ҡала белем усаҡтарында бөтәһе 133 228 уҡыусы уҡыясаҡ, шулар араһында 15 282 беренсе синыф уҡыусыһы һәм Луганск менән Донецк халыҡ республикаларынан йөҙҙән ашыу бала бар. Өфө мәктәптәре "Цифралы мәктәп" стандарттарына тулыһынса яуап бирә, быйылдан "Минең мәктәп" федераль дәүләт мәғлүмәти системаһына ҡушыласаҡтар. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, мәғариф өлкәһендәге төп бурыстарҙы үтәү, ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн белем усаҡтарын юғары квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү мөһим. Был мәсьәләнә хәл итеүгә М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә эшләү булышлыҡ итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды етәксе. Баш ҡаланың мәғариф системаһында ошонан да әһәмиәтлерәк эш юҫыны юҡтыр. Электән билдәле, барыһын да кадрҙар хәл итә, һәм мәғариф өлкәһендә заман талаптарынан сығып ниндәй генә үҙгәрештәр индерелһә лә, уларҙың маҡсатҡа ярашлы уңышлы осланыуы, йөмғиәт тарафынан ыңғай ҡабул ителеү-ителмәүе лә был өлкәләге белгестәргә ҡайтып ҡала. Ә бит һуңғы йылдарҙа төп бурысы мәғлүмәт еткереү, белем биреү тип кенә эшләргә күндерелә яҙҙы педагогтар...

Шулай ҙа киләһе, 2023 йылды, Рәсәйҙә "Педагог һәм остаз йылы" тип нарыҡлау эште алға этәрергә ярҙам итер, моғайын. Сөнки уның сиктәрендә уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырыу, урта һөнәри белем биреү өлкәһен үҫтереү, барлыҡ уҡытыусыларға эш хаҡы түләү системаһын үҙгәртеп ҡороу ҡаралған. Бына шулай, илдең киләсәген формалаштырған һөнәр эйәләренең эшенә талаптар ҙа өҫтәлә, әммә уларҙың хеҙмәте лайыҡлы баһаланырына ла ышаныс арта. Өфө ҡалаһы педагогтарының август кәңәшмәһе шундай һығымталар менән тамамланды.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

Баш ҡаланың мәғариф системаһында башҡорт милли гимназиялары һәм лицейҙары ла лайыҡлы урын алып тора. Был белем усаҡтарында уҡытыу юғары кимәлдә ойошторолған булыуын барыһы ла белә, ә тәрбиә эштәре, бигерәк тә илһөйәрлек йәһәтенән, туктатылғаны ла юҡ. Уларҙың уҡыусылары йыл да Берҙәм дәүләт имтихандарын юғары балға тапшырып, юғары уҡыу йорттарына бер ҡыйынлыҡһыҙ инеүен дә беләбеҙ. Мәҫәлән, **М. Искужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейында** быйыл 24 уҡыусы 11-се класты тамамлаған, шуларҙың алтауһына уҡыуҙа күрһәткән уңыштары өсөн "ҡыҙыл аттестат" һәм миҙалдар тапшырылған. Сығарылыш уҡыусыларының күпселеге - һигеҙе Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингән, бишәүһе - Өфө дәүләт авиация техник университеты, дүртәүһе Өфө дәүләт нефть техник университетында белем аласаҡ. Ә ҡалғандар Башҡорт дәүләт аграр университеты, Рәсәй кооперация университеты, Мәскәүҙәге Юғары иҡтисад мәктәбе МТИ-ны, "МИСиС" Милли тикшеренеү технология университеты, Халыҡ-ара иҡтисади бәйләнештәр институты, Татарстандағы Юғары нефть мәктәбе менән "Иннополис университеты"нда белемен камиллаштырасаҡ. Был иһә, лицейҙың быйылғы сығарылышы 100 проценты менән юғары уҡыу йорттарында уҡыясаҡ, тигәнде аңлата.

**Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһын** 2020-2021 уҡыу йылында 44 уҡыусы тамамлаған. Улар араһынан ҡырҡ бала артабан белемен юғары уҡыу йорттарында дауам итәсәк, өсәүһе урта һөнәри уҡыу йортона ингән, икәүһе хеҙмәт юлын башлаған. Йәштәрҙең күбеһе республикабыҙҙың алдынғы вуҙдарын һайлаған: Башҡорт дәүләт медицина университеты, Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт авиация техник университеты, Өфө медицина колледжы. Төркиә һәм Ҡаҙан университеттарына инеүселәр ҙә бар. Табип, инженер, хоҡуҡ белгесе, журналист, биолог, хатта наноинженерия кеүек заман талабына яуап биргән йүнәлештә белем аласаҡ кисәге "егерменселәр".

Ә бына **М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында** техник, социаль-гуманитар, химия-биология йүнәлештәренә ярашлы махсус белем эстәгән быйылғы 11-селәр киләсәген дә күңелдәренә яткан фәндәргә яҡын һөнәрҙәр менән бәйләгән. Башҡортостандың инженерҙар, табиптар, хоҡуҡ белгестәре, иҡтисадсылар, хәрбиҙәр, телселәр, уҡытыусылар, архитекторҙар, информатика һәм ауыл хужалығы белгестәре әҙерләгән юғары уҡыу йорттарын һайлаған улар. Шулай уҡ Санкт-Петербург, Екатеринбург, Ҡаҙан, Мәскәү, Стәрлетамаҡ вуҙдарында бюджет бүлегендә уҡыясаҡтар. 13 сығарылыш уҡыусыһы ҡулдарына "ҡыҙыл аттестат" алған. Гимназияның директор урынбаҫары Хәйҙәр Хафизов әйтеүенсә, ун беренселәр БДИ-ны, ә туғыҙынсылар Төп дәүләт имтиханын бик уңышлы тапшырған һәм һөҙөмтәләр юғары булған. Мәҫәлән, 9-сы синыф уҡыусылары араһынан 6 бала дүрт предметтан да "бишле" билдәһе алыуға өлгәшкән. Был инде гимназияла төплө белем бирелеүен иҫбатлаған күрһәткестәрҙең береһе.

**Бына шулай, үткән уҡыу йылының һөҙөмтәләре башҡорт милли гимназия-лицейҙары өсөн бик уңышлы тамамланып тора. Киләһе уҡыу йылында уларға күренерлек эштәр атҡарырға мөмкинлектәр тағы ла күберәк булмаҡсы. Яңы 2022-2023 уҡыу йылы тап шулай булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СЕНТЯБРҘӘН НИНДӘЙ ЗАКОНДАР ҒӘМӘЛДӘ?

**РФ Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин Телеграм-каналда 2022 йылдың сентябрендә ниндәй законлар ғәмәлгә инеүе хаҡында хәбәр итте.**

• 1 сентябрҙән уҡытыусылар артыҡ документтар тултырыуҙан азат ителә. Мәктәптәр өсөн тейешле документтар исемлеге индерелә, башҡалары өсөн ваҡыт сарыф итеү кәрәкмәйәсәк. Уҡытыусылар балаларға белем биреүгә иғтибарҙы көсәйтергә тейеш.

• Тағы бер яңылыҡ персональ мәғлүмәттәрҙе яҡлауға ҡағыла. Хәҙер һатып алыусы шәхси мәғлүмәттәрен бирмәгән хәлдә лә уға хеҙмәт күрһәтеүҙән баш тарта алмаясаҡтар. Был законды боҙған өсөн 50 мең һум штраф ҡарала. Был ҡулланыусыларҙы мутлыҡ осраҡтарынан һәм бәйләнсек рекламаларҙан ҡотҡарасаҡ. Хәҙер интернеттағы бөтөн рекламаларға ла "реклама" тигән билдә ҡуйыласаҡ. Баҙар ҡатнашсылары реклама компаниялары тураһында мәғлүмәттәрҙе берҙәм системаға ебәрергә тейеш булалар.

• Рәсәй ҡулланыусыларына сит ил магазиндары ҡушымталарына инеү туҡтатылыу сәбәпле, сентябрҙән смартфондарға Рәсәй магазиндары ҡушымталары ҡуйыласаҡ.

• Көҙҙән алып Рәсәй законы менән фатирҙарҙағы өлөштәр һаны сикләнәсәк. Хәҙер милексе 6 кв.метрҙан да әҙерәк өлөшкә эйә була алмай. Бындай норма граждандарҙы намыҫһыҙ риелторҙарҙан һәм ялған килешеүҙәр төҙөүҙән һаҡлаясаҡ.

• Идарасы компаниялар һайлау тураһында ҡарар быныҡ өсөн милекселәрҙең 50 проценты (элек 25 процент+1 тауыш ине) тауыш биргән осраҡта ҡабул ителәсәк.

• Мәктәптәрҙә һәм урта һөнәри белем ойошмаларында уҡыусы мөмкинлектәре сикле балалар ике тапҡыр түләүһеҙ туҡландырыласаҡ, ә 1, 2, 3 төркөм инвалидтар икенсе урта һәм юғары белем алыуға хоҡуҡлы.

• Рәсәйҙә сентябрҙән алып арҡа мейеһе донорҙары реестры барлыҡҡа киләсәк. Трансплантацияға риза булыусы граждандарҙы медицина тикшереүе үткәреү, дауалау һәм аяҡҡа баҫтырыу ҡарала.

• Тәбиғәткә килтерелгән зыян өсөн түләнеүсе штраф аҡсаһы килтерелгән экологик зыянды ҡаплауға йүнәлтелә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Сөйәл

❖ Сөйәлдән аспирин ярҙам итә. Үҙебеҙҙә сығарылған 5-6 төймә аспиринды онтап, 1-әр ҡалаҡ лимон һуты һәм ҡайнатылған һыу өҫтәргә. Яҡшылап болғатырға. Дауаны тампонға һылап, сөйәлде ҡапларға һәм целлофан йәки берәй йылы нәмә менән урарға һәм 10 минут торорға. Шунан алып ташларға һәм тирене туҡландырыусы, дымландырыусы крем һөртергә. Сөйәл яңынан сыҡһа, дауаланыуҙы ҡабатларға.

❖ Ҡоро сөйәл барлыҡҡа килгәндә һәм тырнаҡтар үтә ҡатыланып киткәндә бер ус һуған ҡабығына 1 стакан һыу ҡойорға. Һыуы ҡуйы көрән төҫкә ингәнсе ҡайнатырға. Бер аҙ һыуытып һөҙөргә. Ҡайнатма йылы сағында кизе-мамыҡ туҡыма йәки марля кисәген сылатырға һәм ҡоро сөйәлгә (тырнаҡҡа, йыш өйкәлеп тире ҡатҡан урынға) ҡапларға. Шулай уҡ сылатып һығылған кизе-мамыҡ ойоҡ кейергә. Бының өҫтөнән полиэтилен пакет, тағы бер ҡат ҡоро ойоҡ кейергә. Компресы 3-4 сәғәт торорға. Шунан барыһын да сисеп ташлап, ҡатланып ҡатҡан тире һыҙырылып төшөрләк итеп аяҡтарҙы яҡшылап йыуырға. Ҡоротоп һөрткәс, таҙартылмаған үҫемлек майы йәки крем һөртергә. Был рәүешле кискеһен, йоҡларҙан алда таҙарыныу яҡшы.

### Бөйөр

❖ Бөйөргә таш ултырғанда, быуындар һыҙлағанда һәм һөйәк "шешәктәре" булғанда лавр япрағынан әҙерләнгән дауа ярҙам итә. 50 грамм лавр япрағын йыуып, һыуыҡ һыуҙа сайырға. Шунан япраҡтарҙы эмалле бәләкәй кәстрүлгә һалып, 250 мл һыуыҡ һыу өҫтәргә һәм утҡа ҡуйып, ҡайнар хәлгә еткерергә. Һыуы 1-1,5 сантиметрға кәмегәнсе талғын утта торорға. Шыйыҡсаны һөҙөргә һәм бер тигеҙ 4 өлөшкә бүлеп, айырым һауыттарға ҡойоп алырға. Шуның бер һауытын көн дауамында аҙ ғына уртлап эсергә. Шыйыҡсаны шунда уҡ йотмаҫҡа, кәнфит һымаҡ "имергә". Дүрт көн дауамында, ҡайһы ваҡытта булһа ла эсергә, әммә 1 һауытын бер көнгә еткерергә. Икенсе курсын 1-1,5 йыл үткәс ҡабатларға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Туғанлыҡ йылылығы тойоп үҫһәләр, шулай еңел генә итеп ил ташлап, атай-әсәйҙәрен ҡартлыҡ көндәрендә яңғыҙ ҡалдырып, туғандарынан айырылып сығып китерҙәр инеме икән? Ә бит улар үҙҙәрен бәхетлебеҙ, тимәй.*



*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Бөрйән районы Кейекбай ауылындағы ижау үҙенсәлекле булған. Өҫкә ҡарай бөгөлөп киткән тотҡаһы (әйләнәнең 1/4 өлөшө тирәһе) урта тирәһендә ишмә барельеф менән, ә ике яҡ ситенән бер-береһенә инеп киткән ике мөйөш менән биҙәлгән. Ижауҙы семәрләүҙә ҡымыҙ тәпәндәрендәге кеүек һырлау ысулы ҡулланылған. Тотҡаһын тура мөйөш хасил итеп ике яҡлап күтәрелгән ишмә сығынтылар "таяп" торған.

Белореттан көньяҡтараҡ урынлашҡан Шығай ауылында (1971 йылғы экспедиция) был төбәккә хас ижауҙар һаҡланған. Шуларҙың береһе йәйенке һоҫалы булған һәм ул арҡыры киҫелешендә өсмөйөш рәүешендәге тотҡаһы менән бер бөтөн киҫәктән һырланған. Тотҡаһы өҫкә ҡарай киңәйә барып, тура мөйөшлө сығынтыһы йоморо тишек-күҙле һәм кескәй "суҡыш"лы итеп яһалған. Икенсе ижауҙың төҙөлөшөндә ҡош асығыраҡ һынландырылған: йоморайып торған кәүҙәһе ҙур суҡышлы, кикрекле һәм ҡыҫынҡы күҙле ҡош башы рәүешендәге ҡыҫҡа тотҡаһына талғын ғына күскән. М.В.Нестеров исемендәге Художество музейының боронғо фондтарында һаҡланған ижау-ҡош тағы ла үҙенсәлеклерәк күренә, уның ауыр "баш"-тотҡаһында бер нисә өлтөгө бар.



*Ҡымыҙ ижауҙары:*
*1-3, 5 - Белорет районы (1-3 - БХМ фондынан), 5 - 1971 йылғы экспедиция).*
*Рәссамы В.М. Шутова*

Элекке Стәрлетамаҡ өйәҙендәге ижауҙар ҙа юғары кимәлдәге оҫталар булғанлығын дәлилләй. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында Урал буйында урынлашҡан бер нисә ауылда ағас һырлау, бигерәк тә ижауҙар яһау, сәнғәт кәсебенә әүерелгән. Хәҙерге Ғафури районы территорияһына ҡараған Түбәнге Ташбүкән ауылы шул осорҙа яңыртылған производство үҙәктәренең береһенә әүерелгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# РУХИ НЫҠЛЫҠ НИГЕҘЕ -

## туған тел, туған мөхит

**"Балаларым бәләкәй әле. Башҡортса ғына аралашабыҙ. Әммә күршебеҙ, үҙе башҡорт теле уҡытыусыһы, балаларыңды наҙан ҡалдыраһың бит, Берҙәм дәүләт имтиханы тапшыра алмаясаҡтар, ти. Үҙе балалары менән рус телендә генә аралаша. Ирем икеләнеп ҡалды..." - тигән икеләнеү белдерҙе бер йәш әсә. Был һорау күптәрҙе борсой, шуның өсөн гәзит аша яуап бирергә уйланым.**



Бала бәләкәй сағында, әлбиттә, бер ни ҙә аңламай. Әгәр үҙе аңлаһа, туған теленә тартылып торор ине. Сөнки әсә ҡарынында уҡ сабыйҙың булмышы нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән ҡан (ген) аша ҡалыплаша башлай һәм кеше ғүмере буйы фиғеле-күңеле менән үҙ булмышына тартыла.

Туған тел нигеҙендә алып барылған тәрбиә нимә бирә һәм беҙ балабыҙҙы ошо иң ҡиммәтле хазинанан мәхрүм итеп, нимә юғалтабыҙ? Был һорауға яуап биреү өсөн, туған телдең төп тәғәйенләнешенә аҙ ғына туҡтап китергә кәрәктер.

Туған тел - тәрбиә эшендә иң төп таяныс. Баланы атай-әсәйҙән, мәктәптән тыш, мөхит тәрбиәләй. Ә туған мөхит - ул әсәй-атай, өләсәй (ҡәрсәй), олатай (ҡартатай), башҡа өлкән быуын туғандарың.

Туған мөхит - ул туған моң. Халҡың тарихы, ижады, йола-ғәҙәттәре.

Туған мөхит - ул һинең бер үк маҡсат, ынтылыш менән янып-көйөп йәшәүсе дуҫтарың.

Туған мөхит - ул сәләмәт йәшәү, камиллыҡ, тура юлдан тайпылмаҫ өсөн таяныс булған рухи сығанаҡ.

Туған теленән айырылған кеше ошо иң ҡиммәтле, иң һиммәтле байлыҡтарҙан мәхрүм ҡала.

Баланың теле асылған саҡта һөйләшеү, аралашыу, тәрбиә, уны уратып алған мөхит булдырыу өсөн туған телен түгел, ә урта мәктәптә имтихан биреү телен һайлау һәм баланың ҡанына һалынған булмышты юҡҡа сығарыу - иң ҙур наҙанлыҡ, дорфалыҡ, хатта балаң киләсәге алдында енәйәткә тиң яңылышлыҡ. Атай-әсәй ошо аҙымы менән баланың рухи таянысын - тәрбиәлә арҡа һөйәге булған төп үҙәкте ҡаҡшатҡанын аңламай ҙа ҡала. Ә кеше урта мәктәпте тамамлағанда ғына түгел, ғүмере буйы имтихан тапшыра - тормош һынауҙары үтә. Аҙым һайын, боролош һайын, үргә артылғанда ғына түгел, түбән тәгәрәү мәлдәрендә лә, осҡан саҡта ғына түгел, ҡанаты ҡайырылған саҡтарында ла, тура юлдан барғанда ла, аҙашҡанда ла, шырлыҡтар аша үткәндә лә имтихан-һынау тота. Кеше тормошондағы борма-борма юлдарҙа, үрле-ҡырлы артылыштарҙа осрап торған һынауҙарҙы һанап-иҫәпләп сығыу мөмкин дә түгел. Бәһлеүәндәй әҙәм ҡурсалауында булғанда ла, май эсендә бөйөр кеүек йәшәгәндә лә, ҡулыңа бер нисә диплом тотҡанда ла тормош һынауҙары осрай. Тормош бындай һынауҙарҙы барыһы алдында ла ҡуя. Фәҡәт рухи яҡтан ныҡ кешеләр генә уны еңеп сыға. Ә инде рухи ныҡлыҡ тәрбиәләүҙә туған мөхиттең әһәмиәте иҫ китмәле ҙур. Тәрбиә эшендә, баланы иң оло һынау - тормош һынауы өсөн әҙерләүҙә тиңдәшһеҙ, алыштырғыһыҙ сара ул туған мөхит, тимәк, туған тел.

Тәбиғәт - Юғары көс, шуның өсөн дә кешегә күп телдәр өйрәнеү мөмкинлеге биргән. Әйҙә, нисә тел теләһәң, шул тиклем өйрән, тик туған телең иҫәбенә түгел, тигән фекер һалынған зиһенебеҙгә, мейебеҙгә һәм аңыбыҙға.

Беҙ, туған тел әһәмиәтен яҡшы аңлаған бер төркөм зыялылар, Өфө ҡалаһында беренсе башҡорт мәктәбе астырыу өсөн (тәүге йылдарҙа балаларҙы берәмләп йыйҙыҡ) атай-әсәйҙәр менән әңгәмәләр алып барған саҡтарҙа, ҡулдарын ғына һелтәп ҡуйып, балаларын инглиз йүнәлешле мәктәптәргә урынлаштырған әһелдәребеҙ (их, исем-шәрифтәрен һанап ҡына китер инем дә бит!) бөгөн инглиз телле балаларының сит илдәрҙә тырым-тырағай таралып-юғалып бөтөүенә янып-көйөп, ҡартлыҡтарын яңғыҙ ҡаршылай. Сит-яттар менән ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, сит-ят илдәргә хеҙмәт итеп йөрөүсе инглиз телле белгестәребеҙҙән кемгә файҙа? Ҡайҙа улар? Туған мөхит ҡосағында туғанлыҡ йылылығы тойоп үҫһәләр, шулай еңел генә итеп ил ташлап, атай-әсәйҙәрен ҡартлыҡ көндәрендә яңғыҙ ҡалдырып, туғандарынан айырылып сығып китерҙәр инеме икән? Ә бит улар үҙҙәрен бәхетлебеҙ, тимәй. Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Башҡорттар" тапшырыуында был хаҡта йыш ишетәбеҙ.

Туған телдең әһәмиәте тураһында бик күп һөйләргә була. Әммә тағы бер хәҡиҡәтте иҫтә ҡалдырыу зыян итмәҫ. Туған тел - ул туған моң. Тәбиғәт кешегә үҙ-үҙен, үҙ нервыларын дауалау, көйләү, яйға һалыу өсөн иҫ китмәле сара бүләк иткән беҙгә. Ул - йыр, моң. Һәр халыҡтың үҙ моңо, үҙ көйө, үҙ йыры бар. Беҙ баланы ошо байлыҡтан мәхрүм итәбеҙ. Туған телдә йырлау ғына түгел, һөйләшеү ҙә нервы күҙәнәктәренә ыңғай тәьҫир итә. Миҫал өсөн сәләмәт тормош алып барған (эсмәгән, тартмаған, физик йәрәхәт алмаған) йырсыларыбыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Матур, данлы оҙон ғүмер юлы үтәләр улар.

Тәбиғәт кешеләргә туған моң, туған тел тигән бөйөк мөғжизәне юҡҡа ғына бүләк итмәгән. Ә беҙ "имтихан, имтихан" тип, ошондай мөғжизәнән мәхрүм итәбеҙ балабыҙҙы. Әйтерһең, туған телде белеү башҡа телдәр өйрәнеүгә ҡамасаулыҡ итә! Киреһенсә, туған телең ни тиклем бай булһа, сит телдәр өйрәнеү шул тиклем еңелерәккә тура килә. Сөнки туған тел - ул тойғо теле, күңел байлығы. Башҡа телдәрҙе өйрәнгән саҡта үҙ телеңдә алған тойғолар хазинаһы ныҡ ярҙам итә. Сағыштырыу өсөн. Үҙ туған телен яҡшы белгән сит ил кешеләре башҡорт телен үҙ телен белмәгән башҡорттарға ҡарағанда тиҙерәк өйрәнә. Сөнки уларҙа үҙ телдәрендә тойоу көслө. Шул уҡ ваҡытта туған телен һәйбәт белгән башҡорттар сит ил телен күпкә еңелерәк үҙләштерә.

Ә инде балала ижади һәләт бар икән - уға туған телен белеү мотлаҡ. Сөнки ул туған теле аша ҡанына һалынған һәләтте уята. Белем менән нәҫелдән күсә килгән һәләт ҡушылып китә икән, ул һәр төрлө асыштар яһау, ижад итеү өсөн иҫ китмәле этәргес, ныҡлы нигеҙ буласаҡ.

Ҡыҫҡаһы, миңә мөрәжәғәт иткән йәш әсәгә әйтер һүҙем шул: байтаҡ йәшәлде, байтаҡ күрә йөрөлә. Туплаған белемдән, тәжрибәнән, күҙәтеүҙәрҙән сығып, шуны әйтке килә: баланды тулы ҡанлы кеше итәм, унда күңел бушлығы булдырмайым, юғары белемле наҙан (туған телен, тарихын, ижадын белмәгән кеше) итеп үҫтермәйем, аҙаҡ үпкә һүҙҙәре әйтмәһен, тиһәң, үҙ ҡарашыңда ҡал, туған телле итеп тәрбиәлә. Рус телен өйрәнеү, бигерәк тә хәҙерге заманда, ҡала шарттарында ауыр түгел. Ул һыу-һауа кеүек, тирә-йүнебеҙҙе солғап алған. Йүнләп белем алмай, илтифат итмәй, рус телен камил өйрәнмәй, нимәгәлер өлгәшә алмай ҡалып, етешһеҙлектәрен туған телдә һөйләшеүҙең ҡамасаулауы тип иҫәпләгәндәргә иғтибар итмә. Балаларыңды тәрбиәләүҙә туған телде таяныс итеп, дөрөҫ юл һайлағанһығыҙ, һылыу. Ошо ҡараштан тайпылмағыҙ, икеләнмәгеҙ. Бала тәрбиәләүҙә туған телдең төп таяныс булыуы тураһында шәхсән минең генә фекерем түгел, донъялағы бөйөк педагогтар, алдынғы ҡарашлы зыялылар фекере.

Тәрбиә эшен туған мөхиттән айырып, ят телдә алып барыу - ҡуйыныңдағы баланды күрше ҡатын итәгенә йәки ят арбаға ултыртыу менән бер. Шуның өсөн Юғары көс (Тәбиғәт, Тәңре, Хоҙай, Аллаһ) һәр халыҡты үҙ мөхите менән бар иткән. Шуны онотмағыҙ!

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ ***Көньяҡ Урал ҡурғандарында тәүләп йөк арбаһының ағас тәгәрмәстәре табыла. Был ошондай транспорт сараһының Көньяҡ Уралда б.э. тиклем IV - III мең йыллыҡтарҙа уҡ киң таралыуының бәхәсһеҙ дәлиле булып тора.***

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Беренсе бүлек. Таш быуаты.



**Энеолит**

Ям мәҙәниәте ҡәбиләләре тәүгеләрҙән булып баҡыр мәғдәне яҡлыҡтарын үҙләштерә башлай, бында күп һандағы баҡыр әйберҙәр табылыуы ошоға дәлил. Табылған предметтарҙың химик составын өйрәнеү һәм уның һөҙөмтәләрен мәғдән составы менән сағыштырыу (геохимик метод) нигеҙендә б.э. тиклем IV - III быуаттарҙа Көньяҡ Уралда баҡыр мәғдәне ҡаҙып сығарылған Ташҡаҙған (Уй йылғаһында), Баҡырүҙәк (Ҡыҙыл йылғаһында) һәм башҡа рудниктар булыуы фәнгә билдәле булды. Ырымбур ҡалаһы янындағы Ҡарғалы рудникгы иң ҙуры була. Әйтергә кәрәк, ошо рудниктар, яңыртыла барып, хәҙерге замандарға тиклем эшләп килгән.

Ям мәҙәниәте ҡурғандарында йыш ҡына тимер әйберҙәр осрауы ғалимдар өсөн бигерәк тә көтөлмәгән табыш була, тип әйтергә була. Ҡасау, дискылар, иретеп йәбештерелгән тимер лезвиелы баҡыр таяҡтар һәм башҡа әйберҙәр табыла. Былдай тимер предметтарҙың метеорит тимеренән яһалыуы асыҡлана.

Ысынбарлыҡта тимер металлургияһын үҙләштереү б.э. тиклем X - IX быуаттарҙа ғына башлана. Тимер быуаты эпохаһының башланғыс осоро ошо ваҡытҡа ҡарай. Ә ям мәҙәниәте металлургтары тимер эшкәртеү технологияһын башҡаларға ҡарағанда 1 - 2 мең йыллыҡҡа алдараҡ белгән була.

Элекке осорҙар менән сағыштырғанда ям ҡәбиләләренең иҡтимағи тормошонда мөһим үҙгәрештәр башлана. Иң тәүҙә йылҡы малын үрсетеүҙе талап иткән малсылыҡ хужалығы ирҙәр эшен алғы планға сығара, ә был, үҙ сиратында, ғаилә, ырыу һәм ҡәбилә тормошо мәсьәләләрен хәл иткәндә ир-атҡа күберәк хоҡуҡтар бирә. Шулай итеп, быға тиклем йәшәп килгән әсә ырыуына алмашҡа ата ырыуы килә. Патриархат эпохаһы башлана.

Йыйылған материалдар ям ҡәбиләләре йәмғиәтенең иҡтимағи яҡтан ныҡ дифференциацияланған булыуын күрһәтә. Быға ҡәберҙәрҙең ярлы һәм үтә бай төркөмдәргә бүленеүе бик аныҡ дәлил булып тора. Ошо йәһәттән диаметры 100 метрға еткән һәм унан да киңерәк, бейеклеге 6 метр булған бик оло ҡурғандарҙы (Ырымбур төбәгендәге Тамар-Уткүл, I Утевка, Пятилетка һәм башҡалар) иғтибарға алып була. Ошо оло ҡурғандарҙы диаметры 20 метрға, бейеклеге ярты метрға еткән ҡурғандар уратып алған, уларҙағы ҡәберҙәр үтә ярлы, хатта бөтөнләйгә ҡомалаҡһыҙ.

Бәләкәйҙәре менән сағыштырғанда, оло ҡурғандарҙы ҡороу колоссаль хеҙмәт ҡулланылыуын (йөҙ тапҡырға һәм унан да күберәк) талап иткән. Әгәр ҙә ошо ҡурғандарҙа ерләнеүселәр янына биҙәүестәрҙән, ҡоралдарҙан, аҙыҡ-түлектән торған бай әйберҙәр йыйылмаһы, үлтерелгән ҡолдар һалыныуын иҫәпкә алһаҡ, уларҙың ям мәҙәниәте ҡәбиләләренең үгата билдәле кешеләре булыуына тиҙ ышанырға була. Уларҙың тере саҡтарында ҡәбиләләр союзының етәксе-юлбашсылары булыуы мөмкин, тип фекер итергә була: тап улар ошо замандарҙа Көньяҡ Уралда хасил була башлаған идара итеүселәр (хакимдар) сословиеһына хас булған хоҡуҡтарға эйә була. Ошондай юғары статус теге донъяға оҙатҡан саҡта тейешле сығымдар һалыныуын талап иткән.

Әлбиттә, оло ҡурғандарҙа ерләнеүселәр араһында йәмғиәттә барса власҡа эйә булған ырыу-ҡәбилә старейшиналарының булыуы мөмкин. Уларҙың шулай уҡ төрлө дини йолалар уҙғарғанда йолала ҡатнашыусылар менән идара итеүсе баш кешеләр - жрецтар ролен дә үтәүе мөмкин. I Болдырев ҡурғанында табылған кешенең юғары привилегиялы кешеләр иҫәбендә булыуын фараз итергә була. Уның өҫтөндә аҡ төҫтәге ҡоштоң йәйелгән ҡанаттары рәүешендәге аппликациялы япма, аҡ ҡабыҡтан яһалған венок була. Әйберҙәре ҡояш символы тип иҫәпләп булған тимер диск тирәләй урынлаштырылған. Яндырылған мәйеттәр йәиһә уларҙың өлөшләтә ҡалдыҡтары бында кешеләрҙе ҡорбан итеү йолаһы булғанлығын асыҡтан-асыҡ белдерел тора. Былар бай әйберҙәр йыйылмаһы һәм ям ҡәбиләләренә хас типик ерләү йолаһына ярашлы урынлаштырылған мәйеттәре булған ҙур ҡурғандарҙа табылған.

Тикшеренеүселәр ям мәҙәниәте ҡәбиләләрендәге ерләү йолаһының бер үҙенсәлегенә иғтибар иткән: ҡағыҙҙа булараҡ, ҡурғандарҙа ирҙәр ерләнгән һәм уларҙа ҡатынҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың ҡалдыҡтары юҡ тиерлек. Күрәһең, был факты боронғо дәүерҙәрҙә барса тарафтарҙа ла мәйеттәрҙе ер өҫтөндә ҡалдырыуҙың киң таралған булыуы менән аңлатып була. Евразияның ҡайһы бер халыҡтарында ошо йола боронғолоҡ ҡалдығы формаһында XIX - XX быуат баштарына тиклем һаҡланып ҡала. Ошондай йола ям мәҙәниәте ҡәбиләләренә лә хас булғандыр, тип фекер йөрөтөргә була.

Алда килтерелгән фактҡтар ям ҡәбиләләре йәмғиәтенең төрлө социаль төркөмдәрҙән тороуы хаҡында һығымта эшләргә мөмкинлек бирә, һәм археология уның үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстары менән генә түгел, ә байлыҡтары, ҡәбиләләштәренең хөрмәте нигеҙендә айырым урын тотҡан арҙаҡлы юлбашсылар тарафынан идара ителеүен асыҡ билдәләй.

Күсмә тормош рәүеше, алыҫ араларға йөрөү сәбәпле, сауҙа итеүгә, этномәҙәни бәйләнештәр үҫешенә булышлыҡ итә. Көньяҡ Уралда һәм Түбәнге Волга буйында көн итеүсе ям ҡәбиләләренең мәҙәни яҡынлығы сығыштары буйынса ҡәрҙәш ҡәбиләләрҙең эре союздарға берләшеп йәшәүе менән бәйле.

Ям мәҙәниәте ҡомартҡыларының үҙенсәлеге баҡырҙан яһалған предметтарҙың күп булыуынан ғына тормай. Көньяҡ Урал ҡурғандарында тәүләп йөк арбаһының ағас тәгәрмәстәре табыла. Был ошондай транспорт сараһының Көньяҡ Уралда б.э. тиклем IV - III мең йыллыҡтарҙа уҡ киң таралыуының бәхәсһеҙ дәлиле булып тора. Ошондай тәгәрмәс ҡалдыҡтары Ырымбур өлкәһенең Герасимовка (Новосергиевский районы) һәм Шумаевка (Ташлы районы) ҡурғандарында табыла. Шуға оҡшаш бер үк осорға ҡараған табылдыҡтарҙың Кубань, Түбәнге Днепр һәм Ҡара диңгеҙ буйы, шулай уҡ Яҡын һәм Урта Көнсығыш ҡомартҡыларында булыуы билдәле. Ошо аналогиялар ям ҡәбиләләре ҡомартҡыларындағы йөк арбалары көньяҡ илдәренән индерелгән матди мәҙәниәт элементтары итеп ҡарау хаҡындағы мәсьәләне ҡуйырға мөмкинлек бирә. Нисек кенә булмаһын, был һәм башҡа фактҡтар көньяҡ (Урта Азия) һәм көньяҡ-көнбайыш (Яҡын Көнсығыш) илдәренән килгән билдәле бер ҡәбиләләр төркөмөнөң ям ҡәбиләләре мәҙәниәтен формалаштырыуҙа ҡатнашыуы ихтималлығын күрһәтә.

Тикшеренеүселәр ям ҡәбиләләренең Кавказ, Яҡын Көнсығыш, Балкан-Дунай төбәктәре һәм башҡа боронғо цивилизация үҙәктәре менән әүҙем иҡтисади-сауҙа һәм этномәҙәни бәйләнештә йәшәгән раҫлай. Ошо ҡәбиләләр алдынғы иҡтимағи прогресс идеяларын таратыусылар ҙа була. Ғалимдар уларҙа күсмә малсылыҡ хужалығының көньяҡ күршеләре йоғонтоһонда хасил булыуы хаҡындағы фараздың ысынбарлыҡҡа тап килеүе бар, тип иҫәпләй. Әммә был фекер Көньяҡ Урал һәм Түбәнге Волга далаларында күсмә малсылыҡтың урындағы тәбиғәти-климатик шарттарға яраҡлашҡан эволюцион үҫеш барышында формалашыуы мөмкинлеген инҡар итмәй. Әммә ям мәҙәниәтендә ситтән ингән компоненттың роле асыҡтанасыҡ беленеп тора.

Ям ҡәбиләләре йәшәгән территорияға Урал-Волга буйы-Төньяҡ Ҡаҙағстан төбәктәренең Һамар, Хвалынск, Ағиҙел, Суртанды һәм Ботай мәҙәниәттәре күршеләш булған. Йәшәү мөхитенең тәбиғәти-климатик шарттары уларҙың йәшәү рәүешендә һәм мәҙәниәтендә сағылыш тапмай ҡалмаған. Мәҫәлән, улар ултыраҡ (йәиһә ярым ултыраҡ) тормош алып барып, ярты тулаш ергә ҡаҙып һалынған дүрт мөйөшлө өйҙәрҙә йәшәгән. Ярым ер тораҡтарҙың бүрәнәнән буралған, бейек булмаған стеналары, түбәһе һәм ҡыйыҡы булыуын күҙаллар булa. Өй стеналары балсыҡ менән һыланған ситәндән дә тәҙөлгән.

Ошо кешеләр төркөмөнөң ныҡлап тәҙөлгән йорт-ҡураларҙа йәшәүе уларҙың ергә бәреккәнлеген аңлата. Мәҙәни ҡатламдарҙа керамика ярсыҡтары, кремний бысаҡтар, ҡырғыстар, уҡ башаҡтары һ.б. предметтар табылған. Улар араһында берәм-һәрәм генә баҡыр балталар ҙа бар. Уларҙың мал көтөүҙәрендә йорт хайуандарының бар төрҙәре лә булыуы билдәле: аттар, эре һәм ваҡ мөгөҙлө малдар. Хужалыҡта элеккесә һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ҙур урын биләй.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

**Бердимурад Дәүләтжанов,** Төркмәнстан егете, гв. рядовойы, 60-сы гв. кавполкының 1-се эскадроны сабельнигы. Клочково ауылы янында, шыуышып барып, дошман снайперҙары төркөмөн - 11 немец һалдатын юҡ итә. 20 сентябрҙә Черныш ауылында барған урам һуғышында ул 15-кә яҡын немец автоматсылары төркөмөнә гранаталар ырғыта, ПТР мылтығынан да ут аса, 9 дошман һалдатын юҡ итеп, икәүһен әсиргә ала. 21 сентябрҙә, "1 Май" совхозына һөжүм иткәндә, беҙҙең взвод көслө пулемет уты аҫтына эләгә. Дәүләтжанов, алғараҡ сығып, немец автоматсылары төркөмөн утҡа тота, уларҙың бер нисәһе һәләк була, ҡалғандары ҡасыу яғын ҡарай.

**Яков Лунин** (Ырымбур ҡалаһынан), гв. рядовойы, 58-се кавполктың ПТР тоҫҡаусыһы. Выхвостово ауылы өсөн барған алышта дошман орудиеһына яҡын уҡ шыуышып барып, ПТР мылтығынан ут аса һәм орудиены сафтан сығара. Ивашковка ауылындағы алышта үҙенең ПТР-ынан дошмандың ике пулемет нөктәһен ҡыйрата. Днепр йылғаһы аша сыҡҡас, Лунинды немецтар ҡамап ала. Әммә батыр яугир, 20-гә яҡын дошман һалдатын юҡ итеп, үҙ эскадронына ҡушыла.

**Мөхәмәд-Мирзаев Хаваджи,** гв. өлкән сержанты, 60-сы атлы полктың 3-сө эскадроны командиры ярҙамсыһы, милләте буйынса чечен. 18 сентябрҙә Березна ауылына атлы строй менән һөжүм иткән мәлдә эскадронды пулемет уты менән ҡаплай, ауылды азат итеү өсөн уңайлы шарттар булдыра. Днепр аша сыҡҡан саҡта ҡаршы ярҙағы дошманды пулемет утына тотоп, полктың башҡа подразделениеларына ҙур йылға аша юғалтыуһыҙ сығыу мөмкинлеген булдыра.

**Вәли Нәбиев** (Үзбәк ССР-ның Бохара өлкәһенән), гв. старшинаһы, 60-сы кавполкында взвод командиры ярҙамсыһы. 18 сентябрҙәге алышта, алғы поход заставаһында барып, дошман оборонаһына разведка эшләй, Березна һәм Бегач ауылдарына бәреп инеп, дошман рәттәрендә паника тыуҙыра.

**Алексей Никифоров** (Благовар районынан), гв. сержанты, 58-се гв. кавполкының сапер взводы командиры. 18 сентябрҙә Мена станцияһын азат иткәндә батырлыҡ күрһәтә. Пулялар аҫтында асыҡ урындағы тимер юл полотноһына сығып, уны шартлата, дошман бронепоезы ярҙамға килә алмай ҡала.

**Михаил Новосельцев** (Тажик ССР-ы, Сталинабад ҡалаһынан), гв. ефрейторы, 62-се кавполктың 3-сө эскадронында станковый пулемет расчеты командиры. Клочково ауылына беренселәр рәтендә инә, дошманды мәргәндәрсә пулемет утына тота. 21 сентябрҙә Ивашковка ауылы янында 3-сө эскадронды дошмандың көслө пулемет уты туҡтата. Новосельцев, шыуышып барып, ҡул пулеметы менән дошман пулеметы расчетын юҡ итә. Эскадрон Ивашковканы бик аҙ юғалтыуҙар менән азат итә. Днепр аша беренселәрҙән булып сығып, пулемет уты менән башҡа подразделениеларҙы ҡаплап тора.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Махсус белем алмаһа ла, халыҡ аҡылы менән бай ине. "Бер ваҡытта ла алдамағыҙ, урлашмағыҙ. Кеше менән һаулыҡ һорашһағыҙ, тура ҡарап өндәшегеҙ". Беҙ бына шундай халыҡ мәктәбе тәрбиәһен алдыҡ.***

# АТАЙҘАН КИЛӘ эшһөйәрлек,

**Республикала ғаилә фольклор ансамблдәре күпме икән? Бармаҡ менән генә һанарлыҡтыр. Ә бына Хәсәновтарҙың 70-тән ашыу туған-тыумасаһын берләштергән фольклор ансамбле һымаҡтар республикала, илдә тағы нисәү икән? Даланлы һәм талантлы ансамбль репертуары сәнғәтебеҙҙең бай гөлләмәһен тәшкил итә: унда башҡорт халыҡ йырҙары, таҡмаҡтар, таҡмаҡҡа бейеүҙәр, халыҡ бейеүҙәре, бәйеттәр, мөнәжәттәр, театрлаштырылған йәки йолаларҙы тергеҙгән тамашалар... Хәсәновтарҙың сығышын Рәсәй Федерацияһында ғына түгел, БДБ, Балтик буйы илдәре тамашасылары ла алҡышланы. Ғаилә ансамбленең нигеҙен бар иткән Сәфәрғәле һәм Рәхимә Хәсәновтарҙың ғаиләһендә ун бер бала үҫә - ете ҡыҙ һәм дүрт ул. Рауил, Рәмил, Рәил - республиканың арҙаҡлы ҡурайсылары. Улар өсөһө лә төрлө йылдарҙа үткән ҡурайсылар бәйгеһендә Гран-при яулаған маһирҙар, үҙҙәре хәҙер күп йәш ҡурайсыларҙың остаздары. Кәрим Дияров исемендәге республика ҡурайсылар ярышында - өлкән ул Рауил, Ғ. Сөләймәновтың 100 йыллығына үткәрелгән ярышта - кинйәләре Рәил, ошо уҡ данлы ҡурайсының 110 йыллығына үткәрелгән быйылғы бәйгелә Рәмил Гран-приға лайыҡ булды.**

**Бер ғаиләнән сыҡҡан өс бер туғандың Гран-приға лайыҡ булыуы бик һирәк күренеш. Мин хатта ундай ғаиләләрҙе белмәйем дә. Һеҙҙә тарих хәтере һәм уның бөгөнгөбөҙ менән камил берлеге сағылғандай. Һәр берегеҙ Гран-при эйәһе булараҡ, боронғо йолаға ярашлы, йылҡы малы менән бүләкләнгән. Атлы башҡорт - ҡанатлы башҡорт ул. Ниндәй ул һеҙҙе үҫтергән ер-һыу? Ғаиләлә сәнғәткә һөйөү нисек тәрбиәләнде?**

**Рауил.** Беҙҙе үҫтергән Түбәнге Йыйыҡбай ауылы бәләкәй генә булһа ла, тарихҡа бик бай ауыл. Уның Апай тауы ғына ла ни тора! Ул шундай матур, башына менһәң - аҡланы бар, тирә-яҡҡа ҡараһаң - бөтөн тирә-яҡ күренеп тора. Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романында Баязетдин Баяс образы һүрәтләнә. Был егет үҙенең апаһы менән бергәләшеп азатлыҡ өсөн көрәшкән. Ғәскәрҙәре менән Апай тауында йәшенеп, шунда тупланғандар. Ошо тарихи ерҙәрҙә беҙҙең ҡартатайҙар, атай-әсәйҙәр рухлы булып үҫкәндәр. Апай шишмәһе лә бар. Ғүмер буйы беҙҙең инәйҙәр, еңгәйҙәр, өләсәйҙәр шул шишмәнән көйәнтәләп һыу ташығандар. Ауылға яҡын ғына ул. Апай шишмәһенең һыуын эсеп үҫтек, Һаҡмар йылғаһы ла беҙҙең ауыл эргәһенән генә аға.

Рәхимйән ҡартатайым ныҡ шәп ҡурайсы булды... Һигеҙ малайы, бер ҡыҙы булған уның. Ғөмүмән, беҙҙең тоҡомда ишле балалы ғаиләләр байтаҡ. Беҙ үҙебеҙ ҙә ун бер бала үҫтек. Атайыбыҙ һуғыш осоро балаһы. Ағалары, ҡустылары уҡыған, беҙҙең атай ғына мәктәпкә бара алмаған, сөнки атай-әсәйгә ғаиләне ҡарашырға, туғандарға ярҙам итергә кәрәк булған. Ошо оло бурысты ул атҡара һәм эшләп, сыныҡып үҫә. Нимә тип әйткем килә: Хәсәновтар заты - ергә бәйләнгән кешеләр.

**Хеҙмәткә һөйөү менән бер рәттән, атайығыҙ моң донъяһынан айырылмаған, әле әйтеүегеҙсә, шәп ҡурайсыларҙың береһе булған...**

**Рауил.** Эйе, ҡурайҙа өҙҙөрөп уйнаны, йырланы ла. Сәнғәткә һөйөү ҡартатайыбыҙҙан килә. Элек ҡунаҡҡа саҡырышһалар, йыр-бейеү булды, ҡурай моңо яңғырап торҙо бит инде. Тәүҙә ҡурайҙан башлайҙар, шунан һуң баянға күсәләр ине. Атайыбыҙ ауылда иң беренсе булып тальянда уйнарға өйрәнде. Шуларҙы күреп, тыңлап, беҙ, балалар ла, йыр-моңға ғашиҡ булып үҫтек.

Атайым ғүмере буйы мал көттө. Үҙебеҙ утыҙ-ҡырҡ баш һарыҡ тоттоҡ. Ул урманда колхоздың һыйыр малын көткәндә лә беҙҙе бергә алып йөрөнө. Урманға һыйырҙарҙы ҡыуып алып китәбеҙ, ҡыуыш ҡороп, күмәкләп шунда ятабыҙ. Бер мал икмәк бөткөйнә, һарыҡ ашап та йәшәп алдыҡ. Өс-дүрт көндән генә алмашҡа ярҙамсыһы килә лә, беҙ ҡайтыу яғына ҡуҙғалабыҙ. Атайҙың юл буйына йырлап ҡайтҡаны хәтерҙә. Эргәһендә һәр саҡ ҡурайы булды. Ниндәй генә көйҙө уйнаманы ул! "Урал"ды, "Буранбай"ҙы, "Уйыл"ды, "Һыр"ҙы. Беҙ арбала йоҡлап китәбеҙ, ул атынан төшә, иплап кенә беҙҙе һыйпап ҡарай ҙа, бейеп алып китә. Шундай мәлен Үрнәктән бер кеше ҡарап торған икән. "Сәфәрғәле арбанан төштө лә, сүкәйеп-сүкәйеп, сәпәкәйләп бейеп алып китте", тип һөйләгәне хәтерҙә. Эйе, беҙҙең атай шулай булды. Халыҡ моңона мөхәббәте беҙгә лә күсте. Тәбиғәттән айырылмауыбыҙ ҙа бығa ярҙам итте.

Ысынлап та, беҙҙең ғаиләлә атай иң беренсе урында булды. Атайҙың эштән ҡайтып килеүен күреү менән беҙ шым булабыҙ. Ул беҙгә ете йәштән бесән сабырға өйрәтте. Артабан күбә күбәләү, кәбән һалыу, утын бысыу... Бер ваҡытта ла арыу-талыу тигән нәмәне белмәне үҙе. Махсус белем алмаһа ла, ғилемле булыуы һоҡландыра ине, сөнки ул халыҡ аҡылы менән бай ине. "Балалар, бер ваҡытта ла алдамағыҙ, урлашмағыҙ. Кеше менән һаулыҡ һорашһағыҙ, тура ҡарап өндәшегеҙ, аҫҡа ҡарамағыҙ". Беҙ бына шундай халыҡ мәктәбе тәрбиәһен алдыҡ. Артабан үҙебеҙ ғаилә ҡорҙоҡ, балаларыбыҙ булды, ә атай әйткән нәсихәт һәр саҡ күңелдә йәшәй. Ун бер баланы көтөүсе еңел булмағандыр, хәҙерге ғаиләләрҙәге ике-өс бала менән сағыштырып булмай бит инде...

Әлеге лә баяғы, атай тәрбиәһе - хеҙмәткә мөнәсәбәт. Көтөү көткән саҡта ла ниндәй генә хәлдәр булманы. Бер ваҡыт атайҙар ҡунаҡҡа китте, Рауил ҡусты менән беҙ төпкөл урманда көтөү көтөп ҡалдыҡ. Ҡайны ваҡыт, атныҙ саҡта, тал сыбыкты ат итеп менәбеҙ, һыбайлап мал ҡайырабыҙ инде, йәнәһе. Иртәнге һыуһын, тип, иртә таңдан тороп бесән сабыуҙар... Хәҙер һағындыра шул ҡыуышта ятыуҙар. Китап яҙырлыҡ хәтирәләр бар. "Уйыл"да йырлана бит әле:

*Уйылып ҡына аҡҡан*
*Уйыл һыуы,*
*Уйландыра уйсан да*
*ирҙәрҙе.*
*Уйландырып ҡына ҡалмай,*
*моңландыра,*
*Һағындыра тыуған да*
*ерҙәрҙе.*

**Атайығыҙ балаларына хеҙмәткә, сәнғәткә һөйөү тәрбиәләгән. Шул уҡ ваҡытта ғаиләлә ағайҙарҙың да өлгөһө ҙур икәне аңлашыла. Был нимәлә сағылды икән, шуны ла белге килә.**

**Рауил.** Мәҫәлән, беҙ бер-беребеҙҙе, кесеһе олоһона эйәреп, ҡурай, йыр менән генә түгел, спорт менән дә шөғөлләнәбеҙ. Беҙ шул хәтлем спортты яратҡан кешеләрбеҙ. Бәләкәй саҡтан ҡустылар, ауыл малайҙары менән кинәнеп футбол уйнаныҡ. Мин ҡапҡала торорға ярата торғайным. Алексеев, Жаботинский кеүек штангистарға ҡарап, яһалма герҙәр, гантелдәр, штангылар эшләп шөғөлләндек. Ҡустылар беҙҙең арттан эйәрҙе. Беҙҙе спорт сыныҡтырҙы. Мәктәп йылдарында саңғыла һәйбәт йүгерҙем. Ә Өфөлә сәнғәт училищеһында уҡыған ваҡытта урта махсус уҡыу йорттары араһындағы саңғы ярыштарында чемпион була торғайным. Саңғы, футбол, биатлон булһынмы, балалар, ейән-ейәнсәр бергә йыйылып, бергәләп уйнайбыҙ, ярышабыҙ. Беҙ спортта - иң беренселәр.

**Ә шулай ҙа ҡурайға һөйөү бөтәһенән дә еңгән...**

**Рауил.** Ҡартатай менән атай ҡурайсы ғына түгел, сәсән дә инеләр. Мәктәптә Кәрим Дияров класында уҡыныҡ, ул алгебранан уҡытты. Уҡытыусы һәм ҡурайсы Кәрим ағайҙың тәҡдиме буйынса Өфөгә уҡырға килдем. "Рауил, сәнғәт училищеһында ҡурай класы асылырға тора, һин шунда бар", - тигәйне ул. Ул ваҡытта училищеның директоры Камил Вәлиев ине. Әлеге училище бинаһының тәҙәләп кенә яткан сағы, беҙ Өфө сәнғәт институты бинаһында уҡый башланыҡ. Ғата ағай Сөләймәновтың тәүге уҡыусыларынан булыуым менән ғорурланам. Ә уның шәкерттәрен ҡурайҙа өйрәтеүе - үҙе бер мөғжизә! Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының актеры ла ине ул. "Салауат Юлаев" драмаһында Салауат батырҙың атаһы Юлай ролен башҡарҙы. Беҙҙе, студенттарын, үҙенең спектакленә алып бара, беҙ мәшһүр актерҙың уйнаған роленә һоҡланып ҡарап ултырабыҙ. Опера һәм балет театрына ла алып бара торғайны. "Сыңрау торна"ға ла саҡырҙы, беҙ ауыл малайҙары бит инде, ниндәй юғары сәнғәт, тип, аптырап ҡарап ултырабыҙ. Ғата ағай Сөләймәнов беҙҙе сәнғәткә ғашиҡ итте, рухи яҡтан үҫтерҙе. Етмеш беренсе йылда училищеға индем, Ришат Рәхимов, Риф Ғәбитов, мин - сәнғәт училищеһының тәүге ҡарлуғастары. Пандемия арҡаһында илле йыллыҡ осрашыуҙы үткәреп булманы, шуныһы үкенесле.



**Ғаиләлә һалынған халыҡ ижадына булған һөйөү быуындан-быуынға тапшырыла килә. Һәр быуын был өлкәлә үҙ уңыштарын яулай, үҙ өлөшөн индерә. Был ысын башҡорт ғаиләһе. Рәмил Сәфәрғәле улының ҡурайсы тигән исеме лә алыҫтарға таралған...**

**Рәмил.** Мин ҡартатайҙың бер һүҙен гел иҫкә төшөрәм: "Атай берәү була ул", - тип әйтә торғайны. Ниндәй ҙур тәрбиәүи һүҙ булған! Тимәк, атайҙы тыңлағыҙ, атайҙы хөрмәт итегеҙ, атайҙы ихтирам итегеҙ, атайҙың өйрәткәнен һендерегеҙ, тигән ул. Атай көтөүсе булғас, "Беҙ донъя көтөү тәрбиәһе алдыҡ", тип әйтә

**✓ *Сыбыртҡыны икенән генә үрһәң, ул ныҡ та, матур ҙа булмай. Ә өстән үрһәң, бик шәп килеп сыға. Ғилем, мәҙәниәт, дин - шуларҙың өсәүһен бергә үрһәң, тормош ҡалай матур була икәнен үҙ тәжрибәмдә беләм хәҙер.***

# ҠУРАЙҒА ҺӨЙӨҮ ҺӘМ...

## донъя көтөү тәрбиәһе

алам. Мал көтөү менән ике йәшкә өлкән Рауил ағайым менән икебеҙгә эләкте. Ҡышҡыһын утын бөтһә, көрт йырып, урмандан икәүләп утын алып киләбеҙ. Ике өлкән ағайыбыҙға бесән әҙерләү эше эләкте. Ауырлыҡтар онотолдо, ә рухи хазина, рухи ҡиммәттәр күңелгә һеңеп ҡалған. Мәктәптә эшләгәндә үҙебеҙ алған тәрбиәне беҙ балаларға бирергә тырыштыҡ. Хәҙер халыҡҡа таратабыҙ. Ағайым дипломлы белгес, ә мин һәүәҫкәр музыкант. Етмеш бишенсе йылда мәктәпте тамамлағас, Кәрим ағай Дияровтың әйткәндәрен тыңлап, көйҙәрен ныҡлап өйрәнеп, хеҙмәт юлымды клубтан башланым. Ҡырҡ өс йыл Ниғәмәт мәктәбендә музыка уҡыттым. Кәрим ағай Дияров мәктәпкә ҡаршылағы ғына йортта торҙо. Унан күп нәмә алынды. Алып бөтмәгәндәр ҙә күп ҡалды инде, хатта үҙ теле менән әйтте быны: "Һуңыраҡ, һуңыраҡ инә башланың бит миңә..." Ҡайҙа инде ул ваҡытта барыһын яҙҙырып алырға магнитофон! Юҡ ине шул.

Атайҙың әйткән һүҙҙәре һаман да ҡолаҡта сыңлап тора, һуңғы һулышына тиклем ул беҙгә: "Ҡурайҙа уйнағыҙ",- тине. Уйнағыҙ, тиеүе, ҡурайҙы алып, ары-бире генә һыҙғыртыу түгел, ә беҙгә юғары талап ҡуйыуы ине. Атай беҙҙе тыңлап, баһалап ултыра торғайны. "Урал"дымы, йәки икенсе берәй көйҙө уйнап, урынына еткермәһәң, "ике"не һуҡтыра. Тураһын әйтә. Күкрәккә һалып уйнамаһаң, шулай уҡ киҫәтә. Шул тиклем иғтибар биреп тыңлай ине. Хәҙер бит оло һәм урта йәштәге ҡурайсылар ҙа әллә ни күп түгел. Йәштәр уйнай ул. Уйнаһалар ҙа, нотаға ҡарап өйрәнеп уйнайҙар, тигәндәй. Боронғо ҡурайсыларҙың вәземен белә алмайҙар. Миңә ун ете йәш булғанда райондан йөҙ ҡурайсы Өфөгә килеп уйнаныҡ. Бындай сараны Кәрим ағай Дияров ойоштора торғайны.

**▸ Сәнғәт өлкәһендә кем һеҙҙең өсөн үрнәк булды?**

**Рәмил.** Бала саҡта ҡартатайым, атайым һабаҡтарын һеңдерҙек. Артабан Кәрим ағай камиллашырға ярҙам итте. Ул һуғыш ветераны, өлкән кеше, күп ерҙәр күргән, башҡорт халыҡ көйҙәрен варианттары менән өйрәнгән. Беҙҙең атай бейеү көйөн оҫта уйнай торғайны. Һәр бер ҡурайсының үҙенең яратып уйнаған көйҙәре була. Ҡырҡтырып уйнағыҙ, ти торғайны атай. Ул үҙе тальянда ла ҡырҡтырып ҡына уйнаны. Беҙҙең дә уның һымаҡ тальянда өйрәнгебеҙ килеп, урамда, ҡар көртөндә землянка эшләп, май шәм яндырып, шунда уйнарға өйрәнә инек. Ҡурайсы һәләтенең быуындан-быуынға бирелеүе бик мөһим! Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәре генә ҡыҙығып ҡурай уйнарға өйрәнә ул, ләкин бик һирәктәре генә уға тоғро ҡала, йә ташлай, йә онота, йә үҫеш юҡ.

**▸ Һеҙ ҡурайсы ғына түгел, хәҙер имам да бит әле. Был һеҙҙең өсөн тормошоғоҙҙа көтөлмәгән боролош булдымы, әллә уға әҙер булып йәшәнегеҙме?**

**Рәмил.** Беҙҙең ауылда ике манаралы ике йөҙ йыл ултырған боронғо мәсет булды. Мәсет булғас, йолалар ҙа һаҡланды. Бала саҡтан ҡорбан салыуҙар, аят уҡытыуҙарҙы күреп үҫтек. Күренекле шәхестәребеҙ М. Өмөтбаевтың, З. Вәлидиҙең телде, динде, ерҙе һаҡлау буйынса әйткән һүҙҙәрен яҡшы беләбеҙ, Аҡмулланың нәсихәттәре һәр саҡ күңелдә. Аллаһы Тәғәлә һәр әҙәм балаһына һынау ебәрә. Мәктәптә эшләп йөрөгәндә аяҡты имгәттем, гипс һалдылар. Тәүге тапҡыр шулай өйҙә хәрәкәтһеҙ ятҡанда Ҡөрьән-Кәрим китабын алып, сүрәләр ятлай башланым. Улар күңелгә һеңеп кенә торҙо. Талҡаҫ санаторийына путевка биргәйнеләр, шунда район үҙәгендә ғәрәп телен өйрәнеү буйынса курс асылыуы тураһында иғлан күреп ҡалдым. Дауаланам да, ғилем эстәргә Баймаҡҡа китәм. Шулай башланды минең дингә килеүем. Ниғәмәт ауылында мәсет асылғас, Түбәнге Яйыҡбай имамы шунда күсеп китте. Мин үҙебеҙҙең мәсеткә йомаларға йөрөй инем. "Беҙҙә имам юҡ, һине һайлап ҡуябыҙ", - ти бер саҡ бабайҙар. Мин мәктәптә эшләп йөрөгән көйө имам булып киттем. Директорыбыҙ ҙа аңланы мине. Ошо көнгә тиклем: "Нишләп эшләп йөрөйһөң, нишләп улай итәһең?"- тип берәү ҙә әйткәне юҡ. Шуға әйтәм: дингә баҫҡан кешегә Аллаһы Тәғәлә һынауын да ебәрә, ауырлыҡтарҙы еңер сараһын да алға сығарып ҡуя. Сыбыртҡыны икенән генә үрһәң, ул ныҡ та, матур ҙа булмай. Ә өстән үрһәң, бик шәп килеп сыға. Ғилем, мәҙәниәт, дин - шуларҙың өсәүһен бергә үрһәң, тормош ҡалай матур була икәнен үҙ тәжрибәмдә беләм хәҙер.

"Динебеҙ ҡурай уйнарға рөхсәт итмәй", тигәндәр ҙә булды ул. Ундай тыйыу юҡлығы тураһында Нурмөхәмәт хәҙрәт үҙе әйтә торғайны. 1923 йылда Башҡортостан делегацияһының етәксеһе булып Мәскәүгә Баймаҡ районы Темәс ауылының имам-хатибы Хөсәйенов Әбүбәкер хәҙрәт бара. Ул бик оҫта ҡурайсы була. Кәрим ағай Дияров: "Күп көйҙәрҙе Әбүбәкер хәҙрәт өйрәтте",- ти торғайны. Ғабдулла Сәйиди ишан да шул тиклем оҫта ҡурайсы булған. "Районға килгән бөтөн әртистәр ҡартатайым янында булып, унан көйҙәр өйрәнә торған булған", - тип яҙа ейәнсәре Дилара абыстай.

**▸ Рәил, һеҙҙең дә ағайҙарығыҙ менән бер ҡатар ҡулығыҙҙа - ҡурай. Ошондай рухлы Хәсәновтар ғаиләһендә үҫкән балаларҙың маҡсатынтылыштарын аңлауы ҡыйын түгел. Кинйә малайға ағайҙарының йоғонтоһо булмай ҡалмағандыр?**

**Рәил.** Эйе, атай менән әсәйҙең көтөп алған кинйәһемен. Ғаиләләге һәр кемдең йылы мөнәсәбәтен тойоп үҫтем. Мин атай-әсәй менән бергә йәшәй, уларҙы ҡарай торған бала, шуға атайҙың иркәләүе лә, ҡатылығы ла тәрбиәлә сағылды. Иң беренсе кәңәше: "Алдамаҫҡа, урламаҫҡа, аманатҡа тоғро булырға, кеше нәмәһенә теймәҫкә, юлда ятһа ла, ҡағылмаҫҡа. Ул һинеке түгел. Алаһың икән, эйәһен тап та, алып барып бир".

Атай өйҙәге тәртипкә ныҡ иғтибар бирә ине. Эш кейемең бар, мәктәп кейемең бар, һәр береһенең үҙ урыны булырға тейеш. Кейем һәм ризыҡ ҡәҙерен аңларға ярҙам итте ул, сәләмәтлекте хәстәрләне.

**Рауил.** Ул биргән һабаҡтар бихисап, әлбиттә. Мәҫәлән, бер саҡ атай арбаға егелгән аты менән саптырып эштән ҡайтып килә. Мин бала ғынамын, атай, тип ҡаршыһына йүгереп килеп сыҡтым да, арбаһына ултырайым тиһәм, был миңә сыбыртҡы менән һелтәне: "Нишләп һин ярһып килгән атҡа ҡаршы сығаһың?" Халҡыбыҙҙа, ысынлап та, был ғәмәл тыйылған, сөнки тирләп килгән атҡа ҡаршы сыҡһаң, уның сарпыуы ҡағыла. Зәхмәт һуға.

**Рәил.** Атайым туғанлыҡтың ҡәҙерен дә ныҡ төшөндөрҙө беҙгә. Апай-ағайҙар ҙурайып, кем уҡый, кем эшкә китте. Өйҙә мин генә тороп ҡалдым. Әсәй ауырып китте лә, атай менән икәүләп донъя көтәбеҙ. Атай эштән арып ҡайта. Өйҙә лә ихата тулы мал - һыйыр һауырға, өҫ-башты йыуырға, өйҙө таҙа тоторға кәрәк. Мин әле лә ҡыуанам: йорт-ихата эштәрен - һыйыр һауыуҙан башлап, тамаҡ бешереүгә тиклем өйрәндем. Ҡатын-ҡыҙҙың да эшен башҡарҙым. Атай-әсәйҙе һуңғы юлға үҙем ҡарап, тәрбиәләп оҙаттым. Һәр алынған оҫталығым өсөн уларға рәхмәтлемен.

Атайым дөрөҫлөк өсөн янып йәшәне. Уның ҡай саҡ эштән көйөп ҡайтҡанын да аңлайым. Үҙе алданһа алдана, алдай белмәне. Урлай белмәне...

**▸ Ҡурайға ҡасан өйрәнә башланың?**

**Рәил.** Мин иҫ белгәндә ҡурай уйнай инем инде. Ағайҙарҙың араларында тороп, шунда һыҙғыртып йөрөй торғайным. Күпселеген Рауил ағайым өйрәтте. Ул беҙҙең мәктәптә йыр уҡытыусыһы булды. Училищенан ялға ҡайта: "Йә, ҡустым, уйнап күрһәт әле", - ти. Тыңлай ҙа: "Ошо ере, йә теге ере яңылыш бит", - тип төҙәтә. Рәмил ағайым да бирҙе бындай һабаҡтарҙы. Ҡурайсы булып киткәс, атайым ныҡ ҡыуанды. Атайҙар, ағайҙар ҡунаҡта йырлайҙар, мин тыңлайым һәм отоп алам. Күп йырҙарҙы тыңлай-тыңлай өйрәндем. Бынан нисәмә йылдар элек тыңлаған йырҙар хәҙер иҫкә килеп төшә. Миңә бит уларҙы берәү ҙә өйрәтмәне, үҙенән-үҙе күңелгә һеңеп ҡалғандар. Өйҙә ҡурай уйнайҙар, йырлайҙар һәм бала уны тыңлай икән, шуларҙы ул үҙенә һеңдерә. Иң төп тәрбиә өйҙә һалына. Әйтеү-аңлатыу ғаиләлә булырға тейеш.

Мәктәптә музыка уҡытам. Йыр, ҡурай конкурстарында ҡатнашам. Йөрәк йырлай икән, уны бер нисек туҡтатып булмай, үҙенән-үҙе йырлата.

**▸ Һеҙ өс бер туған, бөтәгеҙ ҙә йырлайһығыҙмы?**

**Рәил.** Эйе, бөтәбеҙ ҙә йырлайбыҙ. Беҙҙе "Өс таған ҡурайсы" тип тә йөрөтәләр. Ә Хәсәновтарҙың ғаилә фольклор халыҡ ансамбленә быйыл илле йыл була.

**Рауил.** Шунан өҫтәп әйткем килә, миңә күп ерҙәрҙә сығыш яһарға тура килде. Мәскәүҙә, Кремлдәр һарайында алты тапҡыр сығыш яһаным. Ленинградта үткән халыҡ музыка ҡоралдарында уйнау һәм халыҡ йырҙарын башҡарыу буйынса Икенсе Бөтә Рәсәй конкурсында дипломант булдыҡ. Азат Айытҡоловты Америкаға гастролгә ебәргәндәр ине, уның урынына Татарстанға Башҡортостан сәнғәте оҫталары концертына мине ҡурайсы итеп алдылар. Нәзир Әбдиев, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Флүрә Ноғоманова, Илфаҡ Смаҡов, композитор Зәбих Мамалимов, Леонора Ҡыуатова, Хәмит Ишбулдиндар ҡатнашты, мин уларҙың ҡурайсыһы булдым, шуның менән ғорурланам. Бындай сәфәрҙәр, әлбиттә, күңелемде байытты.

Тыуған ерем Баймаҡтың данын күтәреүгә үҙ өлөшөмдө индерергә тырыштым. Тере сағында Ғата ағай исеменә ҡурайсылар бәйгеһен ойошторҙом, үҙе килә алмаһа ла, бик шат булды. Ш. Бабичтың "Әйтсе, ҡурай" тигән шиғри юлдарын алып, ҡурайсылар бәйгеһен үткәрҙем. Тәрбиәләгән ҡурайсыларым ҙур ерҙәрҙә эшләй, шуға ҡыуанам. Көслө ҡурайсылар улар! Азат Биксуринды бәләкәйҙән тәрбиәләнем, күрәһегеҙ бит, ниндәй шәп ҡурайсы булып китте!

**Рәмил.** Атайҙың эше ҡырҙа бит инде, беҙ уның эштән ҡайтҡанын көтөп тора торғайныҡ. Бына ул ҡайтып инә, оҙаҡ итеп ҡабаланмай ғына йыуына. Әсәй ашарға әҙерләп ултыртҡан, уны көтә. Атай ашыҡмай, бара ла ҡурайын ала һәм мөйөшкә ҡарап уйнай башлай, шунан бейергә төшөп китә. Беҙ ҙә төшөп китәбеҙ. Малайҙар бейей, ҡыҙҙар бейей - һәр беребеҙ бейеп ала. Ә ризыҡты әҙерләгән әсәй урындыҡта сабыр ғына көтөп ултыра бирә.

Тәрбиә ғаиләлә һалына. Күңеленә моң менән инһә, ул һәр бер күҙәнәгенә һеңә һәм ғүмерлек тәрбиә булып ҡала.

Әсәйебеҙ алтын булды беҙҙең. Ғаилә тотҡаһы ине, сабыр, бай телле, бейеүсе, таҡмаҡсы булды. Ун бер бала табып үҫтерҙе бит, бына тигән бәһлеүәндәрҙе. Алтын һәйкәл ҡуйһаң да әҙ беҙҙең әсәйгә.

*Бала сағым урындыҡта,*
*Күмәкләп сәй эсәбеҙ,*
*Самауырҙан яһап бирә*
*Тәмле итеп әсәбеҙ.*
*Түңәрәкләп ултырғанбыҙ*
*Ете ҡыҙ ҙа, дүрт малай.*
*Ризығыбыҙ ябай картуф,*
*Ярып бешкән урталай.*
*Һәр беребеҙгә бүлеп бирә*
*Ҡуҙға бешкән икмәкте.*
*Шәкәрҙе лә тигеҙ бүлде,*
*Бөтәбеҙгә эләкте.*
*Ә үҙенә ҡалдымы икән,*
*Хәтеремдән юйылған.*
*Бала саҡта эскән сәйҙәр*
*Күңелгә һеңеп ҡалған.*
*Бала саҡты һәр кемебеҙ*
*Һағыналыр, мин беләм.*
*Ғәзиздәрҙән ғәзиз булған*
*Әсәйҙәргә баш эйәм.*

Бала саҡта әсәй эсергән сәй, ул бешергән икмәк тәме һаман ауыҙҙа. Ҡайһы берҙә хис-тойғом йыр менән, шиғыр менән килеп сыға.

**Рауил.** Әсәйебеҙ йылҡы ла көттө. Ирәндек буйында бейә бәйләп һауҙы. Эшкә шәп булды.

Аллаға шөкөр, атай-әсәйҙән бирелгән бар тәрбиә, бигерәк тә сәнғәткә һөйөү балаларыбыҙға ла күскән. Мәҫәлән, үҙемдең улым музыка мәктәбендә уҡыны, ҡурайҙа, кларнетта уйнаны. Ҡыҙым скрипка класын бөттө. Ейәнебеҙ ете йәштә генә булһа ла, ҡурайҙа, баянда уйнай. Сибайҙа Хәлил Ишбирҙин уны күреп, аптырап: "Был баланың йөрәгендә ут бар", - тигәйне. Ғөмүмән, барыбыҙҙың да балалары шундай, эшһөйәрҙәр, илһөйәрҙәр, талантлылар. Бигерәк тә ир балаларыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Ир баланы тәрбиәләү мөһим, улар тоҡомдоң дауамы бит...

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ Иртәнән кискә тиклем эшләп арыуҙары ла һыпырып алғандай юҡ булды. Кисеүҙең ҡап уртаһында баҫып торған ғаиләнең бәхет тулҡындарында бәүелеүен йылға бөгөлөнә инеп күҙҙән юғалған ҡара биҙрә лә туҡтата алманы.**



## Тел асҡысы

– Балыҡ, туғаным, йә, әйт әле балыҡ тип. Ба-лыҡ!

-А-а-а.

-А-а-а түгел, ба-лыҡ! Серле селбәрә тиң әтеү, йә, сер-ле.

-Э-е-е.

Үҙенән ике йәшкә генә бәләкәс ҡустыһын һөйләштерергә маташты Нәғим. Биш йәшен тултырһа ла, унһы һуҙынҡы өндәрҙе генә мығырҙай ҙа ҡуя.

Улар балаҡтарын төрөп, Инйәр буйында селбәрә тота. Нәғим таш менән һыуҙы быуып, ҡамау эшләй ҙә балыҡтарҙы шунда ҡыуалап индергәс, иләк менән һөҙә. Уның тотҡалы тимер иләгенән һыу сөптөрләп аға. Ә Ғүмәр әсәһенең он иләген алып сыҡҡан. Уның балыҡ тотҡаны ишетелмәй ҙә: һөҙөп тә ала, иләгендәге селбәрәләр ҡояшта көмөштәй йылтырап һикерешә лә башлай. Ем һалып, быуа эсендәге ҡомдо болғатып, һыуҙы бурьяҡландырһалар, селбәрәләр эркелеп килеп тә тула. Уларҙың иләк төбөн ҡаплап һикерешеп ятыуын күреп, Нәғимдең күҙҙәре шатлығынан маңлайына сығырҙай була. Иләгенән йырлап һыу аҡһа, дөртләнеп бейеп тә ебәрә. Үҙе Ғүмәрҙең иләгенән көләп:

- Һинең иләгең дә үҙеңә оҡшап телһеҙ. Йә, исмаһам, ба-лыҡ тип әйтеп өйрән. Балыҡ! Атыу, һин дә телһеҙ ошо серлеләр кеүек өйрәк еме буласаҡһың, - тип ҡурҡыта туғанын.

Ҡурҡыуҙан күҙҙәренә йәш төйөлгән Ғүмәр, иләген ташлай ҙа, яр башына ҡаса. Лығырлашып яткан ярты биҙрә селбәрәне ағаһы өйрәктәргә һалыуы була, туя белмәҫ ас ҡорһаҡтар ҡырағай тауыш менән ҡажҡылдашып дүртәрен-бишәрен бергә һоғона ла башлай. Бер-береһенең ауыҙынан тартып алып ашап, бөрләтәүҙәрен тултырғас, тегеләй-былай ҡайҡайышып, бер нисә аҙым туйтанлап та өлгөрмәй, йәшел сирәмгә ятып йоҡлап та китәләр. Был оңҡоттарҙан йәшереп усына йомған балығын йүгереп барып йылғаға төшөрә Ғүмәр. Һыуһыҙ оҙаҡ торғанлыктан, теге меҫкен ауыҙын аса. Йәшәһен, тип, һыуға ебәргән хәрәкәтһеҙ селбәрәне бер нисә көрпәс (ташбаш) тамаҡлап та ҡуя. Быны күреп, Ғүмәрҙең ҡурҡыуы тағы арта: һөйләшмәһәң, бына нисек була икән. Ана, ағаһы ла шулай ти бит. Унының үҙе лә белә ул, көсләп һүҙҙәр әйтергә теләй, әммә мығырҙауҙан уҙҙыра алмай ҙа ҡуя.

Быйыл уҡырға барырға йөрөгән Нәғимдең һөйләшмәгән ҡустыһына һәләк асыуы килә. Буйға уны ҡыуып етеп килә, ә бер һүҙ ҙә әйтә белмәй, һаҡау! Нәғим уны юхалап та ҡарай:

- Йә, Ғүмәр, ә-сәй тип әйт әле.

- Ә-ә-ә.

- Эй, Алла, ә-ә-ә түгел, ә-сәй! Әсәй тиһәң, кәнфит бирәм, - тип алдаштыра тегене. Һөйләштергеһе килә шул ҡустыһын. Юҡһа, әсәһе менән атаһы араһында ла Ғүмәрҙең һаҡаулығы арҡаһында ыҙғыш та тартыш йышайҙы. Әсәһенең йыш ҡына балауыҙ һыҡҡан саҡтарын да күҙәтте ул. Ҡояштай йылмайып йөрөгән ҡәҙерле әсәһенең йөҙөн болот ҡапланы, кеткелдәп көләп ебәреүҙәре лә ишетелмәй хәҙер. Атаһы ла үҙгәрҙе: бәйләнсеккә әйләнде. "Балтаны ниңә былай ҡуйҙығыҙ?", "Ашындың тоҙо сыҡмаған" һәм башҡа мыжыуҙарҙы атаһынан ишеткәне лә юҡ ине. Етмәһә, урамға сыҡһа, малай-шалай мыҫҡыл итә.

Нәғимдәр улар менән йыйылышып, Инйәрҙең балсыҡлыраҡ текә ярын соҡоп, төтөн сыҡһын өсөн өҫтөнән тишек тишәләр. Йәнәһе лә, мейес торбаһы. Шулай әтмәләнгән мейес эсенә ҡоро-һары бутыҡ ташып ут яғалар. Берәй кәнсер һауытты табырға ғына ҡала шунан. Уны ҡом менән тыжып йыуғас, һыу һалып, селбәрәләрҙе шунда бешерәләр. Ә үҙҙәре:

- Балыҡ кеүек телһеҙ Ғүмәрҙе лә шунда һалып, бешереп ашайбыҙ хәҙер, - тип көлөшәләр. Уларға ихлас ярҙамлашып йөрөгән өнһеҙ малай, илап, ихатаға инеп боҫа. Тегеләргә етә ҡала: рәхәтләнеп көләләр. Ике ут араһында ҡалған Нәғимгә уғата ҡыйын. Илап ҡасҡан туғаны ла йәл, дуҫтарһыҙ ҙа ҡалғыһы килмәй.

- Барыбер һөйләшә ул, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе әйтә лә башланы инде, - тигән булып үҙен тынысландырамы, малайҙарҙы ышандырамы Нәғим, аңламаҫһың.

Кәнсерҙәге балыҡты, тоҙһоҙ булһа ла, бүлешеп ашап, ҡәнәғәт таралышҡас, илауҙан буҫлыҡҡан Ғүмәрҙе Нәғим өйгә алып ҡайта. Үҙен уның алдында гәйепле тойоп, туғанына яңы һүҙҙәр өйрәтә башлай. "Бесәй", "сәй", "тәтәй" тигәнгә "ә-ә" тип яуаплаған ҡустыһына асыуланмай, сабыр ғына "дәресен" дауам итә. Сыҙамлығы бөтөп, сығырынан сыҡһа, тышҡа атлыға.




Мөнөрөшеп торған быҙауҙары, баҡырышып йөрөгән һарыҡтары араһына инеп, уларҙың баштарынан һыйпап, үҙен тынысландыра.

...Ҡыҙыу бесән мәле лә етте. Нәғимдәр ҙә малдарын урманға ҡыуып, ҡош-ҡортҡа көнлөк ем һалып, дүртәүләп бесәнгә йөрөй башланылар. Әле салғы тотторорлоҡ булмаһа ла, бәләкәй тырмаһы менән баҡуй әйләндереп йыйырға эшкингән Нәғим. Ғүмәр ҙә ағаһынан ҡалышмай, шым ғына йөрөп бесән әйләндерә. Бер көн шулай, йәйҙең бер көнө йыйлды туйҙыра, тигәнде үтәп, ҙур ғына кәбән ҡойғас, улар ҡайтырға сыҡты. Арығандар. Барыһы ла һөйләшмәй генә атланы. Һыу кисергә булһа ла, тураҡ булыр тип, йылға аша сығырға булдылар. Тырма-һәнәктәрҙе тотоп, арҡаһына аҙыҡ-түлек һалынған тоҡсай йөкләгән аталары юл башланы, уның артынан балағын төрөп Нәғим һыуға төштө. Һынар ҡулына биҙрә тотҡан әсәләре лә, Ғүмәрҙе яурынына ултыртып, кисеүгә инде. Таштан ташҡа бәрелеп аҡҡан Инйәр шундай таҙа, төбө үтә күренә. Ә ундағы ваҡ таштар, әйтерһең дә, хазина. Тулҡындар Ғүмәрҙе сақырғандай, сылтырап-сылтырап баҫтырыш уйнайҙар. "Әйҙә, Ғүмәр, төш беҙҙең янға. Бында рәхәт". Ә аҡ таштар бигерәк тә күҙҙе ҡыҙҙырып өндәшкәндәй: "Күрәһеңме беҙ ниндәй матур, ҡояшҡа ҡыҙынып яттыҡ та, бына рәхәтләнеп һыу инәбеҙ, әйҙә, беҙҙең менән!" Ваҡ таштар менән йылғыр тулҡындарҙың бейеүе малайҙы һоҡландырҙымы, әллә йылғаның гәлсәрҙәй саф һыуының йырлап ағыуы ымһындырҙымы, Ғүмәр:

- У-у-у, әсәй, ваҡ тастар ку-у-у-үп! - тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Көнө буйы бесән эшләп арыған, тәрлә уйҙарға бирелеп килгән әсәһе иғтибарһыҙ ғына:

- Эйе, улым, ваҡ таштар күп, - тип яуапланы ла, ҡапыл быуындары йомшарып, саҡ ултыра төшмәне. "Өнөммө был, әллә төшөммө, әллә ҡолағыма ишетелде инде?"

- Улым, нимә тинең? - тип ҡалтыранған тауышы менән Ғүмәрҙән саҡ һорап алды.

- Ваҡ тастар, аҡ тастар ку-у-у-үп, ивет!

Әсәнең ҡулынан төшөп киткән ҡап-ҡара, ҡоромланып бөткән биҙрә, көнө буйы утта ҡыҙҙырып, һыуға төшөргәндәренә һөйөнгәндәй, таштан-ташҡа бәрелә-һуғыла ағып китте. Яурынында ултырған улын, ҡомалаҡтай еңел генә күтәреп, һыуға баҫтырған әсә:

- Ҡабатла әле, улым, ҡабатла әле, нимә тинең ул?

- Аҡ тастар, ыуаҡ тастар ку-у-үп. Һыу йылы-ы-ы-ы.- Үҙе шунда уҡ шатлығынан ҡулына йылға таштарын йыйырға кереште.

- Тағын ҡабатла, балаҡайым! Ҡысҡыр бар донъяға! Аҡ ташта-а-ар, тиң! Бөтә кеше лә ишетһен!

- Аҡ таста-а-а-ар!

Тырма-һәнәктәрен ярҙа ҡалдырып, ике баҫырын бер баҫып килеп еткән атаһы менән Нәғим ағаһына ла Ғүмәр:

- Атай, ағай, бәләкәс тастар, аҡ тастар ку-у-у-уп, - тип ҡабатлап күрһәтте.

Һөйөнөсөнән күккә сөйгән атаһының көслө ҡулдарында Ғүмәр ҡоштай талпынды.

- Ағай, мин хәҙер балыҡ түгел, ивет.

- Юҡ, туғаным, һин балыҡ түгел.

Бәләкәйҙәренең серле йылмайыш, күҙ ҡыҫышыуҙарын атай менән әсәй аңламаһа ла, бөгөнгә көн уларҙы бәхетле итте. Иртәнән кискә тиклем эҫе ҡояш аҫтында эшләп арыуҙары ла һыпырып алғандай юҡ булды. Кисеүҙең ҡап уртаһында баҫып торған ғаиләнең бәхет тулҡындарында бәүелеүен йылға бөгөлөнә инеп күҙҙән юғалған ҡара биҙрә лә туҡтата алманы.

## Тел биҫтәһе

-Куда?

- Лавкаға барам, улым, лавкаға.

- Пачиму?

- Ейәндәремә тәмлекәстәр алайым тим.

Ҡапҡа алдындағы ҙур ташта аяҡтарын бөкләп ултырған Ғүмәрҙең көн дә бирелгән һорауҙарына Фатима әбей һәр ваҡыттағыса ихлас яуапланы. Малайҙың теле асылғанға һөйөнөп, ауыл кешеләре уның һәр һүҙенә "Собханалла" тип һоҡланды. Тик Ғүмәрҙән өлкәнерәк малайҙарға уның тутыйғош кеүек берүкте ҡабатлап ҡапҡа төбөндә ултырыуы оҡшап етмәне. Быны бөгөн дә Ғүмәрҙең янынан үтеп барғанда Сәғит алдан әҙерләгән яуабын бирҙе:

- Куда? На кудыкина гора! - Ул "кудыкина гора"һы нимәне аңлаталыр, ҡаланан ҡунаҡҡа ҡайтҡан апаһынан ишетеп ҡалғайны.

- Пачиму? - икенсе һорау бөтөнләй сығырынан сығарҙы быйыл уҡырға төшәсәк малайҙы. Сөнки үҙенән ике йәшкә бәләкәс, яңы ғына өнһеҙ йөрөгән балыҡ Ғүмәрҙең шулай русса "шәп" белеүе уның сәменә тейҙе.

- Батаму шты, атам ҡушты,- тип эре генә һамаҡланы ла үрге осҡа һыпыртты.

Бар донъяһын онотоп, русса белгәненә маһайып ултырған Ғүмәрҙең йөрәгенә ҡыҙыҡһыныу орлого сәселде. Ул йәһәт кенә таш ултырғысынан төштө лә ихатаға йүгерҙе.

- Әсәй, кудыкина гора нәмә була ул? Ҡайҙа урынлашҡан икән? Атам ҡушһа, мин дә барыр инем шунда.

Улы һөйләшә башлап, һәр нәмәгә яуап эҙләгәнен, һорау артынан һорау яуҙырғанын һөйөнөп тә, сабыр ҙа ҡабул иткән әсә барыһын да аңлатып бирҙе.

- Ииййй, тәтелдәгем минең, бәләкәс һорау билдәм, бар өйгә ин, башыңа эҫе ҡапмаһын.

Сәғиттең төп башына ултыртып китеүенә асыуы килеп, башын ҡулдары менән ҡаплап, өйгә йүгерҙе. Эҫе ҡаба бит, әтеү. Көҙгөгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла: "Ул эсенең ауыҙы шулай ҙур микән, башым һыйырлыҡ булғас", - тип уйланы. Әммә был уйҙарын йәһәт кенә алып ташланы. Өйҙә үҙенә яңы кәсеп тапты малай. Ағаһы менән әсәһе тыштан инеүгә йыртма календарҙағы "вторник"тарҙы "фторник"ка төҙәтеп сыҡҡайны.

- Дөрөҫ яҙмағандар, фторник була, вырторник түгел, - тип аҡланды хәрефтәр танып уҡый башлаған малай. Быйыл уҡырға барған Нәғим туғанының дөрөҫлөгөнә ышана башлағайны ла, әсәһенең һыны ҡатып, күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлгәненән генә эштең нимәлә икәнен аңланы. Ярата Нәғим әсәһенең шишмәләй сылтыратып көлөүен. Туғанының теле асылғас, был көлөүҙәр уғата йышайҙы, өйгә йәм өҫтәлде, бәхет ҡошо килеп ҡунды уларҙың ҡыйығына.

Бер ғаиләләй йәшәгән күрше-күләндең дә шатлығы өҫтәлгәндәй тойолдо быйылғы йәйҙә. Бер көндә ҡумаҡлап ҡурай еләгенә сыҡтылар. Йәйге селләлә сарсап киткәндәр инде, күрәһең, "Әсәй, һыуһаным", - тип мыжый башланы тел биҫтәһе. "Һыу юҡ, улым, ана сәй яһап алғанмын, шуны эс", - тип яуаплағас, "Мин сәйһаманым, ә һыуһаным", - тип һамаҡлаған Ғүмәр эргәлә елеҡ йыйып йөрөгән ауылдаштарҙың да ауыҙын йырҙы. "Сәй яһа әле, сәйһаным", - тип шаяртыусылар телмәрҙәрен яңы һүҙ менән байытты. Был еләктәрҙе алып ҡайтып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләгәндә тағы ла бер мәрәкә булды. Ҡайнатмаларҙы әсәләре банкаларға тултырып, тышына "Ҡурай еләгенән ҡайнатма" тип яҙып сыҡҡайны. Ижекләп уҡып ултырған малайға етә ҡалды. "Әсәй, ниңә ҡайнатма, һин уны ҡайнаттың да инде", - тип дәғүәләрен теҙеп китмәһенме?

Шулай балыҡ Ғүмәр өйгә йәнлелек өҫтәне, уның һорауҙарына эштән арып ҡайтҡан атаһы ла ихлас яуап бирҙе. Барын да, юғын да һөйләп, быуа йырылып һыу баҫҡандай, барыһының да маҙаһына тейҙе малай. Бигерәк тә Нәғимдең. Ашарға ултырғанда ла ауыҙы ябылмаған ҡустыһына асыуы килә ине ҡайһы саҡта.

- Ағай, ҡара, бына беҙҙекеләрҙең самолеты ти, ул ошолай осоп килә лә бомба төшөрә, - ти ҙә балғалаҡты һауала йөрөтөп өҫтәл уртаһында боҫланып, тәмле еҫ аңҡытып ултырған дөгө бутҡаһы уртаһындағы һап-һары майҙы үҙенең яғына йыра. Нәғимдең дә бирешкеһе, майһыҙ бутҡа ашағыһы килмәй.

- Нимесләрҙең дә самолеты шәп оса ул. Улар ошолай бомбить итәләр, - ти ҙә майҙың ағышын үҙ яғына бора. Шунан китә балғалаҡ-самолеттар алышы. Һауала ла бәрелешәләр, бутҡалағы майға ла барып төшәләр. Шул ваҡытта әсәләре килеп:

- Шунан Алла бабай, тыныслыҡ булһын, тигән дә бөтәһенә лә тигеҙ өләш сығарып ,- тип аш ҡалағы менән бутҡаны болғап ебәрмәһә, ни булыр ине икән?..

Тартай теленән табыр, тигәндәй, бер көндө күрше Фатима әбейҙе үпкәләтеп сығарҙы тел биҫтәһе. Көн дә хәл-әхүәл һорашырға ингән ҡарсыҡ ауыл яңылыҡтарын бүлешеп, эсен тишеп килгән серҙәрен сисеп, әсәһе менән икәүләп самауырҙы түңкәргәс, ҡайтыу яғына ыңғайланы. Уларҙың сәй эсеүен көтөп арыған Ғүмәр, мейес ауыҙынан услап көл алды ла:

- Батима әвей, артыңдан көл һивеп ҡалам, - тип усындағын борхотоп һипмәһенме...

✔ ***Балыҡ Ғүмәрҙән тел бисҭәһе Ғүмәргә әйләнгән малай кәрәк саҡта өнһөҙ ҡалыуҙың да бик ҙур файҙаһы бар икәненә инанды. Һүҙең һирәк булһа, аҡылың зирәк булыр, тип юҡҡа әйтмәгәндер халыҡ.***



Биш йәшлек малайҙың был бик насар ҡылыҡ икәнен белмәүен туҡһан йәшен тултырып, бала аҡылы кире ҡайта башлаған Фатима әбейгә аңлатыуы ай-һай ҡыйынға төштө.

- Юрамал өйрәтеп ҡуйғанһығыҙ, мине инеп йөрөмәһен тип. Ярай, бынан кире ике аяғымдың береһен баҫмам дверыгыҙға! - тип туҙынып сығып киткән күршене ай үткәс кенә ыҡҡа килтерep, дуҫлыҡ күперен һүҙып булды. Урамда кешеләрҙең "артынан көл һибеп ҡалдым" тигәндәрен яҙа-йоҙа ишеткән Ғүмәр, ул ғәҙәтте һәйбәттер тип уйлап, яңылыш Фатима әбейҙең хәтерен ҡалдырҙы шулай. Халыҡта боҙоҡ кешенең башҡа килеп йөрөмәүен теләп артынан көл һипкәндәрен бәләкәс малай ҡайҙан белһен инде. Абайламай һөйләгән - ауырымай үлгән, ти. Фатима әбейҙән ғәфү үтенеп, сәйгә саҡырып, башына аулыҡ япҡас ҡына ике яҡ та үҙ хатаһын аңланы.

Гел тәтелдәп йөрөгән Ғүмәрҙең бер көндө түрбаштағы йомро өҫтәлгә әйбер тереп шым ғына ултырыуына ғәжәпләнде Нәғим. Йоҡлап киткәндәр, ахыры, тип аяҡ осонда ғына яҡынлашҡан малай, өҫтәлдәге будильникка күҙҙәрен шар асып төбәгән ҡустыһын күргәс, аптырап:

- Нимә шаҡҡаттың? Әллә тағы ла балыҡ Ғүмәр булдыңмы?

- Ағай, нейә сәғәт бер туҡтауһыҙ текелдәй ул?

- Һанай.

- Нәмәне һанай?

- Секунд, минут, сәғәттәрҙе. Тағы нимә тип баш ҡатырмаҡсыһың?

- Юҡсы, ҡатырмайым. Көнө-төнө бер туҡтауһыҙ текелдәй бит. Нисек хәле бөтмәй икән?

Улдарының әңгәмәһен тыңлап торған аталары будильникты алып:

- Бына ошолай артындағы асҡысты бороп ебәрһәң, хәле бөтмәй, текелдәй ҙә текелдәй, улым. Сәғәттәрҙе генә түгел, кеше ғүмерен дә һанай ул, эше бик ҡаты һәм яуаплы.

Был әңгәмәнән һуң күп уйланды малай. "Эше бик ауыр булғас, хәле лә бөтәлер, асығып та киткәлер инде меҫкен сәғәт. Уға был эште кем ҡушты икән? Ҡайһылай ҡыйын бер туҡтауһыҙ һанап ултырыу. Тышҡа ла сыҡмай, һыу ҙа инмәй, ҡояшта ла ҡыҙынмай... тамағына ла ашамай. Әһә, тамағына!"

- Атай, белдем, сәғәт нығ асыҡҡан булған. Мин уға һурпа эсерҙем. Бына ҡара, туйҙы, һимерҙе хатта. Текелдәүенән тә туҡтап торҙо, ял итә. Батырға ла ял кәрәк ивет, атай!

Эсенә һурпа тултырыуҙан һандары һәм уктары бүрткән сәғәт, күп ашауҙан саҡ тын алып ятҡан малдай, бер-ике тығырланы ла тынды.

- Һанамай торһон. Әтеү мин һанай башлаһам, бармаҡтар етмәй ҙә ҡуя, аяҡтағының ҡушһам да етмәй ҡала. Ғүмерҙе һанап бөтөрмәй торһон.

Эскерһеҙлеге, нисек бар, шулай ҡабул итеүе менән танып белде донъяны Ғүмәр. Абынып китһә, һикереп тороп атлап китте, хаталарын төҙәтә-төҙәтә тормошто өйрәнде.

Бер көндө Нәғимдәр һуғыш уйынына йыйылды. Ҡанундарҙы боҙмайынса, командир, разведчик, һалдаттар тәғәйенләнде. Һәр береһе үҙ бурысын еренә еткереп башҡара, сөнки саҡ ҡына хилафлыҡ ҡылһаң, енелдең тигән һүҙ. Дошмандарға бер кемдең дә бирешкеһе килмәй. Бөгөн Нәғимдең иң яратмаған көнө. Ни өсөнмө? Сөнки дошман булып уйнау сираты бөгөн уларҙа. Етмәһә, тел бисҭәһе Ғүмәр бергә. Өйҙән сыҡҡанда уҡ ҡустыһын тыйып килһә лә, һәр ваҡыттағыса, бер нәмәһен ләпелдәп, планды боҙасаҡ инде. Ниҙән ҡурҡһаң, шул алдыңа баҫа бит ул. Уйын барышында Ғүмәрҙе "тел" итеп әсирлеккә төшөрҙөләр. Тотҡондо алып китеп барғанда Сәғит үлән араһынан, башҡалар аңламаһын өсөн, руссалап:

- Жимай рот пять земля, ишеттеңме?- тип шыбырлап ҡалды.

Ғүмәргә ағас мылтыҡ терәгән разведчик был һүҙҙәрҙең "ауыҙыңды биш ерҙән ҡыҫ" тигәнде аңлатҡанын төшөнмәне лә шикелле. Ирендәрен нығ итеп ҡымтыған малайҙың арҡаһына ағас приклады менән еңелсә төртөп, штабҡа алып китте. Унын ҡарауы, Ғүмәр Сәғиттең ни әйтергә теләгәнен аңланы. Нисек тә булһа үҙҙәренекен һатмаҫҡа һәм ағаһының ышаныһын аҡларға кәрәк уға. Биш йыл балыҡ Ғүмәр булып йөрөүҙе ярҙам итте, күрәһең. Төрлөсә ҡурҡытып һорау алып ҡараһалар ҙа, ләм-мим - ирендәр ҡымтылғайны. Шундай шәп һалдаттың дошмандар яғында булыуына үкенеп ҡуйҙы штабтыҡылар. Уны үҙебеҙҙең һалдат итеп күргеләре килде урам малайҙарының. Һуғыш ваҡытында тап шундай яугирҙар батыр булған бит. Был юлы Нәғимгә ҡустыһы өсөн ҡыҙарырға тура килмәне. Сәғит тә: "Пять земля, ивет!" - тип Ғүмәргә күҙ ҡыҫты.

Балыҡ Ғүмәрҙән тел бисҭәһе Ғүмәргә әйләнгән малай кәрәк саҡта өнһөҙ ҡалыуҙың да бик ҙур файҙаһы бар икәненә инанды. Һүҙҙәрҙе уйлап, ауыҙҙы самалап асып һөйләшергә күнекте ул. Һүҙең һирәк булһа, аҡылың зирәк булыр, тип юҡҡа әйтмәгәндер халыҡ.

## Тел оҫтаһы

- Отлично уҡырбыҙ,
Отлично эшләрбеҙ,
Отлично ял итербеҙ,
Отлично йәшәрбеҙ.

- Беренсе класс уҡыусыһы Сәлимов Ғүмәрҙе октябряттар сафына алырға!

Уртаһына Лениндың бала саҡ фотоһы төшөрөлгән ҡыҙыл йондоҙҙо түшенә ҡаҙағас, Ғүмәрҙең шатлығы күкрәгенә һыйманы. Бөтәһен дә "отлично" эшләргә вәғәҙә биргән малай өйөнә атлап түгел, осоп ҡайтты. Биш ҡанатлы был йондоҙҙоң бер хикмәте бар, ахырыһы. Әйтеп аңлатҡыһыҙ шатлыҡ, кисерел бөткөһөҙ тойғолар, менеп еткеһеҙ хыял тауҙары алдына баҫты малайың. Ике йыл элек октябрят булған ағаһының йондоҙон да түшенә ҡаҙап ҡараны, әммә ул тиклем ҡыуанысын тапмағайны. Ә бында үҙеңдеке! Ниндәй бәхет! Тырышып уҡыһаң, емертеп эшләгеһе, кешеләргә яҡшылыҡтар ғына ҡылғыһы килде унын. Ҡойроғон болғап ҡаршыһына килеп сыҡҡан этен ҡосаҡлап сәләмләне, шатлығын бүлеште. Ике йәшлек Зәлифә һеңлеһе "тә-тә" тип йондоҙға ынтылғайны, Ғүмәр йәһәт кенә мәктәп кейемен сисеп, өҫкөрәк элеп ҡуйҙы. Белә ул үҙһүҙле һеңлеһен. Илап булһа ла үҙенә кәрәген таптырып өйрәнгән. Бәләкәстең иғтибарын икенсе яҡҡа борҙо:

- Әйҙә, Зәлифә, мин һиңә әкиәт һөйләйем.

Көн дә ағаһының ҡыҙыҡлы әкиәттәрен яратып тыңлаған ҡыҙыҡай мөкиббән китеп уға төбәлде. "Болон-болон" тип сәпәкәйләп ҡурсаҡтары эргәһенә аяҡтарын һуҙып ултыра һалды. Иң мөһиме, йондоҙ тураһында онотто. Әмәленә күрә гәмәлен тапты Ғүмәр.

Бәләкәс булһалар ҙа, аталары Нәғим менән Ғүмәрҙе һәр ваҡыт үҙе менән урманға алып йөрөнө. Атанан күргән - уҡ юнған, малайҙарҙы ауыл эшен белеп үҫһендәр. Утын әҙерләргәме, баҫыу кәртәләргәме, һунармы - был һөнәрҙәр егет кешене сыныҡтыра ғына. Ҡайҙа барһалар ҙа, Ғүмәр ҡыҙыҡһыныуын һүрелдермәне.

- Атай, был бесәнлек ниңә Ҡарамауыш тип атала икән?

- Элек ошо ерҙә ҙур ҡыуыш ҡарама ағасы үҫкән, олатайың шуға был яланды Ҡарама ҡыуыш тип исемләгән.

Бирйән тауының атамаһы нисек килеп сығыуын, Ташлуйҙың үҙенсәлеген, Артышйылға, Бейембәт яландарының тарихын аталары түкмәй-сәсмәй һөйләне улдарына. Малайҙарға бигерәк тә Үткәүелгә барыу оҡшай. Төрлө яҡҡа юлдар ошо бесәнлек аша үткәнгә шулай атағандар уны. Был яланды ураҡҡан күлдәрҙә балыҡ күп була. Иртүк һалынған ауға эрелешеп балыҡ эләгә. Уларҙы таҙартып алып ҡайтаһың да әсәйҙәре тәмле итеп ҡурып ебәрә - теләңде йоторлоҡ.

- Ауылдан ун саҡрым алыҫлыҡта Башәлгән тигән ялан бар, - тип һөйләне аталары бер көндө. Унан революция ваҡытында Блюхер ғәскәренең Каширин етәкләгән бер өлөшө үтеп барған һәм шул яланда ҡыҙыу бәрелеш булып, бик күптәрҙең ғүмере өҙөлгән. Ағасҡа эленгән башты күргәс, урындағы халыҡ был яланды шулай атаған. Ул яланда әле лә ҡылыстар табыла икән.

Атаһының һәр һүҙен йотлоғоп тыңлай Ғүмәр. Нәғим дә ҡыҙыҡһынып фараҙдарын килтерә:

- Ҡоҙғондар күп булғанға анау беҙ сапҡан яланды Ҡоҙғоноя тип йөрөтәләрҙер инде. Ә бына Көҙгөйорт, Арғышлау, Үрғышлау тигәндәре нимәне аңлата икән?

- Халҡыбыҙ элек күпләп мал аҫраған. Йәйҙәрен тирмәләр ҡороп йәйләп, малды шәп һутлы үләнле яландарға сығарғандар, ә ҡышын ҡышлауҙарға ҡайтҡандар. Шуға ла Йәйләү тигән ерҙәр һәр ауылда бар. Бына һин атаған исемдәр шул дәүерҙән ҡалған да инде, Нәғим улым.

- Беҙ эскән Ҡаран һыуы ни өсөн ҡышын да туңмай, йәйен һыуы теште һындырырлыҡ һалҡын икән?- быныһы Ғүмәрҙең һорауы.

- Иғтибар итһәгеҙ, балалар, Ҡаран һыуы бейек Өкө тауы аҫтынан урғылып сыға һәм, ағышы бик тиҙ булғанға, ҡыш көнө туңып өлгөрмәй. Һәм, шул уҡ сәбәп менән, ул йәй көнө йылынып өлгөрмәй, һалҡын килеш аға.

Атаһының һөйләгәндәре әлләниндәй әкиәттәрҙән дә шәберәк. Ана нисек күпте белә ул. Моғайын, һәр ер-һыу атамаһының үҙ тарихы барҙыр әле. Ҡыҙыҡ...Атай кеше шул ваҡытта Ғүмәрҙең йөрәгенә ниндәй орлоҡ сәскәнен үҙе лә һиҙмәгәндер. Малайҙарының ҡулына эш өйрәтһә, аңдарына тыуған ергә һөйөү, һаҡсыл ҡараш, ҡыҙыҡһыныуы һеңдерҙе.

Бер көндө әсәһе һөйләгән легенда тетрәндерҙе үҫмерҙе. Ҡолоҡай тауы тураһында ине ул. Бүреләрҙән өркөп, әсәһе менән тау үренә ҡасҡан ҡолоҡайҙың ҡамауҙа ҡалыуын һәм, йыртҡыстар тешенә эләкмәҫтән, ҡаянан һикереп һәләк булыуын ғүмерлеккә онотмаҫ булды малай. Шул тау эргәһенән үткәндә йәнасыҡҡа кешенләгән ҡолоҡай тауышы ҡолағында шаңдау булып яңғыраны, аяҡ аҫтында меҫкендең һөйәктәре яталыр кеүек тойолдо. Тормоштоң аяуһыҙлығын, ғәҙелһеҙлеген ошо ҡолон яҙмышында күҙалланы. Ә шулай ҙа бүреләрҙән тәғәмләнгәнсе, ҡаянан һикереүҙе өҫтөнөрәк күргән ғорур ҡолоҡайға һоҡланды, тауҙының иҫтәлегенә атауҙарына сикһеҙ һөйөндө.

Әҙәбиәт, тарих, география дәрестәрендә уҡытыусы һөйләгәндәрҙе йотлоғоп тыңлап, һорауҙар биреп, белгәндәрен өҫтәп, дәресте байытты Ғүмәр. Унын зирәклеге, күпте белергә ынтылыуы эҙһеҙ үтмәне - "Тел оҫтаһы" тигән ҡушамат алды ул. Район, республика кимәлендә үткәрелгән олимпиадаларҙа, конференцияларҙа әүҙем ҡатнашып, белемен үҫтерҙе, тәжрибә бүлеште, ҡыҙыҡһыныу дайрәһен киңәйтте. Ер-һыу атамалары буйынса эҙләнеү-тикшеренеү эше республикала иң яҡшыһы тип танылғас, ҡанатланып, яңы һулыш алып был өлкәлә эшләүен дауам итте егет.

Ҡасандыр һөйләшә белмәгәнендә ваҡ ҡына аҡ таштарын уйнатып телен астырған таҙа, шаян Иниҙр йылғаһына, тел аҫҡысы биргән тәбиғәткә рәхмәт йөҙөнән Ғүмәр Сәлимов йылдар үткәс ер-һыу атамалары, уларҙың тарихы, үҙенсәлеге тураһында бик күп фәнни эштәр яҙыр әле. Тел оҫтаһы ғәзиз тыуған ерен, кендек ҡаны тамған йәнтөйәген, бай тарихлы халҡын данлар. Телһеҙлек менән тел бисҭәлектең алтын урталығын тапҡан шәхес ысын тел оҫтаһы була ла инде.

*АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ*



# АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ БЫЛАР

- Нәҫелдең бөйөклөгөн йә боҙоҡлоғон бер вәкиленә ҡарап та баһалап була.
- Боҙоҡлоҡта ла, әҙәплелектә лә уртаса булыу яҡшы, әүлиә булып булмайҙыр.
- Һәр кемгә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та тигеҙ бирелгән, бөтә хикмәт уларҙы өләшә белеүҙә.
- Тәбиғәттә буштан-буш күбәләк ҡанат ҡаҡмай, турғай ҙа шырҡылдамай.
- Ғүмерҙә маҡсатың, маҡсатҡа барыу юлың, юлыңда юлдашың булыуы мөһим.
- Әҙәмдең эшләгән изгелегенән башҡа бер нәмәһе лә мәңгелек түгел.
- Кисәгегә - ихтирам, бөгөнгөгә - иғтибар, иртәгәгә инаныс кәрәк.
- Илап, алдап, талап, урлап йыйған мал-мөлкәт тә сират күперендә ятып ҡала.
- Тыуымыштан һәләтһеҙ кеше яһиллыҡ ҡылып та бөтә донъяға билдәлелек алыуы ихтимал.
- Кәфенде кеҫәһе юҡ. Устарға бер ус бойҙай менән бер баш ҡорот ҡына һыя.
- Аллаһ Тәғәлә әҙәм иңенә күтәрә алмаҫ йөк һалмай, алдына үтәй алмаҫлыҡ бурыстар ҙа ҡуймай.
- Һәр "тайт"ка әйләнеп ҡарамаған, һәр "һайт" ҡа әләгеп ҡоламаған кеше ғүмерен үҙенсә йәшәнем тип әйтә ала.

### Сурытмай ғына әйткәндә…

- Ғүмеремдә үҙ юлымдан уҙам,
Уңға-һулға ҡағылам да туҙам.
Ҡайҙа өргән, ҡайҙа елгәнен дә
Белдермәгән елдә мин бер туҙан.

- Һайраманы миңә бәхет ҡошо,
Ожмах ҡапҡаһын да тапманым.
Ҡара тупраҡ булды ғүмер юлым
Тормош арбаһынан тапалып...

- Яфаларҙан ярһып ярсылған йән
Гәрәбәләй ята ҡыйралып.
Юл япрағы менән бәйләр инем
Яраларын тере һыу һалып...

- Ғәзиздәрҙән ғәзиз бер йәнемде
Фәрештәләр, бәлки, яҡлайҙыр.
Көмөш түгел, алтын бирһәләр ҙә,
Иблистәргә әле һатмайҙар.

- Һанаманым айҙар, көндәремде:
Йәшәр өсөн ваҡыт йәлләмәнем.
Бер ғүмергә биргән йән-тәнемде
Иркәләрһең, Тәңрем, етһә мәлем.

- Утта янған, ташҡын баҫҡан ерҙән
Үрмәләй бит үлән яҡтыға...
Эҙ яҙҙырғым килә үткәндәрҙән,
Үҙгәрермен, бәлки, яҡшыға.

- Тиңдәренең иңенә иңен терәп,
Мәңге тора текә ҡаялар.
Мин үҙемә үҙем терәк, тигән
Тәкәбберҙәр бөгөн ҡайҙалар?..

- Кеше аңлы булһын өсөн күп эшләнде;
Эшләгәндәр эттән-беттән күп тешләнде,
Сөнки хатта Хоҙай аңлы итә алмай,
Кеше менән тәкә һымаҡ тәкәшкәндә.

- Һәләттәрҙә уңмаҫ кеше ғәйбәтләнер,
Ғәҙәтендә уңған һайын ғәйрәтләнер.
Теҙләшкәнгә теш күрһәтеү ярҙам итмәҫ,
Һалпыһына һалам ҡыҫтыр, һәйбәтләнер.

**Урал МОСТАФИН.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Аҡһымды төрлө сығанаҡтарҙан алыу файҙалыраҡ. Мәҫәлән, даими рәүештә дүрт төрҙәге аҡһымлы ризыҡ менән туҡланыу ҡан баҫымы сире ихтималлығын 66 процентҡа кәметеүе асыҡланған.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҠАРБУЗ ЯБЫҠТЫРА

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үҫеше хәүефен кәметә. Кентукки университеты сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин күләме лә әҙерәк булған.

■ Яңыраҡ үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-береһе менән бәйле булыуы быға тиклем иҫбатланған булған. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стресс һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был һөҙөмтә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ водителдәрҙә күберәк күҙәтелә. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Скотт-Паркер.

■ Көньяҡ Кореяла урынлашҡан Оҙон ғүмер университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, асығыу йәки ашауҙы ныҡ сикләү ғүмерҙе оҙайта икән. Улар белдереүенсә, организмға туҡлыҡлы матдәләр етешмәгән ваҡытта ҡанда холестерин күләме генә түгел, инсулинға оҡшаш үҫеү факторы (IGF-1) тип йөрөтөлгән гормон да түбәнәйә. Был гормон организм өсөн зыянлы түгел, хатта файҙалы ла, ул туҡымаларҙың яңырыуында ҡатнаша. Әммә уның күләме артып китһә, ул беҙгә ҡаршы эшләй башлай, сөнки ҡартайыуҙы тиҙләтә. Шул уҡ ваҡытта, асығыу файҙалы булһа ла, алдан табиптар менән мотлаҡ кәңәшләшергә кәрәк, тип иҫкәртә был асышты яһаған ғалимдар.

■ Испания һәм Италияның бер төркөм ғалимдары раҫлауынса, баҡса еләге экстракты ҡояш нурланышынан һәм ҡояшта бешеүҙән һаҡлай. Был яһалма юл менән үҫтерелгән тиреләтикшерелеп ҡаралған, алдан тирене ультрафиолет нурҙарында нурландырғандар. Баҡса еләге экстракты менән эшкәртелгән тиреләкүҙәнәктең һаҡланыу көстәре әүҙемләшкән, асыҡланыуынса, ул яман шеш йәки ялҡынһыныуға килтереүсе процестарҙан да һаҡлаған. Ғалимдар фекеренсә, баҡса еләгенең дауалау көсө антоциан тип йөрөтөлгән ҡыҙыл пигменттарҙа икән - тап улар ялҡынһыныуға ҡаршы һәм антиоксидант һөҙөмтәгә эйә.

■ Компьютер эргәһендә туҡланыу файҙа килтермәй - Киевтың Кеше экологияһы институты тикшеренеүселәре ошондай фекерҙә. Михаил Курик етәкселегендәге бер төркөм ғалимдар компьютер менән кеҫә телефондарының организмға тәьҫирен тикшереп, улар эргәһендә ашарға ярамай тигән ҡарарға килгән. Баҡтиһәң, нескә электромагнит тулҡындары тәьҫире аҫтында ризыҡ үҙенең сифаттарын үҙгәртә икән. Тәүҙә иң түбән электромагнит тулҡындар тәьҫиренән дә молекула структураһын үҙгәртергә һәләтле һыу быға тиҙерәк бирешә. Шуға ла аҙыҡ-түлекте телефондарҙан һәм компьютерҙан йыраҡыраҡ тоторға кәңәш итә улар.

*БИОЛОГ ҒАЛИМ КӘҢӘШЕ*

**Геоботаник тикшеренеүҙәр менән Урал аръяғы районларында экспедицияларҙа йөрөгән саҡ. Бер көн ҡарабойҙай баҫыуы янында урынлашҡан умарталыҡ эргәһенә туҡталдыҡ. Умартасы Динислам ағай беҙҙе кисен яңы ғына һығылған бал менән ихлас һыйланы. Бал ҡорттарының быйылғы эше менән ҡәнәғәтләнеүен һөйләне. Үҙе үҫемлектәр менән ҡыҙыҡһыныуын белдереп: "Аҙ ҡалды шул хәҙер тәбиғәттә бал бирерҙәй һәм башҡа файҙалы үҫемлектәр. Бөтәһе лә химик ашламаларҙы, гербицидтарҙы самаһыҙ ҡулланыуҙан", - тип борсолоп ҡуйҙы. Ә еҙтөймәлек (пижма) үләне тураһында һүҙ сыҡҡас, ул иҫтә ҡалырлыҡ бер хикәйәт һөйләне.**

# ЕҘТӨЙМӘЛЕК...

## йәки Зәйнулла исемле егеттең мутлығы тураһында хикәйәт



- Һуғышҡа тиклем булды был хәл, - тип башланы ул, хәйләкәр йылмайып. - Ошо тирәнең заманында киң билдәле Зәйнулла исемле егете "Минең кеүек изге йәнде бер ниндәй ҙә ҡандала ашамай", тигән хәбәр тарата. Халыҡ ысынлап та ышана. Зәйнулланың абруйы күҙ алдында үҫә. Әммә берҙән-бер көн ҡалала уҡып ҡайтҡан, үләндәр менән ҡыҙыҡһынған ошо ауылдың бер егете серҙе аса. Зәйнулла үҙе йоҡлаған түшәк тирәләй еҙтөймәлек үләнен йәйеп һалған икән...

Ысынлап та, был үҫемлек составында бөжәктәр һәм башҡа умыртҡаһыҙҙар өсөн зарарлы матдә - пиретрин тупланыуы фәнгә билдәле. Шул уҡ ваҡытта был матдәнең йылы ҡанлы хайуандарға һәм кешеләргә бөтөнләй зарары юҡ. Ошо пиретринды күпләп алыу маҡсатында был үҫемлектең "пижма розовая" тигән төрө плантацияларҙа сәсеп үҫтерелә.

Еҙтөймәлек (пижма обыкновенная - Tanacetum vul-gare L.) Башҡортостандың барлыҡ райондарында ла үҫә. Уның асыҡ һары төҫтәге сәскәләре әллә ҡайҙан күренеп тора. Бына ошо һары сәскәләренә ҡарап, уны еҙтөймәлек тип йөрөтәләр ҙә инде. Ул бер төптән 8-10 һабаҡ сығарып, өйкөмләнеп үҫә. Июль-август айҙарында, хатта сентябрҙә лә уны сәскә атҡан килеш осратырға мөмкин. Бейеклеге 1-1,5 метрға етә. Еҙтөймәлек ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡарай.

Үҫемлеккә яҡын килеү менән еҫен һиҙергә була. Тамырсаһы тура, ҡыҫҡа һәм күп башлы. Һабағы бер нисә, тура, бер аҙ йөнтәҫ. Япраҡтары алмаш-тилмәш, эллипс формаһында, остағы япраҡтарының һабы бар, ә түбәндәгеләре ултырма япраҡлы. Бөтә сәскәләре лә торба һымаҡ, асыҡ һары, ситтәгеләре - емешлек бағаналы, өс тешле таж япраҡлы. Урталағы сәскәләре ике енесләләр, биш тешле таж япраҡлылар. Емеше - ярылы орлоҡса.

Был үҫемлек тәбиғәт шарттарына бик тиҙ яраҡлаша. Уны һыу буйҙарында ла, туғайҙарҙа ла, болондарҙа ла йыш осратырға мөмкин. Ул бигерәк тә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында киң таралған. Илеш, Яңауыл, Дүртөйлө, Борай, Балтас райондарында күпләп үҫә. Көньяҡ Уралдың Инйәр, Һаҡмар, Оло Ҡыҙыл, Кесе Ҡыҙыл йылғалары туғайҙарында еҙтөймәлек өйкөмләнеп үҫә. Уны ҡайһы берҙә ҡыр миләше тип тә атайҙар. Сөнки уның япраҡтарының урынлашыуы бер аҙ миләш ағасын хәтерләтә.

Еҙтөймәлек дарыу үләне булараҡ бик әһәмиәтле. Был маҡсатта уның кәрзинкә булып урынлашҡан, хас еҙ төймәләргә оҡшаған лимондай һары сәскәләрен файҙаланалар. Үҫемлектең составында эфир майҙары, флавоноидтар, алкалоидтар, органик кислоталар, ыҫмалалар, буяусы матдәләр, А витамины, каротин бар.

**Иҫеңдә тот.** Йәй көнө походтарға сыҡҡанда еҙтөймәлекте ҡулығыҙға ыуығыҙ - камфара еҫен һиҙерһегеҙ. Уны битегеҙгә, муйынығыҙға һөртөгөҙ - һеҙгә серәкәйҙәр, ләпәкәйҙәр яҡын да килмәҫ, сөнки еҙтөймәлек еҫен серәкәй, себен, көйә һәм ҡандалалар ятратмай.

Еҙтөймәлектең составында эфир майҙарының күп булыуы уның фитонцид активлығын арттыра. Мәҫәлән, еҙтөймәлектең сәскәләрен яңы һуйылған ит тирәләй һибеп һалһаң, ит оҙаҡ һаҡлана, сөнки себендәр еҙтөймәлектең еҫен яратмай һәм иткә ҡунмай.

**Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# АШАУҒА ҠАРАП...



**Ҡан баҫымы юғары булған кешеләр был сирҙе "йүгәнләп" тотоу өсөн көн дә табип яҙып биргән дарыу менән дөрөҫ туҡланыу етә, тип уйлай. Ә бына организмға даими рәүештә аҡһым кәрәклеге хаҡында, моғайын, күптәрҙең ишеткәне лә юҡтыр.**

Тоҙҙо мөмкин тиклем әҙерәк ҡулланыу хаҡында күптәр белә, әлбиттә. Йәшелсә менән емеш-еләк кәрәклеге лә бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Ләкин былар ғына етмәй. Диетологияла дөрөҫ тип иҫәпләнгән аҡһымлы ризыҡтар ҡан баҫымы хәүефен 66 процентҡа кәметә. Был ҡытай ғалимдары тарафынан күп йылдар өйрәнелеп, иҫбат ителде һәм уларҙың фәнни һығымталары "Гипертония" (Hyper-tension) ғилми журналында баҫылып сыҡты.

1997 йылдан 2015 йылға тиклем улар 12 200 кешене тикшергән. Шуларҙың 35 процентында ҡан баҫымы сире башланған булған. Ғалимдар үҙ күҙәтеүендәге был кешеләрҙә ҡан баҫымының артабан көсәйеү ихтималлығы уларҙың ниндәй аҡһымлы ризыҡтар менән туҡланыуына бәйлелеген асыҡлаған. Бындай ризыҡтарҙы белгестәр 8 төркөмгә бүлеп ҡараған: ит, эшкәртелгән (колбаса, ветчина һ.б.) ит, ҡош ите, балыҡ, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, ярҙырылмаған ярма ризыҡтары (һоло, ҡарабойҙай ярмалары, эре тарттырылған ондан икмәк) аҡһымы һәм эшкәртелгән ярма (юғары сортлы он, макарон, таҙартылған дөгө, манный ярмаһынан бутҡа). Аҡһым сығанаҡтары иҫәбендә ярмаларҙы күреп, кемдеңдер ғәжәпләнеүе бар, ләкин уларҙа крахмаллы матдәләрҙән тыш, аҡһым да байтаҡ ҡына. Был исемлектә һөт ризыҡтарының булмауы ла сәйер тойолор, ләкин тикшеренеүҙәр үткәрелгән осорҙа Ҡытайҙа һөт ризыҡтары бөтөнләй ҡулланылмаған тиерлек.

Тикшеренеүҙәр шуны күрһәткән: аҡһымды төрлө сығанаҡтарҙан алыу файҙалыраҡ. Мәҫәлән, даими рәүештә дүрт төрҙәге аҡһымлы ризыҡ менән туҡланыу ҡан баҫымы сире ихтималлығын 66 процентҡа кәметеүе асыҡланған. Рацион төрлөлөгө файҙалы матдәләр ҡытлығына юл ҡуймай, күрәһең. Икенсе һығымта: аҡһымды күп ҡулланыу ҙа, аҙ ҡулланыу ҙа - насар, был йәһәттән сама белеү кәрәк, шул осраҡта өлкәнәйә килә ҡан баҫымы күтәрелеү ихтималлығы күпкә кәмей.

Ошо урында тағы бер аҡһымға бай ризыҡ - йомортҡа хаҡында ла әйтеп китеү кәрәктер. Дөрөҫ, балыҡ та шул уҡ рәттә тора, ул бик файҙалы. Уларҙы күп ҡулланыуҙың һис бер зыяны юҡ, киреһенсә, улар сир ихтималлығын күпкә кәметә, тип иҫәпләнә. Әгәр таҙартылған һәм өрҙөрөлгән ярмалар үҙҙәре генә ҡан баҫымынан әллә ни һаҡлай алмаһа, ҡуҙаҡлылар һиҙелерлек файҙа килтерә, ә бына йомортҡа хаҡында ни әйтергә була? Күп йылдар буйы беҙҙе был ризыҡтағы холестериндан ҡурҡытып, уны йыш ҡулланыуҙан тыя килделәр. Бөгөн иһә табиптар уны хатта көн һайын ашаһаң да ярай, тигән ҡараштта, тик шулай ҙа бында ла сама белеү мотлаҡ, әлбиттә. Иң мөһиме, йомортҡалағы овокининдар - 6-8 аминокислотанан торған махсус матдә, йәғни полипептидтар ҡан баҫымын түбәнәйтеүсе АПФ ингибиторлы популяр препараттар кеүек үк тәьҫиргә эйә. Әйткәндәй, һөт ризыҡтары ла ошондай уҡ үҙенсәлеккә эйә. Шуға күрә лә был ризыҡтарҙы ҡурҡмайынса көн дә ҡуллана алаһығыҙ.

**"АиФ" аҙналығынан.**

*✓ Иблис Аллаһтан алыҫайтыу өсөн ошондай һуҡыр мөхәббәт менән кеше күҙҙәрен томалап ҡуя. Кеше һөйгәненең ысын йөҙөн күрмәй, үҙен дә, Аллаһы Тәғәләгә алып барған юлды ла юғалта.*



*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# ҠӘҺӘРЛӘНГӘН ФИРҒӘҮЕН,

## йәғни Ҡөрьәндә һөйләнгән өс мең йыл элекке ваҡиға тураһында



**Боронғо донъя тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар боронғо Мысырҙа үҙен алла тип иғлан иткән Фирғәүен тураһында яҡшы белә. Ҡөрьән-Кәримдең "Юныс" сүрәһендә был турала мәғлүмәт һәм һығымталар бар. Меңәрләгән йыл элек булған ҡот осҡос ваҡиғаларҙың дәлиле Англияның танылған Британия музейында һаҡлана. Быяла аҫтында - йөҙтүбән йыҡылған мумия-кеше экспонаты. Музейҙағы башҡа мумияларҙан айырмалы, был мумияның бөтөн ағзалары ла, шулай уҡ сәстәре һәм һаҡалы ла нисек бар - шулай һаҡланған. Мәйет бер нисә аҙнала тарҡала икәне барыбыҙға ла билдәле. Ләкин был кешенең мәйете мең йыл үтһә лә, үҙгәрмәгән дә, тарҡалмаған да. Бының сере ниҙә?**

Был серҙе беҙгә изге Ҡөрьән асып бирә. Шуның менән был китаптың бөйөклөгө һәм Алланан икәнлеге тағы бер тапҡыр раҫлана. Ҡөрьәндәге аяттарҙа Муса менән Фирғәүен көрәше һүрәтләнә. Муса бәйғәмбәр беҙҙең эраға тиклем 1200 йылдарҙа, йәғни өс мең йыл элек йәшәй. Ул замандарҙа ла изгелек менән яуызлыҡ алышҡан. Фирғәүен Мусаның иң яуыз дошманы булған. Бер ваҡыт Фирғәүен төш күрә. Йәнәһе, уның илендә тыуған бер малай, үҫкәс, уны тәхетенән бәреп төшөрәсәк. Шунан Фирғәүен илдә яңы тыуған бөтөн ир балаларҙы ла үлтерергә бойороҡ бирә. Әммә Хоҙай шул саҡта тыуған Мусаны үҙ яҡлауы аҫтына ала һәм уны аҙаҡ бәйғәмбәр тип иғлан итә. Ошонан һуң Фирғәүендең Хоҙайға асыуы тағы ла көсәйә.

Фирғәүен Мусаны һәм уның вариҫтарын - Бани Исраил ырыуы халҡын ныҡлап ҡыйырһыта башлағас, Хоҙай Мусаға һәм уның халҡына Мысырҙы ташлап китергә тигән әмер ебәрә. Муса үҙенең ырыуҙаштары менән юлға сығыуын ишеткәс, Фирғәүен улар артынан ғәскәре менән ҡыуа китә (26-сы сүрә, 52,53-сө аят. 20-се сүрә, 79-сы аят).

Муса бәйғәмбәр һәм уның кешеләре, үҙҙәрен эҙәрлекләүселәрҙән ҡотолоп, Алла ихтыяры менән Ҡыҙыл диңгеҙ ярҙарына килеп етә. Алда дошман кеүек урғылып диңгеҙ ята, артта диңгеҙҙәй урғылып дошман ябырылып килә. Ошондай ауыр минутта Муса, Хоҙай ебәргән әмергә эйәреп, үҙенең таяғы менән диңгеҙгә киҙәнә. Шул мәлдә диңгеҙ икегә ярыла, ике яҡта ла бейек тауҙай диңгеҙ өйөлә, уртала юл барлыҡҡа килә. Муса бәйғәмбәр ошо юлдан үҙ халҡы менән атлап үтә (26-сы сүрә, 62-64 аяттар).

"Юныс" сүрәһендә был ваҡиға шулай һүрәтләнә: "Һәм беҙ Исраил балаларын диңгеҙ аша үткәрҙек, Фирғәүен һәм уның ғәскәре асыу һәм дошманлыҡ менән улар артынан ҡыуып китте. Ул бата башлағас: "Иман килтерәм мин, Исраил балалары иман килтергәндән башҡа илаһ юҡ, һәм мин - мосолмандарҙан!" - тине.

Әммә Аллаһы Тәғәлә быға саҡлы үҙен Хоҙайға тиңләгән Фирғәүендең тәүбәһен ҡабул итмәй. Киләһе аятта шулай тиелә: "Эйе, хәҙер! Ә һин элек буйһонманың һәм боҙоҡлоҡ таратыусыларҙан булдың". Шулай итеп, Хоҙай әмере менән улар һыуға бата.

Ошо уҡ сүрәнең 92-се аятында был ваҡиғаның дауамы һүрәтләнә. Аллаһы Тәғәлә һыуға батырылған Фирғәүенгә былай ти: "Һәм һинән һуң килгәндәргә аят булһын өсөн бөгөн Беҙ һинең кәүҙәң менән ҡотҡарабыҙ. Ысынлап та, күп кешеләр беҙҙең аяттарыбыҙҙан битараф!"

Эйе, Ҡөрьән ысынлап та Хоҙайҙан һәм Хәҡиҡәт тә унда ғына. Изге тәғлимәттәге бер генә фекер ҙә быға саҡлы үҙ актуаллеген юғалтманы. Фирғәүен менән бәйле аяттарҙағы ваҡиғалар ҙа быға раҫ. Уның кәүҙәһе табылған урын үҙе үк Хоҙай тарафынан билдәләнгән мөғжизәнең дәлиле. Кәүҙә Ҡыҙыл диңгеҙ ярҙары буйында ер аҫтында һаҡлана. Инглиз тикшеренеүселәре уны эҫе ҡомлоҡтарҙа ҡаҙып ала һәм үҙҙәренә алып ҡайта. Мумияның йәшен билдәләү маҡсатында үткәрелгән тикшеренеүҙәр уны өс мең йыл тип билдәләй. Ул кеше Муса бәйғәмбәр заманында йәшәгән, тигәнгә раҫ был.

Тағы бер раҫлау шунан ғибрәт: 1144 йылда донъя ҡуйған аз-Замахшарий тигән кеше Юныс сүрәһенең 92-се аятын тәфсирләп, үҙе үлгәндән һуң һигеҙ быуат үткәс табыласаҡ кәүҙәне һүрәтләй. Уның һүрәтләүҙәре иҫ киткес дөрөҫлөккә тап килә, әйтерһең дә, ул уны үҙ күҙҙәре менән күргән: "Һине диңгеҙ ярына бер тыныс ҡына урынға сығарып ташларбыҙ. Һинең кәүҙәңә боҙолорға бирмәбеҙ, ул һинән һуң бер нисә быуаттан тыуғандар ҙа күрһен һәм ғибрәт алһын өсөн бөтөн, һаҡланған, яланғас, кейемһеҙ булыр" (Кашшоффа тәфсире, 2-се том, 251-252-се биттәр).

Аяттағы раҫлауҙар һәм Ҡөрьәндең тәфсирҙәре кәүҙәнең мумияланмауы тураһында һөйләй. Билдәле булыуынса, мумиялағанда мәйеттең ҡайһы бер ағзалары алып ташлана, ә бында барыһы ла үҙ урынында.

Шулай итеп, Англия музейындағы йөҙтүбән йығылған Фирғәүендең кәүҙәһе беҙгә шуны иҫкәртә: беҙ бары тик Аллаға ғына табына алабыҙ.

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА әҙерләне.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЯРАТ, ӘММӘ ТАБЫНМА!



**Табыныу дәрәжәһенә еткән мөхәббәт күп осраҡта Хоҙай Тәғәлә рөхсәт иткән сиктән ашып китә. Ул бөгөнгө заманда граждандарлыҡ никахы формаһында сағылыш таба. Йәки яуапһыҙ мөхәббәт арҡаһында йәштәр үҙ-үҙенә ҡул һала, һөйгәнен үлтерә һ.б. Бындай осраҡтар тураһында көнө-төнө телевидение, гәзит-журналдар бәйән итә. Бындай күңелһеҙ хәлдәр артыҡ хисле булыу, яуапһыҙлыҡ арҡаһында барлыҡҡа килә.**

Йыш ҡына йәштәр бөтә һөйөүен, иғтибарын Аллаһҡа түгел, ә яратҡан кешеһенә йүнәлтә. Бындай кешеләр Хоҙайҙың исемен түгел, һөйгәненең исемен ҡабатлай; иртән иртүк улар шулай уҡ Аллаһы Тәғәләне түгел, яратҡан кешеһен иҫләп уяна. Ундайҙар Аллаһ өсөн түгел, бары тик һөйөклөләре өсөн ҡорбандарға бара. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, йәштәр бер-берेһен илаһилаштыра. Һөйгәндәр бер-берेһенә "Мин һине генә яратам", "Һинең өсөн йәшәйем", "Был донъяла минең өсөн һин генә бар", тигән һүҙҙәр бүләк итә һәм Аллаһтан йыраҡлаша.

Иблис Аллаһтан алыҫайтыу өсөн ошондай һуҡыр мөхәббәт менән кеше күҙҙәрен томалап ҡуя. Кеше һөйгәненең ысын йөҙөн күрмәй, үҙен дә, Аллаһы Тәғәләгә алып барған юлды ла юғалта. Ҡөрьән ундай аңды юғалтырлыҡ мөхәббәттән һаҡ булырға саҡыра. Әгәр ҙә ундай һөйөү кешегә Аллаһы Тәғәләне онотоуға булышлыҡ итә икән, был иблис ҡорған тоҙаҡҡа килтерә. Бындай илаһилаштырыу менән бәйле һөйөү бөгөнгө көндә күктәргә ашырылып маҡтала. Йыр, кино сәнғәтендә мөхәббәт темаһы ҙур урын алып тора һәм романтик, хисле рухлы көйҙәр кешелә ысын һөйөү тойғоһо тураһында бөтөнләй икенсе фекер ҡалдыра.

Бер һүҙ менән әйткәндә, кешене Аллаһы Тәғәлә аша яратыу зарур. "Аллаһы Тәғәләгә генә ышанған бәндәләр үлгәндән һуң ожмахҡа эләгәсәк", - тип әйтеп ҡалдырған Мөхәммәт бәйғәмбәр. Аллаһы Тәғәләгә ышанған кешенең һөйөүе нур ише таҙа һәм саф. Сөнки ул ысынында һөйгәнен түгел, ә Аллаһы Тәғәләне ярата; һөйгәненең матурлығы - Аллаһтың сағылышы икәнен яҡшы аңлай.

Шулай итеп, Аллаһы Тәғәләгә ысын ышанған кеше яуапһыҙ мөхәббәттән ғазаптар кисермәйәсәк. Әгәр ҙә кешенең инаныуы көслө һәм ныҡ икән, Хоҙай уға барыһын да күпләп бирәсәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Фән аңыбыҙҙың ижади һәләтен асыҡлай аламы?

Был һорауға яуапты аң серҙәренә арналған ниндәйҙер симпозиумда табырға теләһәгеҙ, бушҡа аҡса ғына түгәсәкһегеҙ. Быға саҡлы яҙып үткән гәҙәти булмаған һәләттәр өлкәһендәге тикшеренеүҙәр тураһында бер ни ҙә билдәле түгел. Әммә ҡул һелтәргә ашыҡмағыҙ. Әле өмөт бар. Бер төркөм философик ҡарашлы ғалим аңды феноменология күҙлегенән өйрәнергә баҙнат итә һәм коллегаларының үҙгәрмәҫ фекеренә ҡаршы сыға, тикшеренеүҙәргә һәм профессиональ абруйға дотацияны юғалтыу хәүефе булһа ла, тәүәккәллек күрһәтә. Был өлкәлә Айҙан ҡайтыу менән астронавт Эдгар Митчелл тарафынан нигеҙләнгән институт президенты Уиллис Хармондан да тәрәнгә төшөүсе юҡ. Мин үҙем китаптарымды ярты быуаттан ашыу яҙам, йәғни алғы рәттәрҙә барам һәм бында яңғыҙлыҡ һыҡ һиҙелә икәнлегән раҫларға әҙермен. Моғайын, Хармон да аңға бәйле әхлаҡи, этик һәм рухи мәсьәләләр буйынса ике аҙналыҡ конференцияла үҙен тап шулай тойғандыр.

Хәҙер ҙә аң мәсьәләләре буйынса бихисап конференциялар уҙғарыла. Уларҙа төрлө өлкә белгестәре ҡатнаша. Әммә улар тар урамдар буйлап йүнәлеш ала һәм көрсөккә барып терәлә. Яҡын арала ниндәйҙер иҫ китерлек һәм ғәмәли асышҡа юлығыуыбыҙ шикле. Аңды ысынлап өйрәнеүсе тикшеренеүселәрҙе бөгөнгө тормошта эҙләгеҙ: улар һеҙ һәм тормошон яҡшыртыу өсөн үҙ аңын файҙаланырға тырышҡан башҡа кешеләр.

Ә хәҙер киберфизиология тураһында. 1988 йылда йәҙҙәрсә ғалим йөрәктә электрон стимуллаүҙы уйлап табыусы Эрл Баккен саҡырыуы буйынса Молокаи утрауына килә. Улар аңдың тәнгә йоғонтоһо өлкәһендәге асыштары менән бүлешергә йыйыла. Дөйөм һығымта шулай ышандырырлыҡ була, ғалимдар бер шикләнеүһеҙ яңы - әлегә аҙ билдәле күренеште аңлатыусы "киберфизиология" аңлатмаһын индерергә ҡарар итә. Ғалимдар электр энергияһының принцибын бигүк яҡшы аңламай, әммә был уларға уны файҙаланырға ҡамасауламай. Был беҙгә киберфизиология менән файҙаланырға бер кем дә ҡамасауламауын аңлата. Йомғаҡлап, шуны әйтергә мөмкин, аң менән тән араһындағы бәйләнеште именлегендә, байлығынды һаҡлау өсөн ҡулланырға мөмкин. Мин махсус рәүештә, һеҙ һуҡырҙарса әҙер һүҙҙәрҙе ҡабатламаһын өсөн, аныҡ уйҙағы образдар һәм күрһәтмәләр ҡулланманым. Бында спонтанлыҡ элементы бик мөһим. Әгәр ятлаған һүҙҙәрҙе ҡабатлаһаң, нимәлер юғала. Был мөхәббәт романындағы яратҡан фрагментты цитата итеп килтереү кеүек. Һүҙҙәр механик рәүештә әйтелә, уларҙа хистәр тәрәнлеге юҡ.

**Киберфизиологияны дауаланғанда нисек итеп файҙаланырға?** ● Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, тәнегеҙҙе яҙығыҙ, көсөргәнештән арынығыҙ. ● Тәнегеҙҙең эсенә үтеп инеп, аяғығыҙҙың һынған урынын күреүегеҙҙе күҙаллағыҙ. ● Уйығыҙҙа ғына: "Минең ҡәҙерле аяғым, һындырғаным өсөн ғәфү ит. Минең һөйөүемдә ҡабул ит һәм тиҙерәк төҙәл", - тип әйтегеҙ. ● Уйығыҙҙа ғына һынған урындың нисек итеп төҙәлеүен күрегеҙ, әйтерһең дә уңалыу тиҙләтелгән темпта бара. ● Уйығыҙҙа ғына: "Шулай тиҙ уңалғаның өсөн рәхмәт", - тип ҡабатлағыҙ. ● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Был күнекмәне тәнегеҙҙең теләһә ниндәй күҙәнәге, һөйәге йәки ниндәйҙер ағзаға ҡарата ғына түгел, ә башҡаларҙы, ара алыҫлығына ҡарамаҫтан, дауалау өсөн дә файҙаланырға була. Көсөргәнештән арыныу - тәрән, ә күреү образдарығыҙ дөрөҫ булырға тейеш. Күптән түгел табиптар доға уҡыу һауығыуҙы яҡынса 35 процентҡа тиҙләтә, тип раҫлаған. Тимәк, быны ла доға тип атарға мөмкин. Нисек кенә атаһаҡ та, был механизм эшләй.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**5 СЕНТЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**15.45 "МузКәрәҙ". [6+]**
**16.00, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Автограф. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.50 Хоккей. "Витязь" (Московская область) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Ивановы". [12+]**
**3.00 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**4.15 История одного села. [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**

**6 СЕНТЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Д/ф "Потерянный сон". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.45 "Дорога к храму". [0+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Звезда". [16+]**
**3.30 "Райса + Файзи". [12+]**

**7 СЕНТЯБРЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 20.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Д/ф "Выбор есть всегда". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Апчхи". [0+]**
**15.45 "Сулпылар". [6+]**
**16.00 Чемпионат по шашкам.**
**17.30 Д/ф "Потерянный сон". [12+]**
**17.45 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 Хоккей. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Грешник". [12+]**
**3.30 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**8 СЕНТЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "МузКәрәҙ". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.45 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Ап-асыҡ.**
**0.00 Х/ф "Вот такая музыка". [12+]**
**2.45 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**

**9 СЕНТЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.40 Улыбка на ночь. [16+]
0.45 Х/ф "Княжна из хрущевки". [12+]
4.10 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 "Легенды космоса". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Д/ф "Живая вода". [12+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00, 4.00 Автограф. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Валерий Харламов. Дополнительное время". [12+]**
**2.00 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**10 СЕНТЯБРЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Т/с"И шарик вернется".[12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Не твое дело". [12+]
0.55 Х/ф "Так поступает женщина". [12+]
4.05 Х/ф "Осенние заботы". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкэн". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 Нык бул. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном... [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Территория женского счастья. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Презентация Межрегионального поэтического конкурса "Минең Рами". [12+]**
**1.00 Х/ф "День семейного торжества". [12+]**
**3.15 Спектакль "Красная звезда". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**11 СЕНТЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.35, 3.15 Х/ф "Нелегкое счастье". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.55 Т/с"И шарик вернется".[12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Любовь на сене". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]**
**18.30 Спектакль "Горка". [12+]**
**20.00 Әлләсе... [12+]**
**20.45 Дознание. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 2.45 Х/ф "Гонка с преследованием". [12+]**
**0.30 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**2.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**4.15 История одного села. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 сентябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я.Пулинович, Г. Яхина романы буйынса). 16+
**8 сентябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 сентябрь "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+
**6 сентябрь "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+
**7 сентябрь "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З.Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+
**8 сентябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+
**9 сентябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+
**11 сентябрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**4 сентябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+
**10-11 сентябрь Премьера! "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3 сентябрь "Дорожная сказка"** (Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 12.00 0+
**6 сентябрь** Стәрлетамаҡ Рус драма театры сәхнәһендә **"Game over"** (З. Сөләймәнов), социаль драмаһы. 13.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедияһы менән гастролдәр:
**Баймаҡ районы: 5 сентябрь** - Буранбай, **6 сентябрь** - Ниғәмәт, **10 сентябрь** - Мерәҫ ауылдарында;
**Әбйәлил районы: 7 сентябрь** - Байым, **8 сентябрь** - Ишбулды, **9 сентябрь** - Тал Ҡусҡары ауылдарында. 20.00 12+
**"Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драмаһы менән гастролдәр:
**Хәйбулла районы: 5 сентябрь** - Байғусҡар, **6 сентябрь** - Ивановка, **7 сентябрь** - Уфимский, **8 сентябрь** - Маҡан ауылдарында;
**9 сентябрь - Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылында,
**10 сентябрь - Баймаҡ районы** Түбә ауылында. 20.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Сентябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (9) дүшәмбе | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 17:48 | 19:56 | 21:26 |
| 6 (10) шишәмбе | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 17:46 | 19:54 | 21:24 |
| 7 (11) шаршамбы | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 17:44 | 19:51 | 21:21 |
| 8 (12) кесе йома | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 17:42 | 19:49 | 21:19 |
| 9 (13) йома | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 17:40 | 19:46 | 21:16 |
| 10 (14) шәмбе | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 17:38 | 19:44 | 21:14 |
| 11 (15) йәкшәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 17:36 | 19:41 | 21:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# СЕНТЯБРЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**34-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Мәл. Әлибаев. Нагасаки. Радиус. Саған. Көрт. Ишек. Аш. Ыласын. Ут. Ираҡ. Алло. Таба. Лавров. Борғо. Утар. Нил. Йома. Арат. Алҡа.

**Вертикаль буйынса:** Сабынлыҡ. Ноғоманов. Нарыҫтау. Әй. Тархан. Сикә. Әлифба. Абруй. Ата. Оҫта. Иптәш. Ритм. Идеал. Аҡыҡ. Рәхимғолова. Ирвин. Ишәк. Ситдиҡова.

*ҺӨЙӨНСӨ!*

# ТӨРӨКТӘР ҘӘ...

## Зәйнәб Биишеваны уҡый




**Билдәле башҡорт яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһының тәүге романы Төркиәлә баҫылып сыҡҡан һәм Евразия яҙыусылар берләшмәһе (Avrasya Yazarlar Birligi) тарафынан уҡыусыларға тәҡдим ителгән, тип хәбәр итте Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының матбуғат хеҙмәте.**

Романдың тәржемәсеһе - филология фәндәре докторы Фатма Эртюрк был романды йәшерәк саҡта уҡығандарға мотлаҡ ҡабаттан уҡып сығырға тәҡдим итә, сөнки тормош тәжрибәһе туплағандан һуң әҫәр бөтөнләй башҡаса ҡабул ителә. "Зәйнәб Биишева - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары әҙәбиәтендә айырым урын биләгән шәхес. Ҡеүәтле текст, ябай тел унын әҫәрҙәрен аңлайышлы итә. Зәйнәб ханымдың романдары башҡорт әҙәби теле өлгөләре исемлегенә ингән. Төрөк телендә нәшер ителгән "Кәмһетелгәндәр" романы - хеҙмәттәштәребеҙ менән "Яҡтыға" трилогияһын тәржемә итеүҙең беренсе этабы. Зәйнәб Биишева XX быуат башындағы ваҡиғалар хронологияһында башҡорт ауылының тормошон, төп герой Емеште һүрәтләп, йәмғиәттең, кешеләрҙең нисек үҙгәреүен, үҫешен сағылдыра алған. Беҙ үҫәбеҙ, нығынабыҙ, донъяға һәм үткән ваҡиғаларға ҡарашыбыҙ үҙгәрә - романда ла тап ошо трансформацияны күрәбеҙ. Минең уйымса, башҡорт уҡыусыһы геройҙар образына һалынған метафораларҙы, моғайын, тағы ла тәрәнерәк тоялыр, аңлайҙыр. Хеҙмәттәшем менән ошо хис-тойғоларыбыҙҙы ватандаштарыбыҙға еткерергә тырыштыҡ. Эш барышында беҙ үҙебеҙҙе Емеш һәм романдың башҡа геройҙары урынына ҡуйып ҡарап, бер үк ваҡиғаларға төрлө күҙлектән ҡараныҡ. Хис-тойғоларға бай әҫәр башҡорт мәҙәниәтен тағы ла нығыраҡ аңларға, туғандаш халҡыбыҙҙың бай тарихына ҡағылырға мөмкинлек бирҙе", - ти ғалимә.

Филология фәндәре докторы Фатма Эртюрк башҡорт телен өйрәнеү менән студент йылдарынан шөғөлләнә, уны ҡыпсаҡ телдәре төркөмөндәге берәмек булараҡ өйрәнә. Магистратурала "Башҡорт телендә сифат ҡылым һәм уның функциялары" темаһы буйынса диплом яҡлаған. "Башҡорт һәм төрөк телдәре синтаксисын сағыштырма анализлау" темаһына докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләү өсөн Фатма ханым күпмелер ваҡыт Өфөлә йәшәгән. Әлеге ваҡытта Төркиә Республикаһының Нигде ҡалаһында Омер Хәлисдемир исемендәге университеттың Хәҙерге төрки телдәр бүлегендә башҡорт һәм татар телдәрен уҡыта.

**Ғәзиз ЙОСОПОВ.**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# БАЛАҢ АҠСА ТОТОНА БЕЛӘМЕ?



**Мәктәптә уҡыған балаһына юлға, ҡапҡылап алырға йәки көнекмәгә түләргә ата-әсәләр аҡса бирә. Әммә уны йыш ҡына бала икенсе маҡсатта тотона. Һаҡлыҡ банкының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Азамат Сәлихов, ике бала атаһы, уны нисек дөрөҫ тотонорға өйрәтеү тураһында аңлатма бирә.**

"Балағыҙға аҡсаны көн һайын түгел, ә аҙнаһына йәки айына бер мәртәбә бирегеҙ. Бала уны көн дә кәрәкле һәм өҫтәмә сығымдарға үҙе дөрөҫ бүлергә, иҫәпләргә өйрәнергә тейеш. Тәүге мәлдә, әлбиттә, был йәһәттән ата-әсәһе ярҙам итергә тейеш. Юлға, ашауға күпме аҡса китеүен, ҡалған аҡсаны нисек тотонорға кәрәклеген өйрәтегеҙ. Уны бала менән бергә һөйләшеп хәл итергә кәрәк.

Бөтә аҡсаһын тотонғаны, кәрәкмәгән нәмә алғаны өсөн әрләмәгеҙ. Ҡайһы берҙә бала түгел, оло кешегә лә сығымдарҙы планлаштырыу енел түгел. Улай ярамағанлығын яҡшылап аңлатығыҙ. Яңынан биргән ваҡытта был аҡса алдағы ай лимитынан икәнен дә белһен. Мотлаҡ сығымдар хаҡында тағы бер тапҡыр төшөндөрөгөҙ. Бер көн уға юл өсөн түләргә аҡса етмәсәге тураһында иҫкәртегеҙ. Ҡурҡытырға кәрәкмәй, ә аныҡ миҫалда был етди мәсьәлә икәнлеген күрһәтегеҙ.

Бала нимә күрә - шуны эшләй, үҙегеҙҙең миҫалда бюджетты нисек бүлергә күрһәтегеҙ. Коммуналь хеҙмәткә иҫәпләгәндә балағыҙҙы саҡырығыҙ, уны уйын формаһында эшләргә була. Түләгән мәлдә, мәҫәлән, хәҙер 6000 һум кәрәклеген, тағы бензинға, аҙыҡ-түлеккә күпме тейешлеген әйтегеҙ. Планлаштырылмаған сығымдарға ҡалһа, күптән теләгән наушник һатып алыу мөмкинлеген дә белеп торһон!

Банк картаһын файҙаланығыҙ. Байтаҡ банктарҙың балалар һәм йәштәр өсөн махсус картаһы бар. Һаҡлыҡ банкындағыһы Детская СберКарта тип атала. Унда ата-әсәләр контролен, лимит һәм сығымдарҙы күҙәтеү системаһын ҡуйырға мөмкин. Аҡсаһын юғалтыуҙан йәки берәһе урлап ҡуймаһын, тип ҡурҡырға ла кәрәкмәйәсәк. Бынан тыш, балағыҙ СберKIDS ҡушымтаһында банктан бонус ала йәки уны йыя ала, онлайн-режимда йыйыу шулай уҡ үйнаға әүерелергә мөмкин. Иҫәптә һандың артыуын күреп, балағыҙ юҡ-барға аҡса тотонмай башлаясаҡ.

Финанс хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре хаҡында һөйләгеҙ. Банк картаһын һайлағанда, уны нисек хәүефһеҙ тотонорға, уның паролен класташтарға, дуҫтарға әйтергә, кеше күргән урынға һалырға ярамағанлығын аңлатығыҙ.

АФАРИН!

# ШАЙМОРАТОВСЫЛАР ИШӘЙӘ



**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында яңы уҡыу йылына өсөнсө "шайморатовсылар" класы әҙер. 2020 йылда Өфөнөң тап ошо мәктәбендә беренсе махсуслаштырылған класс асылғайны. Быйыл уҡыусылар туғыҙынсыға күсә. Гимназия етәкселеге аныҡ фәндәргә баҫым яһарға хәл иткән. Алгебра һәм физика дәрестәре күберәк, робот техникаһы һәм техник инглиз теле сәғәттәре өҫтәлгән.**

"Йәш шайморатовсыларҙың буш ваҡыты юк тиерлек. Ошо класты асҡанда маҡсатыбыҙ кадеттарҙы ҡабатламау ине. Беҙ уларҙы илебеҙҙең һәм республикабыҙҙың техник элитаһы иҫәбендә күрергә теләйбеҙ", - ти Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Азамат Шәмсетдинов.

Уҡытыусы фекеренсә, башҡорт дивизияһы командиры исемендәге класс республикабыҙ районданан килгән балаларға үҙ потенциалын асырға мөмкинлек бирә. "Миңлеғәли Шайморатов төпкөлдән сыҡҡан, ныҡ белемле булған. Бер нисә тел белгән. Беҙҙә лә күпселек уҡыусылар - ауыл еренән. Генерал-майор уларға өлгө булып торһон ине: ҡайҙа тыуып үҫкәнең мөһим түгел, төпкөлдән булһаң да, ныҡышмалылыҡ, тырышлыҡ менән юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә алаһың", - тип иҫәпләй Азамат Шәмсетдинов.

Әйткәндәй, 1 сентябрҙән Башҡортостанда Миңлеғәли Шайморатов исемендәге 78 класс асыла. Белорет лицей-интернатында һәм Сибай гимназия-интернатында махсус кластар ойошторолдо. Уҡыусыларҙы шайморатовсылар сафына бағышлау тантанаһы 11 октябрҙә Өфөнөң Совет майҙанында уҙа.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Сибай ҡалаһындағы гимназия-интернатта яңы исемгә VII Б класы уҡыусылары лайыҡ булған. Бының өсөн махсус форма тектергәндәр, "Йәш шайморатовсы" тигән күкрәк билдәһенә заказ биргәндәр, уҡыу программаһы ла төҙөлгән. "Үткән уҡыу йылы аҙағында беҙ ата-әсәләр йыйылышы уҙғарып, Миңлеғәли Шайморатов исемендәге класс булдырылыуы тураһында иғлан иттек. Уҡыусыларҙың әсәйҙәре һәм атайҙары был ҡарарҙы бер тауыштан хупланы. Балалар ҙа яуаплылыкты тоя - уҡыуҙарын яҡшыртылар. Хәҙер дәртләнеп яңы уҡыу йылын көтәләр. Шайморатовсы кластарын асыу - илһөйәрлек тәрбиәһенең иң яҡшы алымдарының береһе. Моғайын, бер нисә йылдан беҙҙең гимназияла бер нисә класс булыр", - ти гимназия директоры Роза Бикбова.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠАҠМА КЕШЕ ҠАПҠАҺЫН -

## үҙ ҡапҡанды ҡағырҙар

**Мин Миәкә районы Исламғол ауылында тыуып үҫтем. Беҙҙең ауылда халыҡтың теле шул тиклем бай булды. Хәҙер инде икенсе төрләрәк, әҙәбисәрәк һөйләйҙәр . Минең дә ауылдан сығып китеүемә 50 йыл тулды. Инәйем дә (әсәйемде шулай тибеҙ), атайым да тапҡыр телле, тура һүҙле булдылар. Һүҙ һөйләй белмәгән кеше менән инәйем бик һөйләшеп бармаҫ, "Бутҡа бешерең булмай һинең менән", тиер ине. Беҙҙең һөйләшеү ҡаты - к хәрефе урынына ҡ, т урынына д хәрефтәре әйтеп һөйләшә инек: тәрән күл - дирән күл, тирмән - дегермән, күк күкрәй - дөмбөрҙәй, тубырсыҡ - дөмбөрсәк (шыршы дөмбөрсәге).**

Беҙ үҫмер саҡта, атайым берәй ерге китһә, инәйем янына әбейҙәр кис ултырырға килә ине. Һөйләшеп ултыралар. Берәйһен яманлап һөйләһәләр, инәйем: "Ҡаҡма кеше ҡапҡаһын - үҙ ҡапҡанды ҡағырҙар", - тип туҡтата ине. Күрше Шәрифә әбей килеһен яманлай ҙа йөрөй торғайны, инәйем уға: "Бер сәсең ике булған, ҡуй, асыу алдан, аҡыл арттан, йөрөмә хәсрәт арттырып", - ти ине. Күп көлә башлаһаң: "Иҫәр бисә кеүек юҡҡа көлмә", - ти торғайны. Һикрәңләп йөрөй башлаһаң, "татар күбәләге" йә "титарай" һүҙен ишетәһең. Инәйемдән, атайымдан ишеткән һүҙҙәрҙе яҙып үтәйем әле:

Кешенеке - кештәктә, үҙеңдеке - үҙәктә.

Яҙғы көн - ярты аҡыл, көҙгө көн - кут аҡыл.

Ярлы көнөң ялыныс, битемдең һыуын биш түгеп килдем.

Барыр ерем юк, батыр күлем юк.

Күңелһеҙгә күлмәк кейҙермәйҙәр.

Күте күкәй һалмаған, бөйөрөн бала баҫмаған, тип ҡыҫыр бисә тураһында әйтәләр ине.

Ул араһында улы юк, ҡыҙ араһында ҡыҙы юк .

Битенә бук буялған, тип оятһыҙ кешене әйтәләр.

Ғәзбым ҡабарҙы - асыуым килде мәғәнәһендә.

Ҡөнәри - туймаҫ тамаҡ.

Сәүсәләк - сабырһыҙ.

Ғазазил - усал.

Мерәүәтһеҙ - иманһыҙ.

Зым-зал килделәр - талаштылар мәғәнәһендә.

**Фирҙәүсә САФИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨНДӨҢ - КҮҘЕ,

## төндөң ҡолағы бар

Мең көн күләгә булып йөрөгәнсе, бер көн кеше булып йөрөгәнең яҡшы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Даһилыҡтың сиге бар, ә ахмаҡлыҡтың бер ниндәй сиге лә юк.

**(Ричард Бах).**

Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең ни телә-гәнен дә белмәй. Әммә шул белмәгәнде алыу өсөн һине киҫәккә турарға әҙерҙәр.

**(Дон Маркис).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡытыусы дәресен башлап, бер ҡулына яртылаш һыу һалынған стакан тотҡан һәм уны уҡыусыларына күрһәтеп, былай тип һораған: "Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был стакандың ауырлығы күпме икән?" Уҡыусылар ауыҙынан төрлө яуап ишетелгән: "50 грамм", "125 грамм". "Ысынында, был стакандың күпме тартҡанын мин үҙем дә белмәйем, үлсәп ҡараманым... - тигән уҡытыусы. - Ә шулай ҙа әйтегеҙ әле: был стаканды бер нисә минут тотоп торһам, миңә нимә буласаҡ?" "Бер ни ҙә булмаясаҡ", - тип яуаплаған уҡыусылар. "Әгәр уны бер сәғәт буйы тотоп торһам, нимә буласаҡ?"- тип һораған уҡытыусы. Уҡыусыларҙың береһе: "Һеҙҙең ҡулығыҙ ауыртасаҡ", - тип яуап биргән. "Дөрөҫ, - тигән уҡытыусы, - әгәр ҙә ошо стаканды көнөҙөнө тотоп торһам, миңә нимә буласаҡ?" "Ҡулдарығыҙ ойоясаҡ, мускулдар көсөргәнештән ауыртасаҡ, һеҙгә хатта врачҡа күренергә тура киләсәк", - тигән икенсе уҡыусы. Барыһы ла ҡыҫҡырып көлгән. "Улайһа, әйтегеҙ әле: көнөҙөнөнө был стакандағы ауырлыҡ үҙгәрәме ни?"- тип һораған тағы уҡытыусы. "Юҡ". "Шулай булғас, уны көнөҙөнө күтәреп тороуҙың әҙемтәләре нилектән килеп сыға, тип уйлайһығыҙ?" Уҡыусылар уҡытыусының был һорауына яуап бирә алмай, тынып ҡалған. "Әле әйтеп үткән ауыр хәлдә ҡалмаҫ өсөн хәҙер миңә нимә эшләргә һуң?" - тип мөрәжәғәт иткән уҡытыусы. Бер нисә тауыш: "Стаканды өҫтәлгә ҡуйығыҙ", - тип яуаплаған. "Эйе, шулай, - тип һөйләп киткән уҡытыусы. - Тормош ауырлыҡтары менән дә шулай эшләргә кәрәк. Әгәр ҙә улар тураһында һеҙ ун минут ҡына уйлаһағыҙ, барыһы ла яҡшы. Әгәр ҙә уларҙы һеҙ башығыҙҙан сығармай, бер туҡтамай уйлаһағыҙ, һеҙ үҙегеҙҙе үҙегеҙ ауыр хәлгә ҡуйырһығыҙ. Килеп тыуған проблемалар тураһында көнөҙөнө уйлау һеҙҙе һәләкәткә илтәсәк, һеҙ хәлдән тайясаҡһығыҙ, ауырый башлаясаҡһығыҙ. Әлбиттә, тормошоғоҙҙоң ҡатмарлыҡтары һәм проблемалары тураһында уйлау мөһим. Ләкин уларҙы ваҡытында башығыҙҙан сығарып ташлау, уйҙарығыҙҙы яҡшыға көйләү ҙә мөһим. Шуға ла һәр көн кисен борсолоуҙарҙы еңеп, яҡшы уйҙар менән йоҡоға талығыҙ. Ул саҡта һәр иртәлә яҙмыш ҡуйған һынауҙарҙы еңерлек көс менән уянырһығыҙ...".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22035

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1105